ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 март (буранай) 2017

№ 11 (741)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Балаһынан кем баш тарта?**



5

**Кем ул үҫмер?**

Ул ниндәй иғтибар талап итә?



6,12,13

**Илдархан Мутин -**

Минзәлә башҡорттарынан сыҡҡан милли хәрәкәт эшмәкәре



7

**Тарихын белгәндәр...**



көс менән түгел, ғилеме менән башҡаларҙы йыға 8-9

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 31 мартҡа тиклем 2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә (индекс 50665) ваҡытынан алда арзаныраҡ хаҡҡа яҙылыу бара, йәғни был осорҙа баҫмабыҙға яҙылыу 469 һум 92 тин, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II төркөм инвалидтары өсөн 423 һум 96 тин тәшкил итә.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Торғонлоҡ тип аталған теге йылдарҙа асыл асылынан ситләшә яҙҙы халҡыбыҙ. Хәҙер килеп ниндәй йәшәйеш ҡағиҙәләребеҙгә, йолаларыбыҙға, тәрбиә алымдарына йөҙ борорға кәрәк, тип иҫәпләйһегеҙ?

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, педагог:*** Беҙҙең төп йәшәйеш ҡағиҙәләребеҙ, халҡыбыҙҙы милләт итеп йәшәтеп килеүсе төп ҡиммәттәребеҙ - милли мираҫыбыҙҙа. Тамырҙары бик тәрәнгә киткән тарихыбыҙ, иңләп ҡолас етмәҫлек йолаларыбыҙ, донъя һоҡланырлыҡ моң-обоҙ-йырҙарыбыҙ, һоҡланып туймаҫ шәхестәребеҙ һәм быуаттар буйы быуындан-быуынға тапшырыла килгән тәрбиә ҡанундарыбыҙ тәшкил итә милли мираҫыбыҙҙы.

**Башҡорттоң тәрбиә ҡанундары донъя һоҡланырлыҡ "Урал батыр"ҙа тупланған. Халҡыбыҙ ниндәй ауырлыҡтарҙы, ҡырылыуҙарҙы еңеп, үҙен милләт булараҡ һаҡлап ҡалған икән, Урал батыр васыятына тоғролоҡ менән еңгән һәр төрлө ҡыйралыштарҙы.**

Тимәк, Яҡшылыҡ ҡылыуға ынтылған халҡыбыҙға Хоҙай һәр саҡ ярҙамға килгән. Ошо ҡанундарҙан тайпылмаһаҡ, киләсәк быуынға ошо ерлектә тәрбиә бирә алһаҡ, артабан да милләт булып һаҡланырбыҙ, үҙ телебеҙҙә уҡырбыҙ, йырларбыҙ, үҙ сәнғәтебеҙҙе үҫтерербеҙ, тарихыбыҙҙы өйрәнербеҙ, шәжәрәләребеҙҙе тамырыбыҙға хилаф килтермәй дауам итербеҙ. Рухи байлығыбыҙға эйә булып, донъя кимәленә танытырбыҙ. Йәмғиәткә, халыҡҡа файҙалы кеше булып, эпоста әйтелгәнсә, онотолмаҫ зат булып, үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡлап йәшәргә кәрәк. Уның өсөн Урал батыр васыятын үтәйек: ыуҙан ҡотолайыҡ, ил ташлап, сит яҡтарға олағып, башҡаларға олтан булмайыҡ, яҡшылыҡҡа ынтылайыҡ. Саф күңел менән йәшәү, таҙа намыҫлы булыу балалар тәрбиәләүҙә - иң мөһим шарт.

Халҡыбыҙҙың ошоғаса үҙен үҙ итеп һаҡлау серҙәренә төшөнөү маҡсатында байтаҡ ғалимдарҙың хеҙмәттәрен аҡтарҙым, һуңғы илле йыл эсендә генә Ер йөҙөнән юҡ ителгән милләттәрҙең яҙмышына күҙ һалдым һәм башҡорт халҡының тәрбиә ҡанундарын - этнопедагогикаһын өйрәндем. Ошо юҫыҡта Матвей Любавскийҙың фекере иғтибарымды айырыусы йәлеп итте. 1911-1917 йылдарҙа Мәскәү дәүләт университеты ректоры булған тарихсы ғалим, билдәле академик репрессия йылдарында Өфөгә һөргөнгә ебәрелә һәм тап шул йылдарҙа Башҡортостан тарихын өйрәнә башлай. Бына ниндәй һығымта яһай ул:

**"Рәсәй халыҡтары араһында бер халыҡ та, үҙ боронғолоғон, ер һәм көтөүлектәргә үҙ хоҡуғын, үҙенең милли көнкүрешен яҡлап ҡалыу өсөн, башҡорт халҡы кеүек көс һәм ҡан түкмәне. Тиңһеҙ алышта ул һан яғынан да, матди һәм, һис шикһеҙ, рухи яҡтан да ҙур юғалтыуҙарға дусар булды, әммә үҙенең этник ҡаҡшамаҫлығын асыҡланы, быуындан-быуынға күсә килгән милли мираҫын һаҡлап алып ҡалды..."**

Любавскийҙың халҡыбыҙ тураһында әйткән алтын һүҙҙәренең ошо өлөшөнә айырыуса иғтибарҙы йүнәлтәйек: "...үҙенең этник ҡаҡшамаҫлығын асыҡланы, быуындан-быуынға күсә килгән милли мираҫын һаҡлап алып ҡалды". Милли мираҫыбыҙҙы түкмәй-сәсмәй балаларыбыҙға биреп ҡалдырыу - бына беҙҙең бөгөнгө бурысыбыҙ.

Нимә ул милли мираҫ? Милли мираҫ тигән төшөнсәгә бик күп ҡиммәттәрҙе индерергә була. Милләтте милләт итеп туплаусы милли мираҫ ҡиммәттәренән тағы иң һиммәтлеһен - милли ғорурлыҡты телгә алырға кәрәк. Бөгөн беҙ һәр бер ғаиләлә балала милли ғорурлыҡ тәрбиәләргә тейешбеҙ. Мин - башҡорт, тип күкрәк һуғып, өйөндә балаларың менән башҡа телдә һөйләшеү милли ғорурлыҡҡа инмәй, ә бына баланың кескәй генә йөрәгенә үҙ милләте менән ғорурлыҡ тойғоһо һала белеү - ул ысын патриотлыҡ. Бала, мин ер шарында йәшәгән бөтөн милләттәр кеүек үк тиң хоҡуҡлы милләт вәкилемен, бер кемдән дә артыҡ та, кәм дә түгелмен; туған телем дә, булмышым да, тарихым да, йолаларым да, мәҙәниәтем дә мине донъя кимәленә сығарырлыҡ һәм һоҡланырлыҡ, тип үҫергә тейеш.

**Баланың буйын үҫтергән саҡта уйын да ошо юҫыҡта үҫтереү мотлаҡ. Иң мөһиме - туған телеңде белмәй тороп, туған халҡыңдың рухи хазинаһына эйә булып булмағанын бала күңеленә бәләкәй саҡтан һеңдерә барырға кәрәк.**

Ә был тәрбиәне фәҡәт ғаилә генә бирә. Өйҙә туған тел, туған моң яңғырап торһон, урындағы телевидение үҙәктәрендә балалар өсөн балалар ҡатнашлығында башҡортса тапшырыуҙар күрһәтелһен, һәр районда йәй көндәре балалар өсөн "Йәйләү" программаһы буйынса ял итеү үҙәктәре ойошторолһон һәм, әлбиттә, этнопедагогиканы төп нигеҙе итеп яҙылған "Башҡорт тарихы һәм мәҙәниәте" программаһы буйынса уҡытыу һис кисекмәҫтән яңынан тергеҙелһен.

**(Дауамы 2-се биттә).**



12+

✓ *Уларҙың бит башҡа мәктәптәрҙән айырмаһы туған тел өйрәнеү менән генә сикләнергә тейеш түгел. Башҡорт мәктәбе икән ул, тимәк, балаларыбыҙ унда милли рух һәм мәҙәниәтебеҙ өлгөләрендә тәрбиәләнергә, белем алырға тейеш.*



СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ЗАМАН МЕНӘН БЕРГӘ...

## үҙебеҙ ҙә үҙгәрҙек түгелме?

**Башҡорттарҙа ғәҙеллек тойғоһо көслө, был уларҙың тура һүҙле булыуында, хаҡлыҡ менән ялған араһына ҡәтғи сик ҡуйыуында ла күренә. Халҡыбыҙҙың донъяны изгелек һәм яуызлыҡҡа бүлеүе халыҡ ижадында ла асыҡ сағыла. Был сифатыбыҙ беҙгә бөгөн артыҡ ҡамасауламаймы?**

***Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА, яҙыусы:*** Мин, ғөмүмән, ниндәй ҙә булһа халыҡты идеаллаштырыуға ҡаршымын. Һәр милләттең яҡшыһы, яманы бар. Шулай уҡ теге йәки был милләттең ниндәйҙер сифаттарын да идеаллаштырыу мөмкин түгел. Шул уҡ ғәҙеллек тойғоһо һәр халыҡта ла бар. Әммә бөгөн заман, әхлаҡи ҡиммәттәр шул тиклем үҙгәргән, нимә ул ғәҙеллек, тигән һорауға ла яуап эҙләргә тура килә. Ҡалала йәшәгәндә был һиҙелмәй ҙә, мин үҙем дә идеалдарға ышанған кешеләр уратыуында йәшәй инем. Көнләшмә, алдама, урлама тигән борон-борондан килгән ҡанундар бар, ошоларҙы дөрөҫ тип ҡабул итәбеҙ, донъя шулай икән тип уйлайбыҙ, сөнки дуҫтарыбыҙ ҙа, уларҙың фекерҙәре лә үҙебеҙгә оҡшаш була. Ә донъя ныҡ үҙгәргән, баштүбән әйләнгән. Шуға ла ғәҙеллекте лә бар икән ул, тип уйлайбыҙ ғына, ысынында иһә, ул юҡ кимәлендә. Быны белеү һәм быға күнеү ҙә шулай уҡ ҡурҡыныс.

Беҙ алсаҡ, ихлас, ҡунаҡсыл, ғорур, батыр, тип хәбәр һөйләгәнсе, бер-беребеҙҙең күҙенә ҡарап, дөрөҫлөктө әйтергә мәл еткән бөгөн. Ауыл - милләттең киләсәге, ул милләттең тамыры, тибеҙ. Ә ауылдарҙың хәле яҡшы түгел. Быны сәбәбен дә аңлайым. Коммунизмға китеп бара инек, ҡапыл кире боролдоҡ. Илебеҙгә, партиябыҙға, комсомолға, колхоз рәйесенә, бригадирға, ғөмүмән, бер-беребеҙгә кәрәкбеҙ, тип уйлап йөрөгән халыҡ үҙенең бер кемгә кәрәк түгеллеген аңланы. Ҡот осҡос алданыу тойғоһо барлыҡҡа килде. Шул арала миллионлаған кешенең көсө менән йыйылған ил байлығын бер нисә кеше үҙләштереп өлгөрҙө. Тағы һемәйҙе халыҡ. Хаҡлыҡ, тоғролоҡ, ғәҙеллеккә бер кем дә ышанмай тиерлек хәҙер. Баҙар иҡтисады ла насар йоғонто яһаны, капитализм мәҙәниәте юҡ беҙҙә. Аҡса тота белмәйбеҙ, шуға ла халыҡ кредиттар тоҙағына батҡан. Тиҙ аҡса эшләргә теләп, спиртлы эсемлектәр менән һатыу итеүселәр күбәйҙе. Шул уҡ ваҡытта эшләргә теләүселәр юҡ. Заман менән бергә халыҡ та үҙгәрҙе. Нимә ул насар, нимә ул яҡшы, тип һөйләшер алдынан, ошо темаға әңгәмәләшкән кеше өсөн нимә - яҡшы, нимә насар икәнен асыҡлап алыу дөрөҫ. Сөнки ошо кимәлдә лә ҡиммәттәр ҡаҡшаған, бер кешегә - бер нәмә, икенсе кешегә бөтөнләй икенсе нәмә яҡшы. Алдашыу, урлау - аҡыллы, сос булыуындың күрһәткесе, тип инанғандар бар бит. Шуға ла ғәҙеллек, тоғролоҡ кеүек сифаттары булған кешеләргә улар араһында йәшәүе ҡыйын. Улар хәҙер ахмаҡ хәлендә.

Кешене хөкөм итмә, хөкөм ителмәҫһең, ти, был хөкөм итергә маташыу түгел, ә ысынбарлыҡҡа күҙҙе асып ҡарарға өндәү генә. Дауаланыу өсөн тәүҙә ауырыуынды танырға кәрәк. Үҙебеҙгә-үҙебеҙ һоҡланыуҙан арынып, милләттең бөгөнгө хәлен таныһаҡ, үҙебеҙҙе ошо етешһеҙлектәребеҙ менән ҡабул итһәк кенә, уны ҡотҡарыуҙың юлдарын эҙләй башлаясаҡбыҙ.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Торғонлоҡ тип аталған теге йылдарҙа аҫыл асылынан ситләшә яҙҙы халҡыбыҙ. Хәҙер килеп ниндәй йәшәйеш ҡағиҙәләребеҙгә, йолаларыбыҙға, тәрбиә алымдарына йөҙ борорға кәрәк, тип иҫәпләйһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Илдар ШӘЙӘХМӘТОВ, "Любизар" Беренсе башҡорт атлы полкы"хәрби-тарихи клубының идара рәйесе, Республика дан музейы ғилми хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Борон башҡорт балаһын атлай башларҙан алда атҡа атландырған, һыбай йөрөргә, сабышырға өйрәткән. Ә бөгөнгө шарттарҙа хатта ауыл ерҙәрендә лә ат янына яҡын килергә ҡурҡып тора бала-саға, сөнки атаһы йә ҡартатаһы ат аҫрамай икән, бала уның менән аралаша алмай, ат күрмәйенсә тиерлек үҫә. Бындай шарттарҙа, әлбиттә, ата-бабаларҙың боронғо шөғөлө, йола-традициялары онотола бара, быуындар бәйләнеше юғалыуға дусар ителә. Шуға бәйле, теге йәки был быуын аңында милли рух тигән нәмәнең дә эҙе лә ҡалмауы ихтимал. Бына шуныһы хәүефле. Шуға күрә лә милли рухыбыҙ менән бәйле йолаларыбыҙҙы, боронғо шөғөл, һөнәр төрҙәрен йәш быуынға күрһәтеү, көндәлек тормошта ҡулланыу, танытыу кәрәк, тигән уйҙамын. Бына минең үҙемә, мәҫәлән, бәләкәй саҡтан "ат ене" ҡағылды, сөнки Шириязддан ҡартатайым ғүмер буйы йылҡы аҫраған. Кемдеңдер ата-олатаһы, әйтәйек, умарта тота, бал ҡорто аҫрай. Тимәк, был ғаиләлә үҫкән балалар башҡортта ҡортсолоҡтоң ни икәнен, әһәмиәтен, һөнәр серҙәрен кескәйҙән белеп, үҙләштереп үҫә. Дөрөҫ, бөгөн ауылдарҙа ла хатта һәр бер ғаилә малсылыҡ, ҡортсолоҡ менән шөғөлләнә лә алмай (ә кәрәк ине), уның ҡарауы, балаларға милли йола-традицияларыбыҙҙы, боронғо кәсеп төрҙәрен мәктәптәрҙә өйрәтеү мөмкинлеге бар, тип уйлайым. Ҡалаларҙа ла, районадарҙа ла беҙҙең башҡорт гимназиялары бар бит! Үкенескә, һуңғы осор улар үҙ йөҙҙәрен, йүнәлештәрен юғалта бара һымаҡ миңә. Уларҙың бит башҡа мәктәптәрҙән айырмаһы туған тел өйрәнеү менән генә сикләнергә тейеш түгел.

**Башҡорт мәктәбе икән ул, тимәк, балаларыбыҙ унда милли рух һәм мәҙәниәтебеҙ өлгөләрендә тәрбиәләнергә, белем алырға тейеш. Мәҫәлән, ниңә әле ошондай мәктәптәрҙә һыбай йөрөү дәрестәре (ул факультатив йә ҡыҙыҡһыныу буйынса түңәрәк булыуы ла ихтимал) үткәрмәҫкә?**

Бының икеләтә файҙаһын күрәсәк балалар, сөнки һыбай йөрөү - үҙе гимнастика. Ул арҡаны, һынды тура тоторға өйрәтә, йөҙөү мәлендәге һымаҡ уҡ, мускулдарға ял да, көсөргәнеш тә бирә, ҡан тамырҙарын киңәйтә, массаж һөҙөмтәһен бирә. Үҫмерҙәр өсөн был айырыуса файҙалы. Элек шуға ла халҡыбыҙ үрсемле, һауһаҡ, талымһыҙ булған.

**Республикабыҙ Мәғариф министрлығы башҡорт мәктәптәрендәге уҡытыу-тәрбиә эшенә һыбай йөрөү нигеҙҙәрен йәки ҡортсолоҡ менән шөғөлдөң башланғыс нигеҙҙәрен өйрәнеү программаһын индерһен ине.**

Был эште йылҡы аҫраусы хужалыҡтар, умартасылар менән килешеүҙәр төҙөү аша ла хәл итеп була бит.

**Бынан тыш, ат өҫтөндә йәйәнән уҡ атыу, сәкән һуғыу кеүек милли уйындарыбыҙҙы ла өйрәтергә мөмкин булыр ине. Был да проблема түгел: бөгөн бына тигән егеттәребеҙ халҡыбыҙҙың уҡ атыу шөғөлөн тергеҙеп ебәрҙе.**

"Мәргән уҡсы" фестивален тамаша ҡылып, балалар үҙҙәре лә ана шул уҡсылар сафын тулыландырасаҡ әле, тип ышанам, сөнки был иҫ киткес мауыҡтырғыс спорт төрө.

***Асия ҒӘЙНУЛЛИНА, Сибай сәнәғәт колледжы ҡарамағындағы "Урал батыр" ҡобайыр үҙәге етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Бөгөнгө көндә ил буйынса ҡайһы бер уҡыу йорттары ҡыҫҡартылып, ябылыуға дусар ителгән бер мәлдә беҙҙең Сибай сәнғәт колледжының, киреһенсә, яңы бүлек асылып, этнохудожество ижад йүнәлеше буйынса тағы ла киңәйеүе күңелдә ҡыуаныс ҡына тыуҙыра. Тимәк, беҙгә ҡолас ташлап эшләргә юл асыла. Хәйер, был йүнәлештә беҙ эште әллә ҡасандан уҡ башлағайныҡ инде. Үткәргән һәр бер сарабыҙҙың иң башында тап ана шул тәрбиә мәсьәләһе ята ла. Сәсәндәр мәктәбе булдырып, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса конкурстар ғына ла күпме талантлы балаларыбыҙ барлығын асыҡларға ярҙам итте, күпме телһөйәрҙәр, илһөйәрҙәр тәрбиәләне!

**Ә һуңғы ваҡыттағы башҡорт милли кейемдәрен тергеҙеү буйынса дәррәү эштәр ҙә шул уҡ тәрбиә мәсьәләһен күҙҙә тота түгелме ни? Һәр бала үҙ телен, халҡының ауыҙ-тел ижады өлгөләрен һәм йолаларыбыҙҙы биш бармағылай белгән кеүек, шул уҡ башҡорт кейеме, башҡорт ризыҡтары, башҡорт аты, уҡ-һаҙағы, балыбашҡаһы хаҡында ла яҡшы белеп үҫергә тейеш.**

Мин алып барған "Ете ҡыҙ" этностудияһына, мәҫәлән, ҡыҙҙар матурлыҡта ярышам, тип түгел, ә иң беренсе башҡорт ҡатын-ҡыҙының түшелдерек һәм селтәр-ҡашмауҙарын, күлдәк-камзулдарын үҙ ҡулдары менән эшләп, тегеп кейеү теләге менән янып килә. Тимәк, милли кейем һәм боронғо биҙәүестәр улар өсөн мәртәбә, ғорурлыҡ! Был шөғөл айҙар буйына һуҙылып, уларҙан бик ҙур түҙемлек, белем, ижад ҡомары талап итәсәген дә белеп киләләр. Әйткәндәй, унда ҡыҙҙар өлкән йәштәге ағинәйҙәр менән бергә шөғөлләнә. Был әлеге халыҡ йолалары өлгөһөндә тәрбиәүи мәсьәләләрҙе лә хәл итеүгә бик яҡшы ярҙам булып тора ла инде. Дөрөҫөн әйткәндә, баланы рухи мираҫыбыҙ өлгөләрендә тәрбиәләү сабый әсә ҡарынында, унан бишектә ятҡанда уҡ башланырға тейеш. Мин бында халҡыбыҙҙың көйләп, бала бәүетеү йолаһын күҙҙә тотоп әйтәм. Уның ябай ғына көй һәм интонация теҙмәһе түгеллегенә үҙем инанғанмын:

**бала бәүетеп көйләүҙең беҙ аңлап бөтмәгән тылсымы бар. Ул туранан-тура баланың аң ҡеүәһенә тәьҫир итеп, уның психик халәтен көйләй, тынысландыра, ҡурсылай.**

Был хаҡта әйткәнем дә бар. 2003 йылда ЮНЕСКО тарафынан Бүрәт республикаһында булып үткән "Донъя бишек йырҙары" халыҡ-ара конкурсындағы сығышым менән япондар бик ҡыҙыҡһынған һәм улар минең бишек йырын күсереп алып, уны релакс-диск составына индереп тә ебәргәндәр.

**Йә булмаһа, әкиәттәребеҙҙе алып ҡарайыҡ. Башҡорт халыҡ әкиәттәренең һәр береһе кешене изгелеккә, яҡшылыҡ хаҡына батырлыҡҡа өндәй, иллә мәгәр беҙҙең әкиәттәрҙә яуызлыҡ, хәйлә, алдаҡ юл менән кемделер төп башына ултыртыу ("һиңә - шалҡандың һабағы, миңә - тамыры" һымаҡ) тигән нәмә юҡ.**

Был да үҙенә күрә бик ҙур тәрбиә мәктәбе. Балаларығыҙға әкиәттәрҙе күберәк уҡығыҙ!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә Рәсәй сит ил эштәре министры Сергей Лавровтың Евразия гуманитар хеҙмәттәшлеге мәсьәләләре буйынса илдең биш субъекты етәкселәре менән осрашыуында ҡатнашты. Унда шулай уҡ Алтай, Татарстан, Хакасия һәм Яҡутстан башлыҡтары ла булды. Осрашыу барышында Евразия континентында интеграцияның гуманитар аспекттарын үҫтереүҙә Рәсәй төбәктәренең ҡеүәтен файҙаланыу мөмкинлектәре тикшерелде.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев Федераль Йыйылыш ҡарамағындағы Рәсәй Федерацияһы Законлар сығарыусылар советы Президиумы ултырышында ҡатнашты. Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Максим Топилин һәм Рәсәй Социаль страховкалау фонды рәйесе Андрей Кигим ҡатнашлығындағы ултырышта Рәсәй Федерацияһында инвалидтарҙы социаль яҡлау өлкәһен закондар йәһәтенән тәьмин итеү мәсьәләләре тикшерелде.

✓8 апрелдән Башҡортостанда экологик өмәләр башлана, уларҙың төп бурысы - тораҡ биләмәләренең санитар-экологик торошон яҡшыртыу. Төбәк Хөкүмәте дәүләт власы органдарына, муниципалитеттарға, төрлө милек формалары ойошмаларына, профсоюз комитеттарына һәм йәмәғәт берләшмәләренә беркетелгән биләмәләрҙә экологик өмәләр уҙғарырға ҡушты. Экологик өмәләр 13 майға тиклем барасаҡ, тип хәбәр ителәр Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә.

✓Башҡортостанда Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһы методикаһы буйынса эшһеҙҙәр һаны 115 мең кешенән артҡан. Бер йыл элек республикала 122 меңдән ашыу эшһеҙ иҫәпләнгән. Башҡортостандың мәшғүл халыҡ иҫәбе 1,892 миллион кешенән күберәк. Мәшғүллек кимәле 63 процент тәшкил итә, тип хәбәр иттеләр төбәктең Хеҙмәт министрлығында. Төбәктең мәшғүллек хеҙмәттәрендә теркәлгән эшһеҙҙәр һаны 1 мартҡа 24,3 меңләп кеше тәшкил иткән. Йыл башынан эшһеҙ статусы республиканың 7,3 мең самаһы кешеһенә бирелгән.

✓Ғәлим Яҡупов Башҡортостан Республикаһы Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Ғәлим Яҡупов республикала электрон киң мәғлүмәт сараларын үҫтереү мәсьәләләренә яуаплы буласаҡ.

*✓ Мәҫәлән, "Беҙгә ҡурҡмағанлығыңды иҫбатла: бейек ҡатлы йорттоң асыҡ тәҙрәһе төбөнә менеп баҫ, күперҙән һикер, тимер юлға арҡыры ят" һәм башҡа шундай заданиелар бирелә.*

ИҪКӘРТЕҮ

# "ЗӘҢГӘР КИТ" АУЫНА...



## эләкмәһен балаң

**Киң мәғлүмәт саралары көн дә шаҡ ҡатырғыс хәбәрҙәр яуҙырып ҡына тора, шаңҡыу түгел, уларҙы уҡып, аңға һеңдереп тә өлгөрөп булмай. Бына әле лә интернет сайттарында Екатеринбургта йәшәгән 12 йәшлек баланың мейеһенә ҡан һауып - инсульттан, Башҡортостанда 11-се класс уҡыусыһының ҡан әйләнешен тотҡарлаған тромб сәбәпле үлеүҙәре хаҡында хәбәр ителә.**

Был үҫмерҙәрҙең тәүгеһе компьютер уйындары клубында бер туҡтауһыҙ 12 сәғәт буйына уйнап ултыра торған булған. Икенсеһе, аяғын һындырып, йөрөй алмағанлыҡтан, шулай уҡ виртуаль уйынға бирелә һәм унда, аҙаҡ иҫәпләүҙәренсә, 2 мең сәғәт ваҡытын сарыф итә. Шул ваҡыт эсендә ул БДИ имтихандарына әҙерләнә ала ине лә, тик уның ни менән шөғөлләнеүе хатта ата-әсәһен дә ҡыҙыҡһындырмаған. Ваҡытты әрәм-шәрәм итеү - ярай инде, ә бына көндәр, сәғәттәр буйы хәрәкәтһеҙ ултырыу ҡан ойошоуға килтереп, үҙенең ҡотолғоһоҙ эшен эшләп тә ҡуя...

Йә булмаһа, социаль селтәрҙәрҙә яуыз уй менән "эшмәкәрлек" алып барыусы "үлем төркөмдәре" ауына килеп эләгеүсе балаларҙың күрәләтә һәләкәткә атлауы хаҡында йылдан ашыу инде төрлө мәғлүмәттәр бирелеп килә. Әлеге төркөмдәрҙең маҡсатлы рәүештә балалар аңын эшкәртеүгә ҡоролған программаһында секталар эше техникаһы ярылып ятыуын күрмәү мөмкин түгел. Улар хис-тойғоға бирелеүсән балаларҙың йомшаҡлығын оҫта файҙаланып, улар күңелен яулай һәм зомбиға әйләндерә. Махсус "куратор" тәү ҡарашҡа еңел генә йомоштар ҡушыуҙан башлай эште. Тәүҙә, әлбиттә, баланың тулы анкетаһы, хатта, тулы психологик портретын төҙөү маҡсатында, йәнәһе лә, шәхси мәғлүмәттәре һорап алына. Үҫмерҙең ниндәй шарттарҙа һәм ғаиләлә йәшәүе ҡыҙыҡһындыра уларҙы. Красноярскиҙағы 13 йәшлек ҡыҙҙың шул төркөмгә инеп, тәүге задание - ҡулына лезвие менән киҫеп, зәңгәр кит һүрәтен эшләп алғанын, һуңғы ваҡыт уның үҙен бик сәйер тотоуын, ярай, класташтары күреп ҡала һәм уҡытыусыға хәбәр итәләр. Ваҡытында киҫәтеп өлгөрмәгәндә, киләһе йомоштарҙың күпкә хәтәрерәк булыуы бар ине бит. Мәҫәлән, "Беҙгә ҡурҡмағанлығыңды иҫбатла: бейек ҡатлы йорттоң асыҡ тәҙрәһе төбөнә менеп баҫ, күперҙән һикер, тимер юлға арҡыры ят" һәм башҡа шундай заданиелар бирелә. Үҫмерҙәр ғүмере менән уйнаусы бындай төркөмдәрҙең маҡсаты ниҙә һуң? Әлбиттә, бизнес! Унан сайтҡа инеүселәр һанын арттырыу ҙа ҙур файҙаға ғына икән...

Әйткәндәй, Хәүефһеҙ интернет лигаһы иҫәпләүҙәренсә, балалар араһында суицид пропагандалаусы төркөмдәрҙең яҙылыусылары 1,5 меңдән 11 меңгә барып етә. Яңыраҡ хәбәр ителеүенсә, ил буйынса ҡайһы бер мәктәптәрҙә, ниһайәт, тикшереүҙәр башланған: баланың ҡулында шикле яҙыуҙар һәм кит һүрәте юҡмы? Эйе, ата-әсәнең балаһында эше юҡ икән, исмаһам, мәктәп ҡыбырҙаһын ине. Ә шулай ҙа үҫмер бала ғаилә ағзаларының иғтибар үҙәгендә булырға тейеш, тигән ябай хәҡиҡәтте тағы бер ҡабатларға тура килә. Балаһының ни менән ваҡыт уҙғарыуына, кәйефенә битараф ғаилә - ул инде, ысынын әйткәндә, ғаилә лә түгелдер. Егерме йыллап әлек беҙ балаларыбыҙҙы урамда таныш түгел кешеләр менән һөйләшмәҫкә, бер кемгә лә ишек асмаҫҡа балалар баҡсаһы йәшенән үк өйрәтә торған булһаҡ, бөгөн улар өсөн иҫкәрмәләр бер аҙ үҙгәреш кисерҙе. Бына ошо юлдарҙы ҙур, асыҡ хәрефтәр менән күсереп яҙып, балағыҙҙың дәрес әҙерләй торған өҫтәле янына элеп ҡуйһағыҙ ҙа була:

- Интернет селтәрендә таныш түгел кешеләр менән аралашма;
- Дуҫтарың иҫәбенә үҙең белгән кешеләрҙе генә өҫтә;
- Интернетҡа яҡындарың өсөн генә иҫәпләнгән һәр төрлө фотоһүрәттәреңде элмә;
- Шәхси мәғлүмәттәреңде бер кемгә лә бирмә, ҡушымталағы геолокация хеҙмәтен һүндереп ҡуй;
- Чаттарҙа приватлылыҡ һаҡлап, шәхси, күҙмә-күҙ аралашыу юлын һайла.

Социаль селтәрҙә хәүефһеҙлек саралары бына ошолар, ләкин хатта улар ҙа баланы уратып алған тере мөхитте алыштыра алмай.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Рәсәй Президенты Владимир Путин сайттар һәм социаль селтәрҙәр аша балаларҙы үҙ-үҙҙәренә ҡул һалыуға этәргән өсөн язаны ҡәтғиләштереүҙе хупланы. Ошо хаҡта дәүләт башлығы Рәсәй Эске эштәр министрлығы коллегияһы ултырышында белдерҙе.**

**"Енәйәтселәр - ә уларҙы башҡаса атап булмай - тәү сиратта үҫмерҙәр һәм йәштәр аудиторияһына, психикаһы нығынып бөтмәгән йәки ауыр тормош хәлендә булған балаларға төбәлгән", - тип Владимир Путиндың телмәренән өҙөк килтерә ТАСС. Президент Дәүләт Думаһы депутаттарының ҡануниәтте үҙ-үҙенә ҡул һалыуға алып барып еткергән өсөн эштәр исемлеген киңәйтеүсе нормалар менән тулыландырыу хаҡында башланғысын хупланы. "Ул бындай сайт хужаларын, уларҙы уйлап сығарыусыларҙы һәм администраторҙарҙы яуаплылыҡҡа тарттырырға, уларҙың емергес эшен, енәйәт эшмәкәрлеген иҫкәртеү мөмкинлеге бирәсәк", - тине Владимир Путин.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**
**(Теманың дауамын 6, 12, 13-сө биттәрҙә уҡығыҙ).**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ

# МИЛЛӘТЕНЕҢ ҘУР ТАРИХЫН

## Беҙгә ныҡлап өйрәтә...

*15 йәш тә тулып китте,*
*Беҙҙең "Киске Өфө"гә.*
*Ҡәҙерле ҡунаҡ бит ул,*
*Гәзит һөйгән һәр өйгә.*
*Үткер һүҙе менән үҙе,*
*Насарлыҡты йүнәтә.*

*Ғәҙел һүҙҙәре менән*
*Яманлыҡты киҫәтә.*
*Һәр битендә аҡыҡ һүҙҙәр,*
*Йәшәү юлын күрһәтә.*
*Милләтенең ҙур тарихын,*
*Беҙгә ныҡлап өйрәтә.*

**"Киске Өфө" гәзитен мин байтаҡтан алдырам, уҡыйым, уның тураһында башҡаларға ла һөйләйем. Ул тормоштоң бөтөн өлкәләренә, хәленә, төрлө ваҡиғаларына туҡтала, көнүҙәк мәсьәләләрҙе ялмап ала, ярып һала, йәшәргә, эшләргә дәртләндерә.**

Гәзиттә ниндәй генә тема яҡтыртылмай! Әле бына һәр кем уҡый торған 100 башҡорт китабы акцияһы башланғас, ауылыбыҙҙа ярышып китап уҡый башланыҡ. Күршеләрем Зифа менән Әлхәм Йосоповтар ауыл китапханаһындағы китаптарҙы уҡып бөтөп, һәр кемдең өйөндә булғандарҙы алып уҡый башланы. Үҙҙәренә ингән һәр кемгә, өс улдарына төрлө тарихтар, китаптарҙың эстәлеген һөйләйҙәр. Башҡорт әҙәбиәтен белеү - халҡың тураһында белеү ул, әҫәрҙәрҙә халҡыбыҙҙың йолалары, көнитмеше, холоҡ-ҡылығы сағыла бит. Бәлки, был акция йәйләп һәр башҡорт уҡый торған тарихи хеҙмәттәр исемлеген тулыландырыуға әйләнеп тә китер. Сөнки "Киске Өфө" үҙе лә тарихыбыҙ темаһына ҙур урын бирә. Мин дә, минең таныштарым араһында күптәр ошо тарихи мәҡәләләрҙе үҙ итәбеҙ. Ул тарихты мәктәптә уҡытмайҙар, шуныһы менән дә ҡиммәт гәзиттәге был сығыштар.

Арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән бер рәттән, бөгөнгө заман азаматтары, йәштәр менән таныштырыуығыҙҙы хуплайым. Былар ҙа үҙенә күрә тәрбиә мәктәбе, яҡшы кешеләрҙең тормошо ла, эшмәкәрлеге лә үҙе бер һабаҡ. Гәзиттең һуңғы битендәге "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһы кешегә үҙ холҡон, башҡаларға, тормошҡа мөнәсәбәтен үҙгәртергә, үҙен-үҙе тәрбиәләргә булыша. Бер көндө ауылдашым 83 йәшлек Нәфисә апай ошо рубрикала фәрештәләр тураһында уҡыған да, хайран ҡалып һөйләп тора. Бәлки, ул был турала алдан да ишеткәне булғандыр, тик ҡағыҙға баҫылғанға күберәк ышанаһың бит ул. Өлкән йәштәге кешенең иманы тағы ла нығыныуы, Аллаға тағы ла нығыраҡ һығыныуы яҡшы бит. Быларҙың барыһы ла "Киске Өфө"нөң көсөн, йоғонтоһон, йөрәктәрҙе тетрәндереүен, ябай ғына итеп аңлата белгән мөғәллим, остаз булыуын күрһәтә.

Донъяла ҡыҙыҡлы кешеләр күп бит ул. Ғәҙәти генә һөнәр эйәһе, хатта ауылдан бер ҡасан да сыҡмаған кешеләрҙең эсе тулы хазина була. Бына шундай кешеләр, шулай уҡ икмәк бешереүсе, урам һепереүсе, завод эшсеһе бөгөн ниндәй уйҙар-хыялдар менән йәшәй - былар тураһында ла белгем килә гәзит биттәре аша. Уларҙың үҙҙәре, башҡарған эштәре, бәлки, күҙгә бәрелеп тә бармайҙыр, әммә беҙ уларһыҙ йәшәй ҙә алмайбыҙ. Мәктәптәр менән бәйләнеште нығытһағыҙ ине. Элек мин уҡытыусы булып эшләгәндә класс сәғәтендә уҡыусылар төрлө гәзиттәргә күҙәтеү яһай ине, шуның өсөн донъя хәлдәрен дә белделәр, телдәре лә шымара ине, гәзит уҡырға ла өйрәнделәр.

Матур әҙәби әҫәрҙәрҙе лә көтөп ҡалабыҙ. Башваҡысты ла яратып сисәбеҙ. "Баш ватыу" мейе эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, тимәк, сәләмәтләндерә. Балаларға ла файҙалы бындай күнегеүҙәр, башҡортса һүҙҙәрҙе лә үҙләштерәләр. Теле оҡшай "Киске Өфө"нөң. Йомшаҡ, халыҡсан, күңелгә ятып тора. Ошо ла уны халыҡҡа яҡынайта, тип уйлайым.

*"Киске Өфө", "Киске Өфө",*
*Башҡортостан-Гөлбостандың*
*Ал сәскәле гөлө бул!*
*Бөтә гәзит-журналдарға,*
*Ялҡын һүҙле өлгө бул!*

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы Байым ауылы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Башҡортостан" телерадиокомпанияһы генераль директоры вазифаһына Рөстәм Зарафетдинов тәғәйенләнде. Ул - билдәле тележурналист. 2015 йылдың июненән алып Рәсәй Федерацияһы Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабичтың матбуғат секретары вазифаһын биләне.

✓Өфөлә 20-26 апрелдә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында сағыу мәҙәни ваҡиға - "Театр яҙы" үткәрелә. Проект Башҡортостан Башлығының грантына лайыҡ булған. Фестивалдә республиканың бөтә дәүләт театрҙары ҡатнаша. Башҡорт опера һәм балет театры "Салауат Юлаев" спектакле менән конкурс программаһында тәүгә ҡатнаша. Заманса режиссура һәм драматургия үҙәге документаль театр жанрында спектакль - "Үҙебеҙҙекеләр" тигән вербатим тәҡдим итә.

✓Башҡорт дәүләт медицина университетының студенттар командаһы Бешкәктә микробиология, вирусология һәм иммунология буйынса I Халыҡ-ара олимпиадала беренсе урын яуланы. Олимпиадала Рәсәйҙең, Ҡаҙағстандың һәм Ҡырғыҙстандың туғыҙ юғары уҡыу йортонан 12 команда ҡатнашты.

✓21 мартта Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры үҙенең 85 йыллыҡ юбилейына арналған тантаналы кисә үткәрә. Был көндө театр үҙенең ҡунаҡтарын юбилей миҙгеленең иң көтөп алған премьераһы - көнсығыш әкиәттәре мотивы буйынса өлкәндәр өсөн "Мең дә бер кисә" спектакле менән ҡыуандырасаҡ.

✓Республикала күп балалы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр өсөн декрет пособиеһының күләме артыуы ихтимал. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов әйтеүенсә, әлеге ваҡытта күп балалы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә айлыҡ аҡсалата түләү йәш ярымдан алып өс йәшкә тиклемге өсөнсө йәки артабанғы һәр балаһы өсөн өс мең һум тәшкил итә.

✓Февраль айында Башҡортостанда эшһеҙлек буйынса пособиеның уртаса күләме 4067 һум йәки эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы дәүмәленән 45,9 процент тәшкил иткән. Төбәктә минималь күләмдә эшһеҙлек буйынса пособие алыусыларҙың өлөшө 31 проценттан ашҡан, ә максималь пособие алыусылар һаны - 52 процент.

**“Башинформ”дан.**

**✓ Ике мотлаҡ фәндән насар билдә алған, шулай уҡ төп этаптың резерв көнөндә был фәндәрҙе тапшыра алмаған сығарылыш уҡыусылары өҫтәмә осорҙа рус теленән һәм математиканан имтихандарын яңынан бирә ала.**



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КҮРГӘҘМӘЛӘР

**Өфөлә Агросәнәғәт форумы һәм XXVII "АгроКомплекс-2017" халыҡ-ара күргәҙмәһе асылды.** Уның эшендә Рәсәйҙән, шулай уҡ яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән 300-ҙән ашыу компания ҡатнаша. Улар араһында - Белоруссия, Украина, Ҡаҙағстан, Германия, Нидерландтар, Франция, Польша, Италия, Англия, Бельгия һәм Ҡытай. Быйыл күргәҙмә экспозицияһының дөйөм майҙаны 15 мең квадрат метрҙан ашыу тәшкил итә. Күргәҙмәлә урындағы ауыл хужалығы етештереүселәре лә әүҙемлек күрһәтә. "Алексеевка" совхозы ҡыҙыл эремсек һәм Ацидофилин әсе һөт продуктын тәҡдим иткән, йәшелсә шарлауығы рәүешендә эшләнгән йәшелсә экспозицияһы иһә бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Башҡортостандың Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге күргәҙмәлә 250-нән ашыу продукция менән таныштырҙы. "Башҡортостан аҙыҡ-түлеге" брендының стенды янында ла байтаҡ халыҡ йыйылды.

# АВТОБУС ЙӨРӨЙӘСӘК!

**13 мартта "Башинформ" агентлығы "Башавтотранс" предприятиеһының 101к төнгө маршрутын ябырға теләүе хаҡында мәҡәлә баҫтырып сығарғайны. Рейстар дәүләт предприятиеһы өсөн файҙаһыҙ булып сыҡҡан.** Эксперт компромисс вариант табырға, йәғни ҙур автобусты бәләкәй габаритлы автобусҡа алмаштырырға тәҡдим итте. Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, 20 мартҡа тиклем "Көньяҡ автовокзал - Аэропорт" 101к төнгө маршрутын "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһының күп кеше һыйҙырышлы "НефАЗ" маркалы автобустары башҡара, һуңынан "Мерседес" автобусы рейсҡа сыға.

"Был йүнәлеш туҡтатылмай. Транспорт йөрөйәсәк. Белгестәр аҙна дауамында пассажирҙар ағымын тикшерәсәк, һуңынан уның һөҙөмтәләре буйынса рейстарҙың йышлығы мәсьәләһе хәл ителәсәк", - тип билдәләнеләр Башҡортостан Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетында.

# АЛДАН ТАПШЫР!

**23 мартта Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтиханын ваҡытынан алда тапшырыу этабы башлана. Ул 14 апрелгә тиклем барасаҡ.** Хәбәр ителеүенсә, ошо этап ваҡытында өс имтихан ҡабул итеү пункты эшләйәсәк, икеүһе - Өфөлә, берәүһе - Стәрлетамаҡта. 800-ләгән кеше ваҡытынан алда имтихан тапшырырға ниәтләй, уларҙың күбеһе - уҙған йылдарҙа мәктәп тамамлаусылар. Быйыл БДИ өс этапта үткәрелә: ваҡытынан алда тапшырыу, төп (29 майҙан 1 июлгә тиклем) һәм өҫтәмә этап (5 сентябрҙән 16-һына тиклем). Ваҡытынан алда тапшырыу һәм төп этапта география, информатика һәм мәғлүмәт-коммуникация-лар технологиялары буйынса имтихандарҙан башлана. Ике мотлаҡ фәндән (рус теленән һәм математиканан) насар билдә алған, шулай уҡ төп этаптың резерв көнөндә был фәндәрҙе тапшыра алмаған сығарылыш уҡыусылары өҫтәмә осорҙа рус теленән һәм математиканан имтихандарын яңынан бирә ала.

**БАШИНФОРМ.**

КӨН ХӘСТӘРҘӘРЕ

# СОҠОРҘО КАРТАЛА КҮРҺӘТ



**Баш ҡала хакимиәте коммуналь һәм юл хеҙмәттәре эшмәкәрлеге планына өҫтәмә һәм ярҙам маҡсатында "Соҡорҙарҙы ремонтлауҙың интерактив картаһы" проектын тормошҡа ашыра башланы. Хәҙер һәр граждан юлдарҙы ремонтлауға үҙ өлөшөн индерә ала.**

Бының өсөн ҡала урамдарының проблемалы участкалары тураһында картала билдәләп, шул урындың фотоһын беркетеп, ғариза ҡалдырырға кәрәк. Фото беркетелмәгән, соҡорҙарҙың аныҡ адресы күрһәтелмәгән, дөрөҫ һүрәтләнмәгән, шулай уҡ республика районына ҡараған төбәктәр территорияһы буйынса килгән ғаризалар ҡаралмай. Шулай уҡ ғариза ҡалдырыусы үҙенең шәхси кабинетына инеп, мөрәжәғәтенең статусын күҙәтеп бара ала. Сөнки мәғлүмәт эшкәртелеп, артабан тейешле хеҙмәттәргә тапшырыласаҡ. Бының өсөн һәр район модераторҙар билдәләнгән, улар картаны ваҡытында тикшереп, ундағы мәғлүмәттең статусы һәм башҡарылған эштең фотоһын эшләп, ҡала хакимиәтенә отчет әҙерләп бирергә бурыслы. Әлеге ваҡытта сайтҡа килгән 292 мөрәжәғәттән 119-ы буйынса ремонт эштәре башҡарылған, 81-е буйынса ошо көндәрҙә эш башланасаҡ, 81-е сервис талаптарына яуап бирмәгәнлектән, кире ҡағылған. Тиҙҙән йорт ихаталары территориялары буйынса ла шундай уҡ интерактив карта эшләнәсәк.

# ҠЫЙЫҠТАР ТАҘАРТЫЛА



**Граждандарҙың именлеген тәьмин итеү маҡсатында Өфөнөң торлаҡ хужалығы хеҙмәткәрҙәре көн һайын ҡыйыҡтарҙы ҡарҙан һәм боҙҙан таҙарта. Был эштәр, тәү сиратта, ҡыйыҡтан ҡар төшөү хәүефе ныҡ булған участкаларҙа башҡарыла.**

Гидрометүҙәк мәғлүмәттәре буйынса, ҡышын яуым-төшөм миҙгел күрһәткесенән 18,5 процентҡа артып китте. Һөҙөмтәлә, ҡыйыҡтарҙы таҙартыу эштәре 9 гинуарҙа уҡ башланды. Төп бригадалар граждандарҙы ваҡытлыса эшкә алыу иҫәбенә көсәйтелә. Әлеге ваҡытта был эшкә 430 хеҙмәткәр йәлеп ителгән. Ҡыйыҡтарҙан тыш, йорт хужалары балкондарына рөхсәтһеҙ ҡуйған япмалар ҙа хәүеф тыуҙыра. Бөгөнгә тейешле документы булмаған 12358 шундай объект теркәлгән. Торлаҡ ҡануниәтенә ярашлы, бындай конструкциялар дөйөм йорт милке тип һаналмай һәм уны таҙартыу йорт хужалары иңендә ята. Шуға был турала 11984 милексегә иҫкәрмә тапшырылған. Үкенескә күрә, күптәр был бурыстарына яуапһыҙ ҡарай, ә идарасы ойошмалар, бәхетһеҙлек осраҡтарына юл ҡуймау өсөн, балкон ҡыйыҡтарын да үҙҙәре таҙартырға мәжбүр. Был иһә финанс сығымдарына килтерә һәм күп ваҡытты ала. Ошоларҙы күҙ уңында тотоп, әлеге ваҡытта балкондарына рөхсәтһеҙ ҡыйыҡ ҡуйған һәм уны таҙартмаған хужаларҙың яуаплылығы буйынса мәсьәлә хоҡуҡ белгестәре менән берлектә ҡарала.

# ЯУАПЛЫЛЫҠТЫ ИҢЕҢӘ АЛ!



**Өфө ҡалаһы Йәмәғәт именлеге үҙәге эшмәкәрлегенең бер йүнәлеше булып төҙөкләндереү ҡағиҙәләрен боҙоуҙы асыҡлау тора. Былтыр 14 мең шундай осраҡ теркәлеп, 28 миллион һумлыҡ штраф һалынған, шуларҙың 20 миллионы түләтелгән.**

Үҙәк хеҙмәткәрҙәре ҡала территорияһын даими тикшереп, ойошмалар һәм шәхси эшҡыуарҙар тарафынан уларҙың эш урынының эргә-тирәһендәге территорияларҙы, төҙөлөш урындарын, ер эштәрен алып барыуҙы, йәмәғәт транспорты туҡталыштарын, административ биналарҙы, сауҙа һәм сервис предприятиеларын тәртиптә тотоуға айырыуса иғтибар бирә. Ҡышҡыһын иһә территорияларҙы һәм ҡыйыҡтарҙы ҡарҙан һәм боҙҙан таҙартыу контролдә тотола. Быйылғы ҡатмарлы һауа шарттарына бәйле, территорияларҙы һәм ҡыйыҡтарҙы ҡарҙан, боҙҙан таҙартмаусыларға ҡарата 3254 протокол төҙөлгән, шуларҙың 1345-е сауҙа һәм сервис предприятиеларына тура килә. 154-е - сәнәғәт предприятиелары, 89-ы - мәғариф учреждениелары, 38-е - медицина ойошмалары иңенә төшә.

# ЯҘҒЫ ТАШҠЫНҒА ӘҘЕРБЕҘ



**Башҡортостан гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторингы буйынса идаралыҡтың яҡынса фаразлауҙарына ярашлы, Ағиҙел йылғаһы бассейнында һыу запасы башҡа йылдарҙағы менән сағыштырғанда 48 процентҡа күберәк. Ҡар ҡатламы ла 102 сантиметр, йәғни норманан 50 процентҡа артығыраҡ тәшкил итә.**

Быйыл яҙғы ташҡын һыуҙың 8 метрғаса күтәрелеү ихтималлығы менән янай. Ул ваҡытта инде 3277 кеше йәшәгән, 33 ойошма урынлашҡан 932 торлаҡ йорт булған территорияны һыу баҫыуы мөмкин. Был территорияларға Дим, Киров, Ленин райондары инә. Ошоларҙы иҫәпкә алып, 10 мартта тейешле хеҙмәттәргә һәм ойошмаларға аныҡ бурыстар билдәләнеп, ташҡынды аварияһыҙ үткәреү һәм халыҡтың йәшәүен тәьмин итеү буйынса саралар планы раҫланған. Ә 1 марттан ҡаланың, районларҙың һәм ойошмаларҙың ташҡынға ҡаршы комиссиялары эш башлаған. Әлеге ваҡытта ташҡынға ҡаршы 25 штаб, 11 күҙәтеү посы, 51 ваҡытлыса урынлаштырыу пункты ойошторолған. Яҙғы ташҡынға әҙерлек буйынса ҡала күнекмәһе 24 мартта үтәсәк. Быйыл был эшкә 1800-ҙән ашыу кеше, 400 берәмек техника, 106 берәмек йөҙөү саралары йәлеп ителгән. Ойошторолған көс һәм средстволар төркөмдәре ташҡын үткәнсе әҙерлек һыҙатында буласаҡ.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһында халыҡ-ара шашка буйынса Донъя кубогының финалы тамамланды. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында еңеүсенең исеме билдәләнде - ул Өфөнән Айгөл Иҙрисова. Ир-егеттәр араһында титул өсөн көрәштә ике уйынсы ҡалды - Алексей Чижов (Рәсәй) һәм Ян Груненденйк (Нидерландтар).

✓"Салауат Юлаев" хоккей клубы идараһының яңы составы билдәле булды. Владимир Нагорный - клуб президенты һәм идара рәйесе, Таһир Ибраһимов генераль директор итеп тәғәйенләнде. Генераль менеджер Леонид Вайсфельд һәм көйәрмәндәр менән эшләү буйынса белгес Дмитрий Ганабин үҙ урынында ҡалған.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы "Өфө-Ладья. Арт. Һөнәр. Сувенирҙар" халыҡ кәсептәре күргәҙмә-фестиваленә әҙерләнә. Сара дүртенсе тапҡыр ойошторола һәм 29-31 мартта уҙа. Фестивалдә республиканың төрлө мөйөштәренән биҙәү-ҡулланма сәнғәте оҫталары, сувенир продукцияһын етештереүселәр һәм һатыусылар, рәссамдар, скульпторҙар ҡатнаша. Халыҡ художество кәсептәренең төрлө әйберҙәре, сувенир продукцияһы, йорт йыһазы, милли кейем һәм башҡа бик күп әйберҙәр тәҡдим ителә.

✓Башҡортостанда киҫкен респиратор вирус инфекцияһы һәм Гонконг киҙеүе эпидемияһы тамамланды, тип хәбәр итә республика буйынса Роспотребнадзор. "Эпидемия уртаса көсөргәнешле тип баһалана, айырыуса балалар сирләне. А2 киҙеүе, "Гонконг" штаммы һәм аҙыраҡ В киҙеүе теркәлде. Грипп вирустарынан тыш, парагрипп һәм аденовирустар, РС-вирустар билдәләнде. Быйылғы миҙгелдә үлем осраҡтары булманы", - тип хәбәр иттеләр республика буйынса Роспотребнадзор идаралығында.

✓1997-2017 йылдарҙа Башҡортостанда ВИЧ-инфекциялы ҡатындарҙан 3478 мең, шул иҫәптән быйыл 66 сабый тыуған. 15 йәшкә тиклемге 208 бала иҫәптә тора. Үҙәк белгестәре билдәләүенсә, әгәр ҡатын-ҡыҙ ваҡытында диспансер иҫәпкә торһа һәм дарыуҙар ҡабул итһә, ҡарындағы баланың ВИЧ йоҡтороу ихтималлығы аҙыраҡ. Башҡортостанда 19 меңгә яҡын ВИЧ сирле йәшәй, шуларҙың 12 мең самаһы - ир-егеттәр, ете меңдән ашыуы - ҡатын-ҡыҙҙар. Йыл башынан төбәктә 464 ВИЧ-инфекциялы асыҡланған, шул иҫәптән 294 ир-егет һәм 170 ҡатын-ҡыҙ.

**✓ *Бик йыш имен булмаған ғаиләләр - ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы арттырыусылар. Илдә 90 процент етемдең ата-әсәһе бар. Шуға күрә беҙ үҙ эшмәкәрлегебеҙҙә балаларҙы үҙ ғаиләһенә ҡайтарырға тырышабыҙ.***



БЕҘҘЕҢ ӘҢГӘМӘ

**Өфө ҡала округы хакимиәтенең Опека һәм попечителлек идаралығы эшмәкәрлеге йыл һайын тиерлек Рәсәй кимәлендә юғары баһаларға лайыҡ була, уның тәжрибәһе Рәсәй кимәлендә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра һәм яңы тыуған сабыйҙарҙан баш тартыуҙы иҫкәртеү алымы Рәсәй ҡалалары союзының иң яҡшы муниципаль тәжрибәләре исемлегенә индерелгән. Был - ойошманың етемлекте булдырмау буйынса маҡсатлы һәм эҙмә-эҙлекле эш алып барыу һөҙөмтәһе. Былтыр ҙа баш ҡала илдең төрлө төбәгенән 176 ҡала ҡатнашҡан "Балалар ҡалаһы - ғаиләләр ҡалаһы" конкурсында беренсе урын яуланы. Конкурс шарттары буйынса, ҡатнашыусылар ауыр тормош шарттарында ҡалған ғаиләләрҙе иртә асыҡлау, һәр ғаиләгә шәхси ярҙам маршруты эшләү, ғаиләләрҙең эске ҡеүәтен асыу, ата-әсәләрҙә әүҙем тормош позицияһы булдырыу буйынса саралар планын тәҡдим итә. Тимәк, Өфөлә лә ындай саралар даими үткәрелә. Ошо ҡыҙыҡһыныуыбыҙ идаралыҡ начальнигы Татьяна КВАСНИКОВАға алып килде.**



# БАЛАҺЫНАН КЕМ БАШ ТАРТА?

**➔ Бөгөн социаль етемлек республика өсөн генә түгел, тотош Рәсәй өсөн көн үҙәгендә торған проблемаларҙың береһелер, моғайын. Быны, әлбиттә, төрлө сәбәптәре бар, ләкин сәбәптәрҙе эҙләмәйенсә, ошо күренеште булдырмау өсөн ниндәй эшмәкәрлек алып барылыуы менән таныштырһағыҙ ине.**

- Беҙҙең идаралыҡ эшмәкәрлегенең өҫтөнлөклө йүнәлеше - ул етем һәм атай-әсәй ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы ғаиләләргә урынлаштырыу. Ун йыллыҡ эш дәүерендә баш ҡалала 6 мең самаһы бала ғаилә йылыһын тапты. Әммә иң ҙур ҡаҙанышыбыҙ - балалар йортондағы балалар һаныныҡ ике тапҡырҙан күберәккә кәмеүе һәм ике Балалар йорто, бер Сабыйҙар йортоноң филиалы ябылыуы. Ә инде 2013 йылдан баш ҡалала ғаиләлә имен булмаған хәл-торошто, социаль етемлекте, яңы тыуған сабыйҙарҙан баш тартыуҙы иҫкәртеү, баланы үҙ ғаиләһендә ҡалдырыу буйынса эҙмә-эҙлекле эш алып барған берҙәм система барлыҡҡа килде. Уны беҙҙең идаралыҡ көйләй. Шул уҡ йылда ҡала хакимиәте һәм Социаль етемлекте иҫкәртеү хәйриә фонды менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө. Бөгөн иһә баш ҡалала балаларҙың хоҡуҡтарын һәм уларҙың ҡануниәт буйынса нығытылған ихтыяжын яҡлау буйынса дүрт социаль-психологик үҙәк ("Ғаилә", "Торнаҡай", "Саторис", "Үҫеш"), балиғ булмағандар өсөн социаль приюттар, балалар йорттары һәм сабыйҙар йорто, ҡала райондарының һәр береһендә опека һәм попечителлек бүлектәре эшләй.

**➔ Бөгөн опека органдарында нисә бала иҫәптә тора һәм уларҙы ғаиләләргә урынлаштырыу буйынса ниндәй эштәр башҡарыла?**

- Йыл аҙағындағы, йәғни 31 декабрҙәге мәғлүмәттәргә ярашлы, иҫәптә 2165 бала тора. Уларҙың күпселеге - 87 проценты уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алынған, икенсе ғаиләлә йәшәй йәки опекунлыҡта. Балалар йорттарында, приюттарҙа 203 бала иҫәпләнһә, уҡыу йорттарында уҡыусылар - 93. Уларҙың һәр береһен ғаиләләргә урынлаштырыу өсөн йәмәғәтселектең иғтибарын ошо проблемаға йүнәлтергә тырышабыҙ. Мәҫәлән, бер нисә бала тәрбиәләгән, бында мотлаҡ үҙ балалары түгел, тәрбиәгә, опекунлыҡҡа алынған балалы ғаиләләр миҫалында ғаилә ҡиммәттәрен алға әйҙәгән мәғлүмәт-реклама кампаниялары үткәрәбеҙ. Эшмәкәрлегебеҙҙең һөҙөмтәләре бар тип әйтә алам, сөнки былтыр ғына Өфөлә етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған 430 бала ғаилә йылыһын тапты, уларҙың 153-ө уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алынһа, ҡалғандары опекунлыҡҡа бирелде.

**➔ Халҡы миллиондан ашҡан ҡалала яңы тыуған балаларынан баш тартыусылар күпме һәм нисбәт буйынса ҡарағанда был күренеш кәмеүгә табан барамы, әллә, киреһенсә, артамы?**

- Былтыр Өфөлә шундай 39 осраҡ теркәлде. Ләкин табиптар, идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре алып барған һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһендә уларҙың 26-һы тәүге уйынан кире дүнде, ә бына 13-өн был ҡылығының дөрөҫ булмауына ышандырып булманы. Үткән йылдар менән сағыштырғанда, был барыбер насар түгел. Сөнки 2013 йылда Өфөлә 85 ҡатын-ҡыҙ балаһынан баш тартыу тураһында белдереп, белгестәрҙең ҡатнашлығынан һуң 23 ҡатын-ҡыҙ кире уйланы һәм балаһын үҙендә ҡалдырҙы.

Беҙҙең хеҙмәткәрҙәр тарафынан "Өфө ҡалаһында яңы тыуған балаларынан баш тартҡан ҡатындарҙың социаль-демографик портреты" төҙөлгән. Улар репродуктив (18-ҙән алып 40 йәшкә тиклемге) йәштәге, даими партнеры булмаған йәки граждандыҡ никахы менән йәшәүсе ҡатын-ҡыҙ. Йыш ҡына никахтағы ҡатындарҙың балаларынан баш тартыу сәбәбе булып башҡа ирҙәрҙән ауырға ҡалыуы тора. Һәм әгәр ҙә ҡатын үҙенең законлы ире менән артабан йәшәргә уйлаһа, тыуасаҡ бала, улар фекеренсә, ҡылынған хыянатты һәр саҡ иҫкә төшөрәсәк. Был осраҡта ҡатындарҙы кире дүндереүе бик ауыр.

Социаль-иҡтисади күрһәткестәр буйынса күп ҡатындар ауыр матди хәлдә йәшәй, уларҙың торлаҡтары юҡ, аҡсалата бурыстары бар, төбәктә йәки Өфөлә теркәлмәгәндәр. Шул уҡ ваҡытта күпселек ҡатындар өсөн ярлылыҡ баланан баш тартыуға төп сәбәп булып тормай.

Тағы ла ҡатындарҙың беренсе һәм артабанғы балалар табыу араһындағы йәше һәм уның белем кимәле бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән: юғары белемлеләр аҙыраҡ бала таба, үҙ сабыйҙарынан баш тартыусыларҙың белем кимәле күпкә түбәнерәк.

Мәшғүллек йәки эш урыны буйынса ҡарағанда, был портретҡа эләгеүселәрҙең күпселеге эшләмәй (56 проценты), 6 проценты уҡып йөрөй. Йәғни улар кемдәндер ҡарамағында, тәрбиәһендә йәшәй. Эшләп йөрөүселәрҙең күбеһе эшкә рәсми урынлашмаған, тимәк, баланы ҡарау буйынса түләүле ял да ала алмай.

Күп балалы ғаиләләрҙә баланан баш тартыу осраҡтары юҡ, ундай әсәләр ғаиләләге балалар һанына әһәмиәт бирмәй.

**➔ Балаһынан баш тартҡандан һуң ҡатын-ҡыҙҙарҙың сабыйҙарын кире алырға килгән осраҡтары бармы?**

- Әлбиттә, бар, "абынмаҫ ат булмаҫ, яңылышмаҫ кеше булмаҫ" тигән мәҡәлдәге һымаҡ, һуңғы сиктә тәүбәләренә килеп, әсәлек тойғолары уянып, балалары артынан киләләр. Шулай Өфө ҡалаһында 2014 йылда 9 әсә ҡалдырып киткән балаһын кире килеп алһа, 2015 йылда - 6, 2016 йылда 3 осраҡ теркәлде.

**➔ Балаларынан баш тартҡан ҡатын-ҡыҙ өсөн ниндәйҙер яза ҡаралғанмы, әллә улар артабан да һин дә мин йәшәй бирәме?**

- Ата-әсә хоҡуҡтарынан һәм бурыстарынан баш тартыу ябай ғына ғәмәл түгел. Әгәр ҙә атайлыҡ һәм әсәйлек рәсмиләштерелгән булһа, улар баланы тәрбиәләргә һәм ҡарап үҫтерергә тейеш. Улар ошо бурыстарынан баш тартҡанда, баланы ҡарап үҫтереү мөмкинлеге ҡалдырылып, ата-әсә хоҡуҡтарынан мәхрүм ителә (Рәсәй Федерацияһы Ғаилә кодексының 69-сы статьяһы, 71-статьяһының 2-се пункты). Йәғни бер сәбәпһеҙ балаһын бала табыу йортонан, тәрбиә биреү учреждениеһынан һәм башҡа шундай ойошмаларҙан алмау ата-әсә бурыстарын үтәтыу түгел, ә ата-әсә хоҡуҡтарынан мәхрүм ителеү, тигәнде аңлата (Рәсәй Федерацияһы Ғаилә кодексының 69-сы статьяһы). Ә инде бурыстарын тейешле үтәмәүсе ата-әсәләрҙе Рәсәй Федерацияһының административ хоҡуҡ боҙоу кодексының 1-се бүлек 5.35 статьяһына ярашлы яуапҡа тарттырыу ҡаралған.

Үкенескә күрә, йәмғиәттә закон боҙоусылар, йәмғиәт ҡанундарына ҡаршы йәшәү рәүеше алып барыусылар, шулай уҡ ауыр тормош һынауҙары алдында тороп ҡалыусылар бар. Уларҙың балиғ булмаған балалары бар икән, әлбиттә, бындай ғаиләләр менән эшләйбеҙ, ғаиләләргә төрлө, шул иҫәптән хоҡуҡи һәм психологик ярҙам күрһәтәбеҙ. Бик йыш имен булмаған ғаиләләр - ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы арттырыусылар. Илдә 90 процент етемдең ата-әсәһе бар. Шуға күрә беҙ үҙ эшмәкәрлегебеҙҙә балаларҙы үҙ ғаиләһенә ҡайтарырға, һәр балаға "Әсәй" тип әйтеү бәхетен бүләк итергә тырышабыҙ.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бронхит

❖ 2-3 үгәй инә үләне япрағын ярты литр һөттә бешерергә, һөҙөргә һәм бысаҡ осонда ғына суска салоһы өҫтәргә. Йөҡлар алдынан бәләкәй сынаяҡ менән эсергә.

❖ Балаларҙа бронхит булһа, 2 йөмортҡаны суска майында ҡыҙҙырырға һәм тоҙ һибергә. Һыуынғас, төнгөләккә баланың түшенә ҡуйырға.

❖ Ҡыҙыл ҡабыҡлы ҙур булмаған һуғанды ҡабығынан таҙартып, уртаһын бер аҙ соҡоп алығыҙ һәм 1 балғалаҡ шәкәр һалығыҙ. Һауыҡҡансы бала көн һайын ошолай әҙерләнгән һуған ашарға тейеш.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ 1 ҡалаҡ кукуруз онон стаканға һалырға, стакан тулғансы ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөләккә ҡалдырырға. Иртәнсәк стакан төбөнә ултырған ҡуйырыҡты болғатмай ғына һыуҙы эсергә.

### Астма

❖ 40 орлоҡ һуғанды ҡайнап ултырған һыуға һалырға һәм йомшарғансы һыуҙа тоторға. Һуңынан һуғандарҙы алып, ярты литр зәйтүн майына һалырға, иҙергә. Иртән һәм кисен ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ ашарға.

### Ашҡаҙан сей яраһы

❖ 200 грамм тар, оҙонса япраҡлы юл япрағы үләнен 5 минут ярты литр араҡыла ҡайнатырға. Һөҙөргә, быяла һауытҡа ҡойоп алырға. Иртән ас ҡарынға 1 ҡалаҡ эсергә, 1 сәғәттән ашарға ярай. Дауаланған мәлдә тәмәке тартыу тыйыла.

### Аяҡтар һыҙлаһа

❖ Ҙур эмаль һауытта бер ус ҡыҙыл клевер ҡайнатырға. Һыуынғас, һөҙөргә һәм 1 ҡалаҡ кәрәсин өҫтәргә. Аяҡтарҙы тығып ултырырға. 3-4 кис ошо процедураны ҡабатларға.

### Веналар киңәйеүенән

❖ Иртән ҡояш ҡалҡҡансы таҙа ойоҡтар кейеп, ысыҡлы үләндән йөрөгөҙ. Ойоҡтар аҙаҡтан аяҡта киберҙә тейеш.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Мәҫәлән, балаларын юғалтҡан ата-әсәләр аҙаҡ һуңғы көндәрҙәге сәйер хәлдәрҙе иҫләй. Миҫал өсөн: ҡулдарындағы, беләктәрендәге бысаҡ менән ҡырҡылған яра эҙҙәре... Дүртенсе этап "Мине 4 сәғәт 20 минутта уят" тип атала.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

**Көнсығыш башҡорттарына әйле, тамъян-табындар, ҡара-барын-табындар, ҡыуаҡандар инә. Хәҙерге административ бүленеш буйынса ул үҙенә Учалы һәм Белорет, Ҡыйғы, шулай уҡ Силәбе өлкәһенең төньяҡ һәм Ҡурған өлкәһенең көньяҡ-көнбайышы инә.**

Уларҙа елән, бишмәт, сәкмән, кәзәкей, төлкө тиреһенән тегелгән тундар киң таралған булған. Камзул менән алъяпҡыстар көнкүрештә киң ҡулланылған. Күлдәктәр, башлыса, фабрика туҡымаларынан тегелгән. Учалы районында осраған күлдәктәрҙең әберкәһе бар, ә бына Силәбе менән Ҡурған өлкәләрендә күлдәктәр әберкәһеҙ.

Еңһеҙ кейемдәрҙең конструкцияһы оҙон булмауы, тура силуэтлы булыуы һәм яғаны ярымтүңәрәк йәки V-образлы итеп тегеүҙәре менән айырылып тора **(һүрәт)**. Камзул



ҡалын туҡыманан тегелгән, уның эске ҡатламы ла бар. Камзул ситенә 20, 15, 10 тинлек тәңкәләр бер нисә рәт итеп баҫылған. Был - күбәләк ырыуы камзулдары. Этнографтар билдәләүенсә, совет осоронда был тәңкәләр һаҡал, яғаларҙы алыштырған. Был төбәк башҡорттарының өҫкө кейемдәре лә фабрика туҡымаларынан тегелгән.

Костюмдар төрлө булыуы менән айырылып тора. Силәбе, Ҡурған башҡорттары алъяпҡыстарҙы аппликация, тамбурлы сигеү менән биҙәгән **(һүрәт)**. Этнографтар әйтеүенсә, аппликациялар



төрки-монгол күсмә донъяһы мәҙәниәте менән бәйләнеш булыуы тураһында һөйләй. Аппликацияның төп элементтары ҡусҡар, йүгерек тулҡын, йөрәк формаларынан тора. Учалы районы өсөн күлдәк һәм алъяпҡыстарҙы тамбурлы сигеү менән биҙәү характерлы. Тик ул төньяҡ-көнсығыш башҡорттары биҙәгенән айырыла, был төбәктә ул бер төҫтәге ептән айырылмай ғына һалына. Ҡурған һәм Силәбе башҡорттары төрлө төҫтәге ептәрҙе ҡулланһа ла, унда ла еп ҡалын итеп алынмай.

Еңһеҙ кейемдәрҙә Силәбе һәм Ҡурған өлкәләре башҡорттары тәңкәләрҙе әҙерәк ҡуллана. Биҙәктәр үҫемлектәр донъяһынан



алына. Көнсығыш башҡорттары костюмының төп үҙенсәлеге булып аяҡ кейеме сарыҡ һәм эйәк аҫтынан төшөп торған һағалдырыҡ тора **(һүрәт)**.

Шулай итеп, геометрик төрө буйынса Урал аръяғы комплексында костюм, көньяк-көнсығыш костюмына оҡшатып, иркен итеп төшөп торған ҡушъяулыҡ оҙонса түңәрәк барлыҡҡа килтерә. Тап ошо төбәктә генә аппликация менән биҙәлгән күлдәктәр, алъяпҡыстар, сәкмәндәр, аяҡ кейемдәре осратырға була.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА...

# КЕМ УЛ ҮҪМЕР?

## Ул ниндәй иғтибар талап итә?

**Бөгөн йәмғиәттә үҫмерҙәр донъяһына ҙур урын бирелә. Үҫмер психологияһына бағышланған фәнни эштәр яҙыла, китаптар сығарыла, мәғариф учреждениеларында улар менән эшләүсе штаттар тотола. Был эштәр менән беҙ донъяға булған иғтибарыбыҙҙы ҡабартып күрһәтергә, уның етдилеген, мөһимлеген иҫбат итергә тырышабыҙмы, әллә кеше ғүмеренең был өлөшө шулай оло күҙәтеүгә лайыҡмы? Ә ысынында, нисек ҡарайбыҙ беҙ үҫмерлеккә, үҫмер балаларыбыҙға - әлеге уйланыуҙарҙа мин ошоларҙы асыҡларға тырышам.**



### Уйлап сығарылғанмы?

Ун туғыҙынсы быуатҡа тиклем йәмғиәттә үҫмерлек тигән осор бөтөнләй булмаған. Кешенең бала сағы һәм "ҙурайғас"ы ғына булған. Ун биш-ун алты йәшкәсә - ул бала, ун алтының аръяғына оло (ҙур) кеше булып һыналған. Ә инде "үҫмерлек осоро" тигән төшөнсә Рәсәйҙә ун туғыҙынсы быуат аҙаҡтарында, егерменсе быуат башында барлыҡҡа килә. Йәмғиәт яңыса йәшәй башлағас, ҡатын-ҡыҙҙар эшсе булып киткәс, улар иңенә ғаиләнекенән тыш, ил хәсрәте лә яткас, йәғни балалар мәсьәләһе икенсе планға күскәс, иғтибарһыҙ ҡалған балаларҙың донъяһы социаль проблема булып күтәрелә башлай һәм фәндә бер бүлек асыла. Йәғни, үҫмерҙәр донъяһы йәмғиәт тарафынан яһалма барлыҡҡа килтерелгән, бәлки, аңһыҙ рәүештә бар ителгән донъя ул. Уйлап ҡарағыҙ, борон, хатта артыҡ борондан башламағанда, һикһәненсе йылдар аҙағына тура килгән үҙемдең үҫмерлек осоромда ла, был мәлдә миңә ниндәйҙер айырым иғтибар кәрәктер, тигән уйҙы, талапты, мохтажлыҡты хәтерләмәйем. Йәки психологик сайпылышымды күтәрә алмай, ниндәйҙер проблемалар тыуҙырыуым да хәтеремдә юҡ. Йәки тиңдәштәремдән кемдәрҙендер мөхәббәт, иғтибарһыҙлыҡ, аңлаша алмау, йәштәштәренән ҡыйырһытылыу кеүек сәбәптәрҙән үҙ-үҙенә ҡул һалырға теләүен дә ишеткәнем булманы. Кемдер мине яратмай, тип, үлергә уйлау түгел, был хистәрҙе ололар белеп ҡалыуы үҙе үлем кеүек була ине. Көнсығыш илдәрендә әле лә үҫмерлек осоро тигән төшөнсә юҡ.

### "Осоусы кит"

Бөтөн был уйланыуҙарҙы интернет селтәрҙәре аша алып барылған "уйындар" шауҡымында үҫмер балаларҙың донъянан китеү тураһындағы хәбәрҙәр барлыҡҡа килтерҙе. Йәш кеше төрлө кодтар, һорау алыуҙар, цитаталар һәм башҡа ҡыҙыҡлы әйберҙәр менән байытылған сайтта ултырып, аң кимәлендәге идаралыҡ ауына эләгә һәм йәлап үлемгә алып барып еткерелә. Шул сәбәпле, улар бейек йорттар ҡыйығынан һикерә, поезд аҫтына ташлана, ағыулана, веналарын ҡырҡа... 2015 менән 2016 йылдар араһында Рәсәй буйынса 130 үҫмер тап ошо интернет уйыны нигеҙендә үҙ-үҙенә ҡул һалған.

Уйын "кит" атамаһына бәйле. Ни өсөн тап кит? Киттарҙың аңлайышһыҙ сәбәптәрҙән ярға ырғып һәләк булыуҙары билдәле, әлбиттә. Ғалимдар был хәлде магнит аномалияһы, ауырыуҙар, ер аҫты (һыу аҫты) ярылыуҙарынан килгән хәүефте күтәрә алмау сәбәптәренә бәйләй, әммә аныҡ ҡына яуап әлегә тиклем юҡ. Быны ошо тәбиғәт трагедияһын үҫмерҙәр донъяһына ла күсереп маташа ҡайһылар. "Кайһылар"ҙың кемдәр булыуы хаҡында ла бәхәстәр күп. Әммә күптәр, шул иҫәптән экспертар фекеренсә, был - секта.

Интернетта ниндәйҙер мәғлүмәт, бигерәк тә берәй һағышлы, күңелгә ятырҙай йыр, шиғыр эҙләй башлаһаң, "Һиңә күңелһеҙме? Һин яңғыҙмы? Һине аңламайҙар һәм йыуатмайҙар икән - ин бында" тигән саҡырыу килә һалып та сыға. Шунда уҡ "Ун һигеҙ йәшкә тиклем булһаң, йәшендә күрһәтмә", тип яҙыла. Һағышланып ултырған 12-16 йәшлектәрҙең был битте мотлаҡ асып ҡарағыһы килəсәк. Шул башланғысты үткәндәрҙе был уйын йәлап ҡына үҙенә йота. Үҫмер менән яҙышыусының яҡшы психолог икәне аңлашылып тора. Тик быны күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән йәки башҡа ҡыҙыҡһыныуы булмаған балалар аңлай алмай. Әңгәмәсе баланың күңеленә инеп "һөйләшә", уны бер нәмәлә лә ғәйепләмәй, баҫмай, ҡыҫмай. Шулай уҡ уның ололар тормошондағы бер проблемала ла ҡыҫылышы юҡлығын, йәлләүгә һәм аңлауға хоҡуҡлы икәнен һыҙыҡ аҫтына ала. Шул процедуралар үткәс, йәш кешенең башына үлем тураһындағы мәғлүмәттәр һалына башлай. Ул үҙ йәненә үҙе хужа, йәғни теләһә бөгөн уҡ осоп китә, азат була ала.

Йән азатлығы тураһындағы фәлсәфә икенсе этап булып тора. Унан өсөнсө этапта балаға һан бирелә. Был этаптың хатта атамаһы ла бар: "Үлеменә тиклем 50 көн". Был илле көндә ҡорбанға номер беркетелә һәм ул ниндәйҙер айырым тәртипкә алынған эштәрҙе үтәй. Мәҫәлән, балаларын юғалтҡан ата-әсәләр аҙаҡ һуңғы көндәрҙәге сәйер хәлдәрҙе иҫләй. Миҫал өсөн: ҡулдарындағы, беләктәрендәге бысаҡ менән ҡырҡылған яра эҙҙәре... Дүртенсе этап "Мине 4 сәғәт 20 минутта уят" тип атала. Баланың телефонына тап шул ваҡытта смс-тар килә башлай һәм ул иртәнге 6-ға тиклем дауам итә. Был ваҡыт үҫмер йоҡоһо туймауҙан йонсой, был уның йөҙөнә, төҫөнә сыға.

Һуңғы этаптағы үлемдә лә шулай уҡ бойороҡ ебәреп тороусы һайлай. Психологтар, енәйәт эшен тикшереүселәр әйтеүенсә, балалар һуңғы сиккә тиклем үлемгә әҙер булмай икән. Әммә баш та тарта алмай. Улар шундай эмоциональ-психологик ҡапҡанға ҡапҡан һәм инде нимәнәндер баш тартыуҙан ҡурҡа һәм ҡушылғанды үтәүҙе ысынлап та был хәлдән ҡотолоу тип ҡабул итә. Арабыҙҙан киткән балаларҙың барыһы ла тигәндәй иртәһен ниндәйҙер икенсе маҡсат менән башлаған һәм ҡапыл алынған шылтыратыуҙан сығып йүгергән. Бер ҡыҙ дәрестән һорап сыҡҡан, икенсеһе мәктәпкә барышлай, өсөнсөһө әсәһенә "сығып инәм" тип кенә киткән. Барыһының да телефондарындағы "инструкцияла" "Куртканы сисеп һалырға һәм осорға" тип яҙыла һәм хатта ошо тәңгәлдә лә, бахыр балалар, ҡушылғанды тулыһынса үтәй: өҫ кейемдәре шул ерҙәрендә бөкләнеп һалынған килеш ятып ҡала...

Үлгән балаларҙың күптәренең ата-әсәләре "Бер ниндәй ҙә проблема булманы, яҡшы уҡыны, тәртибе арыу булды, ғаилә етеш йәшәй", тигән аңлатма бирә. Әммә уларҙың аңлатмалары инде берәүгә лә кәрәкмәй. Улар быны үҙҙәренә аҙ булһа ла еңеллек биреү өсөн генә әйтә кеүек. Эш, шәхси тормош мәсьәләләре, матди проблемалар менән мәшғүл, ҡайһы саҡта ысынлап та балалар тәрбиәләүгә яуапһыҙ ҡараған ата-әсәләр һуңғы сиктә генә балаһынан килгән "сигналды" ишетә ала. Тик был сигнал һуңғыһы һәм иң дәһшәтлеһе була. Үкенескә ҡаршы.

**(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).**

✓ *Төньяҡ башҡорттары араһында аяғына ныҡ баҫып торған мәғдәнселәр булған. Улар: Т. Ишбулатов, Тасимовтар, С. Тайбәков, И. Клянчев, И. Баҡтинов һәм башҡалар. Уларҙың баҡыр иретеү буйынса шәхси һәм ҡаҙна заводтары булған.*



*УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ*



**Башҡортостан автономияһының ойошторолоу тарихы бер нисә этаптан тора. 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһы иғлан ителә, шул уҡ йылдың декабрендә Ырымбурҙа үткән 3-сө Бөтә башҡорт ҡоролтайында раҫлана. 1918 йылда ул ғәмәлгә ашырыла. Ә инде 1919 йылдың 20 мартында ике яҡлы килешеү нигеҙендә Башҡортостан автономияһы совет власы тарафынан танылды.**

# ИЛДАРХАН МУТИН -

## Минзәлә башҡорттарынан сыҡҡан милли хәрәкәт эшмәкәре

Башҡортостандың милли дәүләтселеге өсөн көрәштә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ла әүҙем ҡатнаша. Улар араһынан милли хәрәкәт лидерҙары үҫеп сыға. Шуларҙың береһе Илдархан Ибраһим улы Мутин. Сығышы менән Минзәлә башҡорттарынан. 1888 йылдың 21 июлендә Өфө губернаһының Минзәлә өйәҙенә ҡараған Үрге Таҡталасыҡ ауылында тыуған. Бөгөн был ауыл Татарстандың Аҡтаныш районына ҡарай. Әйткәндәй, революцияға тиклем 150 мең башҡорт йәшәгән Минзәлә өйәҙе 1920 йылда яңы төҙөлгән Татар АССР-ына индерелә. Ә алты йылдан, 1926 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу буйынса, унда мең ярым ғына башҡорт теркәлә.

Илдархан Мутин башҡорт старшиналары һәм дворяндары Мутиндар нәҫеленән. Ғалим Ә. З. Әсфәндийәров яҙыуынса, дворянлыҡты улар XIX быуаттың икенсе яртыһында алған. 1900 йылда Мутиндарҙың нәҫелле дворянлыҡ хоҡуғы (потомственное дворянство) Сенат тарафынан раҫланған. Мутиндар династияһына XVIII быуатта йәшәгән Гәрәй улысы старшинаһы Мөтә Йәнырыҫов нигеҙ һала. Уның исеме, бәлки, Мөтиғулла булғандыр. Әммә урыҫ документтарында Мутя Янурусов тип телгә алына. Ул Таҡталасыҡ ауылында йәшәй. Ауылдың исеме - Таҡталасыҡ - уның килеп сығышы тураһында әйтеп тора. Ул Гәрәй башҡорттарының йәйләү урыны булған. Сөнки Аласыҡ һүҙенең бер мәғәнәһе йәйләүҙә көн итеү өсөн ҡабыҡ йәки ситәндән эшләнгән ҡаралтыны аңлата. Ә бында ауылдың исеме үҙе үк Таҡта аласыҡ икәнен әйтеп тора. Архив документтары 1745 йылда М. Йәнырыҫовтың яһаҡ түләүсе татарҙарҙы (ясашные татары) үҙ ерҙәренә индереүе, 1746 йылда Ҡаҙан губернаһынан килгән урыҫ крәҫтиәндәренә 15 йылға Ағиҙел йылғаһындағы балыҡ тотоу урындарын ҡуртымға биреүе тураһында һөйләй.

Артабан Гәрәй улысы старшинаһы вазифаһы Мөтә Йәнырыҫовтың улы Тимер Мутинға күсә. 1756 йылда Пруссия менән һуғыш башланғас, Тимер Мутинды яуға киткән башҡорт ғәскәрҙәре (2500 яугир) башлығы Ҡыҙрас Муллаҡаевтың ярҙамсыһы итеп тәғәйенләйҙәр. Шулай итеп, Т. Мутин Ете йыллыҡ һуғышта (1756-1763) ҡатнашып ҡайта. Ул һуғыштың аҙағына тиклем булмай.

1755-1756 йылғы башҡорт ихтилалы баҫтырылғандан һуң, Сенат Санкт-Петербургҡа килеп, батшабикә Елизавета Петровнаға тоғролоҡҡа ант биреү өсөн башҡорттарҙан вәкилдәр ебәреү тураһында указ сығара. Әммә вәкилдәр өс йылдан һуң ғына, 1759 йылда ғына һайлана. Башҡорттарҙан 6 кеше, улар араһында Ҡаҙан даруғаһы башҡорттары исеменән Тимер Мутин вәкил булып Санкт-Петербургҡа бара.

Башҡорт вәкилдәре пайтәхеткә барыу форсаты тейгән саҡта халыҡ мәнфәғәтен хәстәрләү сараһын күрергә тырыша. 1759 йылда Санкт-Петербургта булған саҡтарында һайланмыш башҡорттар Тимер Мутин инициативаһы менән Сенатҡа үтенес хаты яҙа. Улар башҡорт ерҙәрен баҫып алыуҙы тыйыу, купчийҙарҙы (ер һатып алыу тураһында килешеү) бөтә улыс ризалығы менән генә раҫлауҙы һорап, Сенатҡа мөрәжәғәт итә. Сөнки 1755-1756 йылғы башҡорт яуын баҫтырыуҙан файҙаланып, казактар башҡорт ерҙәрен баҫып ала башлай. Башҡорттарҙан һорап тормайынса, ялған купчийҙар менән аҫаба ерҙәрҙе үҙҙәренә яҙҙырыу осраҡтары күп була. Сенат 1759 йылдың 29 сентябрендә башҡорт вәкилдәренең үтенесенә ҡолаҡ һала һәм башҡорт ерҙәрен баҫып алыуҙы ҡәтғи тыйыу тураһында указ сығара.

Тимер Мутинға Санкт-Петербургтан тыуған яҡтарына ҡайтырға насип булмай, ул 1759 йылдың декабрендә вафат була. Гәрәй улысында старшиналыҡ вазифаһы уның улы Аҙнағол Тимеровҡа күсә. Уның 1763 йылдан старшина булғанлығы документтарҙан билдәле. Ул 1773-1775 йылдарҙағы Буғасәү яуында ҡатнаша. 1774 йылдың ғинуарында Алабуға ҡәлғәһен (хәҙерге Татарстандың Елабуга ҡалаһы) ҡамауҙа тотҡан баш күтәреүселәр араһында була. 17 октябрҙә Ҡаҙан ҡалаһына властарға "ғәйебен" танырға (с повинной) килә. Аҙнағолды аманат сифатында Ҡаҙанда ҡалдыралар. Башҡорттар баш күтәрмәһен өсөн батша властары борон-борондан старшина, тархандарҙың үҙҙәрен йәки улдарын аманат рәүешендә тотор булған.

1816 йылда Аҙнағол Тимеров 11-се башҡорт кантонында йорт (юртовой) старшинаһы булып хеҙмәт итә. Уның командаһында Гәрәй улысының 8 ауылы, шул иҫәптән Үрге һәм Түбәнге Таҡталасыҡ ауылдары булған. 1798 йылда кантон идаралығы системаһы индерелгәс, улыстар йорттарға (юрт) бүленә. Йорттар исем менән түгел, ә һандар менән билдәләнеп йөрөтөлә. Был осорҙа инде Аҙнағолдың улы Әхмәҙей Аҙнағолов та (Мутин) йорт старшинаһы булып хеҙмәт итә. Уның ҡарамағында биш ауыл теркәлгән. 1816 йылғы ревизия (халыҡ иҫәбен алыу) буйынса Үрге Таҡталасыҡ ауылында 285 кеше (башҡорттар) көн иткән. Заманына күрә ҙур башҡорт ауылы булған ул. Түбәнгеһендә 52 башҡорт һәм 89 типтәр (килешеү буйынса килеп ултырғандар) иҫәпләнгән. Аҙнағолдың тағы бер улы Туҡтағол Мутин 11-се башҡорт кантонында зауряд-сотник булып хеҙмәт итә.

Йәш тарихсы Альбина Ильясова яҙыуынса, XIX быуаттың тәүге яртыһында Гәрәй улысы Таҡталасыҡ ауылынан Әбдрәшит Мутиндың (Тимер Мутиндың улы) Мөғәтәсим (йорт старшинаһы), Ғисмәтулла (зауряд-есаул), Әбделбасыр (хорунжий), Мөхәмәтша (зауряд-хорунжий), Әхмәтша (йөҙ башы) исемле улдарының 11-се башҡорт кантонында, Ырымбур сик һыҙығында хәрби хеҙмәттә йөрөүҙәре билдәле. Ибраһим Мутин (Илдархан Мутиндың атаһы) Әбдрәшит Мутиндың кесе улы. Күрәһең, ул уның йәш ҡатынынан тыуған булғандыр.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХ - ФОТОЛА*

*Башҡорт халҡының бына ошо данлы улдары - III Бөтә башҡорт ҡоролтайы делегаттары 1917 йылдың декабрендә Ырымбурҙағы Каруанһарайҙа Башҡортостан автономиялы республикаһын иғлан итә. Был беҙҙең көндәргәсә һаҡланып ҡалған берҙән-бер фото.*



*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### ХАНЛЫҠТАР

### 3. Ыҡ (ирәкле) батшалығы

Ыҡ батшалығы (ханлығы) - бай дәүләт булараҡ, төрки донъяһы, көнсығыш Европа, Себер һәм башҡа илдәр менән бәйләнеш булдырыу өсөн үҙенсәлекле үҙәкте тәшкил иткән. Ысынлап та, Ыҡ (Ирәкле) башҡорт батшалығының иҡтисады ныҡ үҫешкән, унда тәжрибәле хеҙмәт ресурстары тупланған. Ер аҫты файҙалы ҡаҙылмаларына, алтын-көмөшкә, йәнлек тиреләренә үтә бай төньяҡ-көнбайыш Урал төбәгендә күрше илдәргә уңышлы сауҙа итеү мөмкин булған. Ғәйнә башҡорттары XIII быуатта Чердынь (Шырҙан) дәүләтенең Сылва йылғаһының Камаға ҡойған көньяҡ өлөшөн биләгән. XVIII быуатта инде улар Кама менән Сылва араһындағы Танып буйында ҙур майҙанды биләгән. 1591 йылда Уса, 1668 йылда Көнгөр ҡалаһы төҙөлгәс, ғәйнә башҡорттарының аҫабалыҡ хоҡуғы яҙма сығанаҡтар менән нығытылған. 1596 йылда улар Рәсәй батшаһы Федор Иоанновичтан Каманың ике ярын биләү хаҡында ялыу грамотаһы алған.

Ул саҡта башҡорттарҙа мәғдәнселек сәнәғәтенең ниндәй кимәлдә үҫеш кисереүе хаҡында мәғлүмәттәр бихисап. Төньяҡ башҡорттары араһында аяғына ныҡ баҫып торған мәғдәнселәр булған. Улар: Т. Ишбулатов, Тасимовтар, С. Тайбәков, И. Клянчев, И. Баҡтинов һәм башҡалар. Уларҙың баҡыр иретеү буйынса шәхси һәм ҡаҙна заводтары булған. 310 заводының 234 руднигына башҡорттар хужа булған. Ғәйнә улысында 360 башҡорт мәғдәнсеһе иҫәпләнгән. Төбәктә тау сәнәғәте нык үҫешкән. Таныш булмаған авторҙың китабында Барҙы "боронғо Башҡорт иленең йөрәге" тип аталған. Был төбәкте урта быуат тарихсылары "эске Башҡорт иле" тип атаған. XVII - XVIII быуаттарҙа урыҫтар, риүәйәттәргә ярашлы, күп кенә рудниктарҙы һәм заводтарҙы башҡорттарҙың ташландыҡ рудниктары урынында төҙөгән.

Ғәйнә башҡорттарының территорияһы XIX быуат документтарында уларҙың ырыу ере тип атала. Хәҙерге көндә лә Пермь ҡалаһының көньяғында, 25 саҡрымда Ҡолтай, Бишҡулат һәм башҡа башҡорт ауылдары һаҡланып ҡалған. Пермдән 30 саҡрымда Ҡаян (Тасим) ауылы, ул - башҡорт мәғдәнсеһе Исмәғил Тасимовтың тыуған ауылы. Билдәле булыуынса, Исмәғил Тасимов Рәсәй батшабикәһе Екатерина Икенсегә мөрәжәт итеп, Уралда йәштәрҙе мәғдәнсе һөнәренә өйрәтер өсөн уҡыу йорто асырға рөхсәт һорай. Һөҙөмтәлә, 1773 йылда Санкт-Петербург ҡалаһында Екатерина Икенсенең указы буйынса Тау училищеһы асыла. Исмәғил Тасимов 1773 йылдан алып 1792 йылға тиклем 19 йыл буйы Рәсәй империяһы баш ҡалаһында үҙ аҡсаһына төҙөлгән уҡыу йортон үҙ аҡсаһына тота. 1773-1774 йылда ғына ла ул Тау училищеһы ҡаҙнаһына 61 000 һәм 74 830 аҡса бирә. Был уҡыу йорто бөгөнгө көндә лә Тау институты дәрәжәһендә әүҙем эшләп килә.

Ирәкте ҡәбиләһе башҡорттары көнсығыш (ҡара-табын) һәм көнбайыш табындарҙың вариҫтары булып тора. Ирәктеләрҙең ырыу башлыҡтары - Майҡы бей һәм уның вариҫы Ҡаратабын бей. Ҡаратабын бейҙең улы Сулман бей осоронда ирәкте ҡәбиләһе башҡорттары Миәс йылғаһы буйынан Кама (Сулман) йәки Ыҡ буйына күсенгән. "Ирәкте" һүҙе "ҡәлғәлә хеҙмәт итеүсе" тигәнде аңлата, был 1523 йылғы боронғо грамота менән раҫлана.

**(Дауамы бар).**

**✓ *Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының милли асылына иғтибарҙы көсәйтергә кәрәк. Беҙ уларҙың, башҡорт булып та татар булып йөрөргә мәжбүр ителгән ҡан-ҡәрҙәштәребеҙҙең, тауышын ишетергә тейеш.***



# ТАРИХЫН

## көс менән түгел,



**Башҡорттоң Табын ҡәбиләһе вәкилдәре бөгөн Учалы районының көньяғынан башлап, Ғафури, Ҡырмыҫҡалы, Архангел, Ауырғазы, Салауат, Дәүләкән, Балтас, Тәтешле, Яңауыл райондарында, Силәбе, Ырымбур, Һамар өлкәләрендә, Татарстан Республикаһында йәшәй. Табындарҙың ағасы - ҡарағас, ҡошо - ҡарағош, ораны - Салауат, тамғаһы тип һепертке иҫәпләнә. Быйыл Башҡортостандың 100 йыллығына ҡарата төрлө саралар ойошторола башланы һәм ошо уңайҙан ҡасандыр гөрләп күтәрелеп, бөгөн туҡталып ҡалған ырыуҙар хәрәкәте йыйындарын ҡабат уҙғарыуға тап Табын ҡәбиләһе башҡорттары юл асты. Бөгөн табындарҙың ҡор башы Нияз СӘЛИМОВ һәм яҙыусы, тарихсы Спартак ИЛЬЯСОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында арҙаҡлы ил ағаһы Булат Рафиҡов ырыуҙар хәрәкәтен башлап ебәреп, был сара ул заманда милли рух күтәрелеше булғайны. Ләкин хәрәкәт артабан тулҡын рәүешендә килде: бер күтәрелде, бер тынды һәм бына тағы ла ырыуҙар хәрәкәтенең осҡоно баҙлай башланы. Был ихтыяж бөгөн нилектән килеп тыуҙы?**

**Н. Сәлимов:** Ысынлап та, хәрәкәт башында абруйлы яҙыусыбыҙ, аҡыл эйәһе булараҡ, милли асылыбыҙға бары тик ырыуҙар хәрәкәтен йәйелдереп кенә ҡайта алыуыбыҙҙы тәрән аңлаған шәхес Булат Рафиҡов тора һәм был хаҡта беҙ онотorға тейеш түгел. Шанлы 90-сы йылдарҙа ул "Ағиҙел" журналында баш мөхәррир булып эшләй ине, редакцияға төрлө ырыу вәкилдәрен, зыялыларын йыйып алды. Шунда барыбыҙға ла ни өсөн ырыуҙар хәрәкәтен йәнләндерергә кәрәк икәнен төшөндөрҙө. Был эш, минеңсә, ул осор өсөн иң һөҙөмтәле ысул булды. Башҡорт халҡы - ул төрлө ҡәбилә һәм ырыуҙар ҡушылмаһынан барлыҡҡа килгән тәрән тамырлы этнос. Халҡыбыҙҙың бай тарихын төплөрәк белеү өсөн һәр ҡәбилә-ырыуҙың тамырҙарын барларға тейешбеҙ. Үткәнен белмәгән милләттең киләсәге юҡ, тип юҡҡа әйтмәгәндәр. Совет осоронда үҙ тарихыбыҙҙы өйрәнеүҙән мәхрүм иттеләр түгелме ни? Боронғо Рим, Греция һәм башҡа әллә күпме дәүләттәрҙең тарихын өйрәндек, ә үҙебеҙҙекен белмәй йәшәнек. Был хәл менән артабан килешеү мөмкин түгел ине. Ниһайәт, быуа йырылды - Башҡортостанда ырыуҙар хәрәкәте тыуҙы.

**С. Ильясов:** Ул ваҡытта совхоз директоры булып эшләй инем. Районда әүҙем милләттәштәрҙән тупланып, бер ҡорға төйнәлеп йөрөгән ир-егеттәр бар ине инде. Иң әүәл шуларҙы йыйып алдым һәм, башҡалар туплана, беҙгә лә тик ятырға ярамай, тип, ойоштороу комитеты булдырҙыҡ. Һуңынан инде райондың Әүеш күл буйына бөтөн район вәкилдәрен йыйырға ҡарар иттек. Учалы районы Башҡортостанда 100 проценты менән табындар йәшәгән үҙенсәлекле берҙән-бер район. Шуғалыр ҙа, хакимиәткә ошо хаҡта белдергәс, улар беҙгә ҡаршы килә алманы һәм Әүеш күле буйында йыйын ойошторҙоҡ. Хатта Силәбе өлкәһенең Уй, Сыбаркүл райондарынан казактар килде. Улар: "Беҙ һеҙҙең менән!" - тине. Шунда мин халыҡтарҙың ниндәйҙер ҡоршауҙан сығып, үҙаллы булыуына ныҡлы инандым.

**Тормош раҫлауынса, эште системалы алып барғанда ғына уңышҡа өлгәшергә мөмкин. Ырыуҙар хәрәкәте даими эшләүсе хәрәкәт булһын өсөн ул ниндәй системаға һалынырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?**

**Н. Сәлимов:** Тарихты беҙ үҙебеҙ яҙабыҙ. Ҙур шәхесме ул, бәләкәйме, урындағымы, энтузиастмы - илен, телен, ерен һөйә, халҡының проблемаларына битараф түгел икән, ул эшләйәсәк. Йыйындарҙа үҙебеҙҙең көстәребеҙҙе барлайбыҙ, йәштәребеҙҙә, балаларыбыҙҙа ата-бабаларыбыҙҙың данлы тарихына һөйөү тәрбиәләйбеҙ, шәжәрәләрҙе, тамырҙарҙы өйрәнеүгә этәргес, халҡыбыҙҙың рухиәтен, милли үҙаңын үҫтереүгә икенсе һулыш бирәбеҙ. Был йәһәттән, әлбиттә, система булырға тейешлеге менән тулыһынса килешәм. Табын ҡәбиләһенең йыйынын ойошторғанда шундай идея килде: ырыуҙар эстафетаһы вымпелын булдырырға һәм уны артабан тапшырырға. Әлбиттә, был эште Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты башланғысында алып барыу фарыз. Маҡсатҡа өлгәштек, тип уйлайым: Ҡоролтай етәкселеге менән һөйләшеп, килешеп, тәҡдим хуплау тапҡас, эстафетаны юрматыларға тапшырҙыҡ.

Ҡоролтайҙың Башҡарма комитетына Ырыуҙар советын йәки Ырыу башлыҡтары ҡорон төҙөү тураһында ла фекеребеҙҙе еткерҙек, сайттарында ырыуҙар хәрәкәте хаҡында бүлек булдырырға тигән тәҡдим дә булды. Шул саҡта ғына эш даими нигеҙҙә алып барыласаҡ. Юҡһа, ниндәйҙер юбилей алдынан күтәрелеп алабыҙ ҙа, һуңынан икенсе юбилей сараһы еткәнсе онотабыҙ. Беҙҙең өсөн һәр йыл, һәр ай, һәр көн ҡәҙерле, сөнки халҡыбыҙҙың, туған телебеҙҙең яҙмышы хәл ителә. Шуны онотorға тейеш түгелбеҙ: ЮНЕСКО документтарында башҡорт теле хәүеф аҫтында ҡалған телдәр рәтендә тора, 2020 йылда сираттағы халыҡ иҫәбен алыу сараһы үтәсәк. Бына ни өсөн беҙгә бөгөн айырыуса төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының милли асылына иғтибарҙы көсәйтергә кәрәк. Беҙ уларҙың, башҡорт булып та татар булып йөрөргә мәжбүр ителгән ҡан-ҡәрҙәштәребеҙҙең, тауышын ишетергә тейеш.



***Тәтешле районы делегаты Бәхтегәрәй Арманшиндың сығышы йыйындың кульминацияһы булды тиер инем. Ул башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләне. Бәхтигәрәй Сәлимгәрәй улы әйтеүенсә, күренекле мәғрифәтселәр аталы-уллы Ғәли Соҡорой һәм Ғарифулла Кейеков, Башҡортостандың халыҡ шағиры Әнғәм Атнабаев, уның бер туған һеңлеһе, мәшһүр актриса Зинира Атнабаева, Татарстандың халыҡ артистары Салауат Фәтхетдинов менән Хәниә Фәрхи ҙә - барыһы ла Табын башҡорттары. "Татарстанға барһаҡ, беҙҙе башҡорт тиҙәр. Өфөгә килһәк, татар тиҙәр. Ҡасанға тиклем беҙҙе ошолай ике арала йөрөтрҙәр икән?" - тип әсенеп һөйләне ул.***

**Бөгөн йәмәғәт ойошмалары шул тиклем күп, күҙәтеп йөрөһәң, уларҙың барыһында ла бер үк кешеләр...**

**Н. Сәлимов:** Быны мин насар күренеш тип уйламайым, ойошмалар күп булһын, бер маҡсатҡа эшләһендәр, тарҡаулыҡ булмаһын. Ә инде бер үк кешеләргә килгәндә, был, ысынлап та, проблема, "штатлы" кешеләр туйҙырҙы. Табындарҙың IV йыйынын үткәреү концепцияһын әҙерләгәндә, урындағы ойоштороу комитеттарына, район йыйындарына бәләкәй ауылдарҙан да делегаттар мотлаҡ һайланһын, тигән үтенесебеҙҙе еткерҙек. Юғиһә, әле күп ойошмаларҙа бер үк кешеләр: ҡоролтай рәйестәре лә улар, делегат та, депутат та һ.б. Беҙгә йәмәғәт эшенә беренсе сиратта йәштәрҙе ылыҡтырырға, уларҙы үҫтерергә кәрәк

**Табындар йыйынынан һуң күп кешенән: "Бына, исмаһам, Спартак ағай сығыш яһаны!" - тигән һоҡланыулы фекерҙәр ишетелде. Фекерҙәрегеҙҙе гәзит уҡыусылар менән дә бүлешһәгеҙ ине.**

**С. Ильясов:** Минең фекерем тарихсылар яҙып ҡалдырған стереотип менән тап килмәй, тарихи мәғлүмәттәрҙе мин бала саҡтан алып беҙҙең көнгә тиклем халыҡтың телдән-телгә тапшырылған тарихын һаҡлаусыларҙан, улар үҙҙәре тере саҡта йыйып, ишетеп ҡалған хәл-ваҡиғалар, хәтирәләр нигеҙендә туплағанмын. Мин, Рычков шулай тип яҙған, Нефедов былай тигән, Карамзин тегеләй күрһәткән, бургомистр тегендә йөрөп сыҡҡан, тигән кеүек сит милләттәрҙең яҙған тарихына нигеҙләнмәйем тиерлек. Ә беҙҙең тарихсылар милли тарихҡа урыҫ нимә әйтә, шуны шылдырып керетеп ултыртып ҡуйғандар ҙа, бөгөн берәй тарихи әйбер яҙһаң, ә сығанағың бармы, тип һорайҙар. Мин уларҙың үҙҙәренә һорау ҡуям: Карамзиндың 20 йыл яҙған тарихының сығанағы ҡайҙа? 10 йыл яҙған да, уның яҙғанын юҡҡа сығарғандар, сөнки ул дәүләт алып барған сәйәсәткә тура килмәгән. Ҡабат яҙҙырғандар - тағы ла 9 йыл яҙған. Шул тарихты бөгөн "История государства Российского", тип йөрөтәләр. Әммә хәҙер барлыҡ аҡ таптар өҫкә сыға, сөнки ысынбарлыҡ асыҡлана, сәйәсәт һәм рухиәт өлкәһендә башҡа халыҡтар менән бәйләнешкә инеүебеҙ һөҙөмтәһендә фекеребеҙ ҙә, офоҡтарыбыҙ ҙа киңәйә. Ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар, башҡа төрки халыҡтары менән бәйләнеш бар һәм күҙҙәребеҙ байтаҡҡа асылды. Элек был юлдар ябыҡ булды, архивтарға ла индермәйҙәр ине.

Мин ҡурҡмайынса шуны белдерәм: беҙгә милли тарихтың байтаҡ өлөшөн яңынан яҙырға кәрәк. Бына, мәҫәлән, бик ҙур иттереп, күккә күтәреп сөйөп Дмитрий Донскойҙы ҙурлайҙар. Ә ул Туҡтамыш хандың атлылары ярҙамы менән еңеүгә өлгәшә һәм шул нигеҙҙә икенсе халыҡ тарихында ҙур дан ҡаҙана. Әммә икенсе йыл уҡ Мәскәүҙе ҡалдырып, ғаиләһен алып ситкә ҡаса. Был тарихҡа билдәле факт һәм ҡайҙа ул данлы Тын (Дон) буйындағы батыр? Йәки бына тарихта төҙәтелергә тейешле тағы бер факт. Ермакты Себерҙе асыусы, тиҙәр. Себер (Ибер) бер ваҡытта ла асыуға мохтаж булмаған. Иберҙә дәүләттәр, ханлыҡтар, ҡағанлыҡтар меңәр йыл йәшәгән. Ә уны беҙгә Себерҙе асҡан кеше тип күрһәтәләр. Шуны уҡыйбыҙ һәм ул ғына ла түгел, уға бер 4 йыл элек Свердловск өлкәһе кешеләре урыҫса булһын, ҡыҫҡа булһын, матур булһын, тип, Оленин тигән фамилия бирҙеләр. Атаһына ла Тимофей исеме биргәндәр. Ермак - ул Йәрмәк, Йәрмөхәмәт, Йәркә, ҡараит (меркет) ырыуы вәкиле. Иберҙә Мөхәммәт Тайбуға хан менән Шайбан хан араһында ҙур көрәштәр, һуғыштар бара. Сөнки Мөхәммәт Тайбуғаның вариҫтары Волга яғына барып, несториан йүнәлешендәге христианлыҡ динен ҡабул итеп ҡайта, ә шайбандар - Ислам тәғлимәтен ҡабул итеп алған кешеләр. Шул нигеҙҙә Мөхәммәт Тайбуғаның кешеләрен Иберҙән ҡыуалар. Улар Тубылдың (Тобол) башына етеп, унан Яйыҡҡа күсәләр, Яйыҡ буйлап барып, Ырымбур өлкәһенең хәҙерге Переволоцкий районында Һамар йылғаһына кәмәләрен һөйрәп килтерәләр, Һамарҙан - Волгаға, Волганан Сулманға (Кама) төшөп, Каманан өҫкә күтәрелеп, Строгановтар тигән уғыр ерҙәренә барып эләгеп, Алтынай (Серебрянка) тигән йылғанан Тураға төшөп, Тура буйлап кире үҙҙәренең ерҙәренә ҡайталар. Урыҫ тарихында был ерҙәр Иҫке Ер (Искер) тип атала бөгөн ул Тобольск ҡалаһы.

Тарихсылар тағы бер нәмәне белмәй: Табын ҡәбиләһенең төп атрибуты Сыңға. Уның мәғәнәһе - бергә тотоу, бәлки, табын исеме лә шунан сыҡҡандыр - бергә, бер ҡор, бер табын булып ултырыу. Төптәнерәк уйлап ҡараһаҡ, бөгөнгө Төмәндең - Төмән ҡағандың баш ҡалаһының боронғо исеме Сыңға-Тура. Һәм барлыҡ хандарҙың исеме Тура исемен йөрөтә. Быларҙы нимә өсөн ентекләп һөйләнем, сөнки ошо тарих Табын ҡәбиләһенә һәм ҡағанатына ҡағыла. Әммә

*✓ Тағы шундай тәҡдим индерҙем - Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендә башҡорт милли-азатлыҡ көрәшенең етәкселәренә һәм башҡа батырҙарға бағышлап, ике яғынан "Батырҙар аллеяһы" эшләргә. Бына был бик ҙур эш булыр ине.*



тарихсылар һаман да элекке стереотиптан арына алмай, рустар яҙып ҡалдырғанға ышана, ә үҙең белгәнеңде һөйләһәң, ул инде ҙур шик тыуҙыра, көләмһерәп ҡарайҙар. Әммә киләсәктә һөйләйәсәктәрем күп әле.

**Табын ҡәбиләһенең йыйынында тетрәндергән, күңелгә үтеп ингән, күҙҙән йәштәр сығарған ниндәй мәл күҙ алдығыҙҙа тора?**

**Н. Сәлимов:** Тәтешле районы делегаты Бәхтегәрәй Арманшиндың сығышы йыйындың кульминацияһы булды тиер инем. Ул башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләне. Бәхтигәрәй Сәлимгәрәй улы әйтеүенсә, күренекле мәғрифәтселәр аталы-уллы Ғәли Соҡорой һәм Ғарифулла Кейеков, Башҡортостандың халыҡ шағиры Әнғәм Атнабаев, уның бер туған һеңлеһе, мәшһүр актриса Зинира Атнабаева, Татарстандың халыҡ артистары Салауат Фәтхетдинов менән Хәниә Фәрхи ҙә - барыһы ла Табын башҡорттары. "Татарстанға барһаҡ, беҙҙе башҡорт тиҙәр. Өфөгә килһәк, татар тиҙәр. Ҡасанға тиклем беҙҙе ошолай ике арала йөрөтрҙәр икән?" - тип әсенеп һөйләне ул. Сығышы аҙағында: "Беҙ - Табын башҡорттары!" - тип асыҡтан-асыҡ белдергән Б. Арманшинды бөтөн халыҡ аяғөҫтө баҫып алҡышланы. Уның һәм Ғәли Соҡоройҙоң 700 кешелек шәжәрәһен бәйән иткән Венер Ғилимшиндың сығыштары йыйын делегаттарына һәм ҡунаҡтарына бик көслө тәьҫир итте, тарихи асылыбыҙҙы апасыҡ күрһәтте. Йыйындың төп маҡсаттарының береһе тап ошо ине.

**С. Ильясов:** Бында мин тағы бер миҫал килтерер инем. Батша заманында уҡ башҡортто айырыу, араһына шына ҡағыу сәйәсәте алып барылған, бының өсөн төрлө юлдар эҙләнгән. Шуларҙың береһе - ҙур яһаҡ һалыу, ерҙәрен талап алыу. 1736 йылдың 11 февралендәге ҡарар менән булған 12-13 яһаҡҡа өҫтәп, тағы ла 20 яһаҡ индергәндәр. Шунда тәүге пунктта уҡ "бунтовщичьи земли отбирать" тип яҙылған. Бунтовщичье - халыҡ бөгөн типтәр тип атаған ҡатлам. Уларҙың араһынан беҙҙең тирәнән 1682-1686 йылдарҙағы һуғыштар (Һары Мәргән, Көсөк батыр), 1730 йылдарҙағы ихтилалдар етәкселәре, тарихҡа инмәгән, әммә яҙа-йоҙа ғына телгә алынған Йосоп батыр Арыҡов, Аҡҡужа батыр Ҡоломбәтов, Юлдаш мулла Һөйәрембәтов, көрәш тәғлимәтсеһе-идеолог Бәпәнә абыҙ Төрөпбирҙин була. Былар тураһында тарихта мәғлүмәттәр юҡ кимәлендә. Шул баш күтәреүҙәрҙән һуң башҡорт халҡының ерҙәрен тартып алалар ҙа, уларҙы ерһеҙ ҡалдырып, дәүләт крепостнойы итәләр. Уларҙы көсләп суҡындырырға теләһәләр ҙә, суҡынмайҙар, "Тип тәрене!" - тип, тәрене тибәләр. Шунан килеп сыҡҡан ул типтәр тигән атама. Типтәр ҡарттарының: "Батша беҙҙең ерҙәрҙе тартып алды ла, 1917 йылда кире ҡайтарҙылар, коллективлаштырыу йылдарында ҡабат тартып алдылар", - тип һөйләгәне бар. Беҙ әлегә ҡәҙәре ерһеҙбеҙ, ти Ураҙ һәм башҡа ауылдарҙың ололары. Дөрөҫ әйтәләр. Беҙ уларҙы типтәр тибеҙ, ә улар хатта телдәрен үҙгәртергә мәжбүр булған башҡорттар. Типтәрҙәрҙе ситкә типмәҫкә кәрәк, улар барыһы ла беҙҙең халыҡ. Араларында рухлы егет-ҡыҙҙар туптулы, иншаллаһ.

**I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында уҡ ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе Башҡортостанға ҡайтарыу программаһын эшләү мәсьәләһе күтәрелгәйне, әммә ул һүҙ генә булып ҡалды... Бәлки, ырыуҙар хәрәкәте ошо онотолған эште ҡабат тергеҙер?**

**Н. Сәлимов:** Ысынлап та, был - ҙур проблема. Сит тарафтарҙа йәшәгән милләттәштәребеҙҙең бер өлөшө уҙған быуат аҙаҡтарында Башҡортостанға ҡайтты ҡайтыуын, әммә уларҙы бөтмәҫ ҡаршылыҡтар ҡаршы алды. Аптырағас, кемдәрҙер ҡабат йәшәгән төйәгенә кире китергә мәжбүр булды. Был мәсьәләне нисек хәл итергә һуң? Минеңсә, ырыу ойошмалары урындағы ҡоролтайҙар, ағинәйҙәр ҡоро менән берлектә һәр районда, һәр ауылда буш торған йорттарҙың исемлеген төҙөп, уларҙың хужаларын табырға тейеш. Тыуып үҫкән еренә ҡайтырға теләгән кешеләргә, шул-шул ауылда буш өй бар, хужаһы шул, шунса хаҡ һорай, телефон номеры ошо, тип хәбәр итергә генә ҡала. Райондарҙағы барлыҡ ижтимағи ойошмалар - бәйләнеш булдыра торған звено. Әгәр бөгөн ошо йүнәлештә аныҡ эшкә тотонмайбыҙ икән, 10-20 йылдан һуң да бер ниндәй ҙә үҙгәреш булмаясаҡ. Ҡан-ҡәрҙәштәребеҙ сит тарафтарҙа мәрхүм булып ҡаласаҡ. Ә бит ололарҙың, тыуған яғына ҡайтып, ғәзиз тупрағына ятҡыһы килә. Был - бер. Икенсенән, уларҙың балалары, ейән-ейәнсәрҙәре ҡайтыр, милләтебеҙгә иш янына ҡуш булыр, мәктәптәребеҙҙә уҡыусылар һаны ла бермә-бер артыр ине.

**С. Ильясов:** Бөтөн нәмәне кеше эшләй. Әммә беҙ дәүләттә йәшәйбеҙ һәм дәүләт, власть вертикале структураһындағы етәкселәр шул рухта булмаһа, халыҡ өсөн янмаһа, халыҡ мәнфәғәтендә эшләмәһә, барлыҡ изге ниәттәрҙе тормошҡа ашырыуы йә мөмкин түгел, йә бик ауыр буласаҡ.

Өҫтәүенә, һуңғы ваҡытта Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетын ябалар имеш, тигән борсоулы хәбәрҙәр йыш ишетелә. Шулай була ҡалһа, был халыҡ үҙенең тарихын бөтөнләй белмәһен өсөн алып барылған сәйәсәт буласаҡ. Тағы нимә әйтергә теләйем: урындағы етәкселәр башҡорт милләтенән һайланырға тейеш, сөнки беҙ Башҡортостан Республикаһында йәшәйбеҙ, Рәсәйҙә лайыҡлы урын алып торабыҙ. Рәсәй Федерацияһына беҙ, башҡорттар, нигеҙ һалғанбыҙ.

# БЕЛГӘНДӘР...

## ғилеме менән башҡаларҙы йыға



> ***Мин ҡурҡмайынса шуны белдерәм: беҙгә милли тарихтың байтаҡ өлөшөн яңынан яҙырға кәрәк. Бына, мәҫәлән, бик ҙур иттереп, күккә күтәреп сөйөп Дмитрий Донскойҙы ҙурлайҙар. Ә ул Туҡтамыш хандың атлылары ярҙамы менән еңеүгә өлгәшә һәм шул нигеҙҙә икенсе халыҡ тарихында ҙур дан ҡаҙана. Әммә икенсе йыл уҡ Мәскәүҙе ҡалдырып, ғаиләһен алып ситкә ҡаса. Был тарихҡа билдәле факт һәм ҡайҙа ул данлы Тын (Дон) буйындағы батыр? Йәки бына тарихта төҙәтелергә тейешле тағы бер факт. Ермакты Себерҙе асыусы, тиҙәр. Себер (Ибер) бер ваҡытта ла асыуға мохтаж булмаған. Иберҙә дәүләттәр, ханлыҡтар, ҡағанлыҡтар меңәр йыл йәшәгән.***

**Ҡабаттан йыйынға урап ҡайтһаҡ, унда башҡа йылдарҙан айырмалы, ниндәй үҙенсәлектәр булды, ниндәй башланғысҡа нигеҙ һалынды?**

**Н. Сәлимов:** Беренсе тапҡыр "Табын ҡәбиләһенең арҙаҡлы шәхесе" тигән исем булдырып, уны дүрт кешегә тапшырҙыҡ. Был исемгә быйыл үҙенең 75 йәшен тултырған яҙыусы, тарихсы Спартак Ильясов, 2011 йылда Красноусол шифаханаһы биләмәһендә Табын ҡәбиләһе башлығы Күрпәс бейгә стела эшләтеүҙә финанс ярҙамы күрһәткән "Иммунопрепарат" производство берекмәһенең элекке генераль директоры Мөхәммәт Алсынбаев, Ҡырмыҫҡалы районында бер йылда дүрт һәйкәл - генерал Шайморатовҡа (Шайморатов ауылы), Фәрит Исәнғоловҡа (Иҫке Бәпес), Ҡәнзәфәр Усаевҡа (Боҙаяҙ) һәм Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға комплекс ҡуйыуға өлгәшкән хакимиәт башлығы Фәнзил Сыңғыҙов, ғүмер буйы йәмәғәтселек эшендә әүҙем ҡатнашҡан уҡытыусы, мәғрифәтсе, Рәсәй мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы, дин әһеле Ғиндулла Шәйәхмәтов лайыҡ булды.

БАССР-ҙың халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғоловҡа тыуған яғында яҡташтары һәйкәл ҡуйырға ниәт иткән. Уларға афарин тип әйтергә генә ҡала - бына кемдәрҙән үрнәк алырға кәрәк! Ҡор эше барышында ошо маҡсатта аҡса йыйыу ойошторолдо. Был үҙе үк - аныҡ эш күрһәткесе.

Быйыл Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һәм Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты 100 шәхес исемен асыҡлаһа, беҙ уны һан менән сикләмәҫкә булдыҡ. Ошо ҡорҙа "Табын ҡәбиләһенең арҙаҡлы шәхестәре" тигән акцияға старт бирҙек. Үҙ районының билдәле шәхестәрен асыҡлау буйынса эҙләнеү эше алып барыу тыуған яҡты өйрәнеүселәр өсөн генә түгел, мәктәп уҡыусылары һәм студенттар өсөн дә ҡыҙыҡлы ла, файҙалы ла буласаҡ. Алдынғы ҡарашлы уҡытыусылар, мәктәп директорҙары ошоға баҫым яһап, был эшкә тиҙ арала ҡушылыр, тип өмөтләнәм. Исемлеккә индерелергә лайыҡлы тип табылған кешеләрҙе абруйлы комиссия аныҡ критерийҙар буйынса һайлап аласаҡ. Аҙаҡ иһә "Табындарҙың арҙаҡлы шәхестәре" исемле брошюра нәшер итеү күҙҙә тотола.

**С. Ильясов:** Һәйкәлдәр һәм шәхестәр тураһында һүҙ сыҡҡас, шуны ла әйтеп китәйем. Шакирйән Мөхәмәтйәновты башҡаларға эйәреп һаман Александр Матросов тип атайбыҙ. Был тарихты арҙаҡлы журналисыбыҙ Рәүеф Насиров та аңлатып, эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһен китап итеп яҙып сыҡты бит инде. Бына әле учалылар йыйынға Шакирйәндең шәжәрәһен алып килде. Мин бар халыҡ алдында ошо турала матур итеп һөйләнем. Тағы шундай тәҡдим индерҙем - Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендә башҡорт милли-азатлыҡ көрәшенең етәкселәренә һәм башҡа батырҙарға бағышлап, ике яғынан "Батырҙар аллеяһы" эшләргә. Бына был бик ҙур эш булыр ине.

**Н. Сәлимов:** Шуны ла өҫтәргә кәрәк, резолюцияға баш ҡалала М. Өмөтбаевҡа, М. Буранғоловҡа, М. Мортазинға һәйкәл ҡуйыу тураһында пункт индерҙек. Ғөмүмән, арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең исемен мәңгеләштереү буйынса һәр ҡалала һәм районда эш алып барырға кәрәк. Был йәһәттән ижтимағи ойошмалар ныҡышмалылыҡ күрһәтергә тейеш

**Ырыуҙар хәрәкәте эшенә йәштәрҙе йәлеп итергә кәрәк, тигән фекер булды. Ысынлап та, киләсәкте бөгөнгө йәштәргә бәйләйбеҙ икән, уларға милли рухты, башҡортлоҡтоң асылын бала, үҫмер саҡтан, йәшлек ваҡытынан тәрбиәләргә кәрәк һәм йәштәргә ышаныс күрһәтеүҙән, уларға яуаплы эштәр йөкмәтеүҙән дә ҡурҡырға ярамайҙыр...**

**Н. Сәлимов:** Был проблеманы күҙ уңында тотоп, йыйында йәйгеһен Табын ҡәбиләһе йәштәренең һабантуйын һәм шәжәрә байрамын үткәрергә ҡарар иттек. Бындай сараларға халыҡ былай ҙа бара, әммә ҡатнашыусыларҙың 70 проценты студенттар, йәштәр, хатта мәктәп уҡыусылары булырға тейеш. Ошо йүнәлештә эҙмә-эҙлекле эш алып барһаҡ ҡына үҙ бурысыбыҙҙы үтәнек һәм ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған васыятты үҙ балаларыбыҙға еткерҙек, тип әйтә аласаҡбыҙ.

**С. Ильясов:** Йәштәрҙе үҙебеҙҙең тарих аша тәрбиәләргә кәрәк. Сөнки ошо нигеҙҙә тәрбиәләнгән бала ғына үҫеп еткәс үҙенең кем икәнен аңлай башлай. Тарихын белгән кеше генә үҙенең кемлеген белеп, үҙен көслө хис итә. Әгәр кеше үҙен был донъяла үткенсе кеүек кенә итеп тойһа, ул зәғиф күңелле була. Ә бында һин - ил хужаһы. Бында һин күкрәгеңде киреп тораһың. Көрәшеү, һикереү, әлбиттә, һәйбәт, әммә тарихында бешеп үҫкән йәштәр халҡына ла, иленә лә, еренә лә тоғро була, көс ҡулланмайынса, ғилеме менән башҡаларҙы йыға.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

***"Ете ырыу ете яҡтан***
***Уға ҡарап тупланған.***
***Табындарҙың берҙәмлеге***
***Заман менән хупланған"*, - тип юҡҡа ғына яҙмаған Ирек Кинйәбулатов. Бөгөн Башҡортостандың барлыҡ ырыуҙары Табын ҡәбиләһенә өмөт менән баҡҡан һәм уларҙың йыйынынан һуң аныҡ ғәмәлдәр, милләт өсөн файҙалы башланғыстар, асылыбыҙҙың иң төбөндә ғәфләт йоҡоһона сумаған Рух ҡошон уятырлыҡ эштәр көтә.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**




1

Башҡорт гәскәре лә Рәсәй эсендә барған ҡанлы бәрелештәрҙән ситтә ҡала алманы. Бер кем дә мөхтәриәтте "Мә, ал!" тип, ҡулға килтереп тоттормаясаҡ. Бөйөк маҡсат - ирекле йөмһүриәт өсөн көрәш - ир-азаматтарҙы ҡанатлы итте. Бына шуға ҡыҙылдарҙың үҙаллылыҡты, азатлыҡты инҡар итеүе уларҙы аҡтар менән берләшеүгә алып килде. Хатта Колчак башҡорт гәскәренең берҙәмлегенә, һуғыша белеүенә, сыҙамлығына, фиҙакәрлегенә аптырай, бының серен аңлай алмай ине. Ни генә тигәндә лә, Бөйөк Рәсәй төҙөргә, унда үҙ хакимлығын урынлаштырырға ынтылған көстәр өсөн башҡорт гәскәре хәүеф тә уятты һәм ҡорт булып уларҙың йөрәген кимерҙе. Һәр яңы тыуған көн улар алдына яңы һорауҙар ҡуйҙы. Алда нисек булыр, ә әлегә башҡорт полктары вәғәҙәгә тоғро, ҡуйылған бурысты үтәп килә. Ошо мөмкинлекте улар ҡулдан ысҡындырмаҫҡа тырышты. Шулай ҙа "Беҙ ҡыҙылдар ҙа, аҡтар ҙа түгел, беҙ - башҡорттар," тигән оранды колчаксылар онотманы һәм онотасаҡтары ла юҡ ине. Был башҡорттарҙың ахырғы маҡсат булыуынан ҡурҡтылар. Ысынлап та, ирекле йөмһүриәт Рәсәй империяһында быуаттар буйы иҙелгән ғорур милләттең бөйөк маҡсаты ине. Башҡорт полктары дәһшәтле алыштар аша үтте. Әлбиттә, ҡорал наҡыҫлығы, кейем-һалым етешмәүе уларға ауырлыҡ тыуҙыра, шулай ҙа башҡорт һалдатының рух көсө берәүҙеке менән дә сағыштырғыһыҙ. Бына шул Хоҙайҙан бирелгән көс уларҙы еңеүҙәргә алып килде, иң ҡурҡыу саҡтарҙа өмөт бирҙе.

Әбделмән Башҡорт әрмеһенә яҙылғансы уҡ, яу күнекмәләрен үткән, сыныҡҡан кеше ине, сөнки ул мәшһүр һунарсылар тоҡомонан. Ҡартатаһының да, атаһының да даны алыҫтарға таралған. Ул да бәләкәйҙән ололар менән бер ҡатар ауға йөрөнө. Үҙе иҫ белгәндә биләндә - хәнйәре, ҡулында уҡ-яны. Ҙурая килә янды - мылтыҡ, бәләкәйерәк хәнйәрен өлкәнерәгә алмаштырҙы. Рәсәйҙә ғәрәсәт ҡубыуы, хөрриәт, мөхтәриәт һүҙҙәре тормошҡа үтеп инеүе, башҡорт милли хәрәкәте йәнләнеүе, Башҡортостандың үҙаллылығы иғлан ителеүе - барыһы ла күҙ асып йомғансы булды кеүек. "Вәлиди төрмәнән ҡасҡан. Хәҙер башҡорт гәскәре туплана. Милләт өсөн хәл иткес мәл килеп етте!" Оран Ялан кантонына килеп ишетелеү менән, атаһы мәргән улына ҡарап һүҙһеҙ баш ҡаҡты. Ата фатихаһын алған Әбделмән турайғырға атланды, ата-бабаларының мәңгелек хыялын - азатлыҡты яулашыр өсөн изге юлға аяҡ баҫты. Утты-һыуҙы кисеп яуҙарҙа сыныҡҡан эфисәр Ғариф ағаһы менән артабан бер-береһенә терәк булдылар. Шул уҡ көндәрҙә ил ағаһының ғүмерен һаҡлау өсөн бик киҫкен алышта булып өлгөрҙөләр. Вәлидиҙе юҡ итер өсөн ҡыҙыл әшнәләрен алып юлға сыҡҡан Минһаждың юлын быуҙы улар. "Зәкиҙе үҙ ҡулым менән атып үлтерәм!" тип яҫҡанған был монархист үҙенә ҡаршы ташланған атлы башҡорт егеттәрен һис көтмәгәйне. Ҡыҙылдар төркөмө сигенә-сигенә харабалар эсенә инеп боҫто. Уңайлы ине уларҙың позицияһы, бөтөн тирә-яҡ ус төбөндә генә: бер егетте һәм бер атты яралап өлгөрҙөләр. Артабан барыр юл ҡырҡылды. Шул саҡ Әбделмән аунай-тәгәрәй, ырғый-йүгерә юҡ булды. Бер ағастан икенсеһенә һикереп, ҡаялар буйлап ҡоралай шикелле үрләп үҫкән тилбер егет күҙ асып йомған арала хараба өҫтөндә, тас Минһаждың ҡашында, утлы ҡоралын уның ике ҡаш араһына тоҫҡап баҫып тора ине. Әбделмән быуар йыландың күҙҙәре менән осрашты.

Азатлыҡты быуырға теләгән быуар менән... Монархист ҡатып ҡалды. Егет дошманына иҫәнә килергә ирек бирмәне, тәтегә баҫты. Ҡалған әшнәләре ҡасырға маташты, ләкин ҡотолоу юҡ ине инде, батыр егеттәрҙең пулялары арттарынан ҡыуып етте. Минһаждың Зәкиҙе үлтерәм, тип янаған пистолетын Ғариф үҙ ҡулдары менән Вәлидигә тапшырҙы. Ә полк үҫте. Тәүгеләрҙән булып яҙылған Әбделмәнгә төрлө алыштарҙа ҡатнашырға тура килде. Ләкин бер пуля ла уны алманы. Үҙе һымаҡ мәргәндәр менән разведкаға сыҡты, тел дә алып ҡайтты, дошмандарҙың снайперҙарын юҡ итте, барыр юлды таҙартты. Вәлидиҙең ҡанатландырғыс һүҙҙәре милләттәштәрен бөйөк эшкә йәлеп итте, Әбделмән был изге юлда бик күп ҡаһармандарҙы тап итте. "Егет эшләй, ҡорал маҡтана", тигәндәй, уның винтовкаһы күпме башҡортто үлемдән алып ҡалды, күпме дошмандың йәнен ҡыйҙы. Ҡорал да, аҙыҡ-түлек тә етешмәне. Таланған халҡы үҙе лә насар йәшәй, шуға ҡарамаҫтан, гәскәргә хәленән килгәнсә ярҙам итергә тырышты, аҡтыҡ ризығын да ул милли азатлыҡ өсөн көрәшкән һалдаттар менән бүлеште. Азатлыҡ, тип егеттәрҙең йөрәге бер булып типте. Был изге һәм дәһшәтле юлда үлем дә, яҙалар ҙа, аслыҡ та кәртә түгел ине. Һәр яу, һәр еңеү - киләсәккә булған башҡорттоң хыялына яҡынайта. Башҡорт иле булған. Башҡорт иле йәшәйәсәк. Башҡорт азат. Башҡорт бар. Буласаҡ. З. Вәлидиҙең һүҙҙәре доға булып йөрәккә уйылып яҙылды.

* * *

Оло йылға аша дәһшәтле тулҡын булып ҡыҙылдарҙың гәскәре йөҙөп сығырға ынтыла. Командирҙары ажар, яу юлын үткән тәжрибәле етәксе, ҡасандыр батша әрмеһе командиры, аҡтар яғында булып, революция яһаусыларҙы ҡырған. Низағҡа килгәндән һуң, полкташтар бүленә, бер-береһенә ҡаршы ҡорал күтәрә. Был командир эйәрсәндәре менән, ҡайҙа аяҡ баҫалар, шунда үҙ закондарын урынлаштырып йөрөй, тора-бара ҡыҙылдарҙың идеологияһын ҡабул итеп, улар яғына сыға, үҙенең хәрби оҫталығын күрһәткәндән аҙаҡ, ярлы-ялпының, асарбаҡтарҙың етәксеһе дәрәжәһенә күтәрелә. Антагонистарын юҡ итеүҙе йәшәү мәғәнәһе тип ҡабул иткән элекке аҡ командир өсөн, гүйә, хәҙер бер ниндәй ҙә кәртә юҡ.

Бөгөн улар башҡорт полктарын формалаштырыуҙа ярҙам иткән ауыл-ҡасаба халҡын яҙаға тарттырырға, тигән бойороҡто үтәргә ашыға. Бик күп еңеү яулаған, һаман алға ынтылған был дивизияға ҡаршы тороу еңел түгел. Тыныс халыҡ - ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, тип тормаясаҡтар. Аяуһыҙ рәүештә улар өҫтөнә төшәсәк был синфилыҡ көрәше. Милли азатлыҡ рухы быуаттар буйы иҫкә төшмәҫлек итеп алып ташланасаҡ.

Фәҡәт ошо командирҙы юҡ итеп кенә ҡыҙылдарҙың һөжүмен кире ҡағып буласаҡ. Берҙән-бер юл. Снайперҙың бурысы үтә яуаплы. Ябырылып килгән яуҙы албырғытыу, сигендереү, таркатыу өсөн бөтәһен дә эшләргә! Ошо мәлдә башҡорт йөмһүриәтенең яҙмышы хәл ителә түгелме? Гәскәр тар-мар ителһә, халыҡҡа ҡот осҡос афәт ябырыласаҡ. Егеттең йөрәгендә ҡурҡыу ҙа, шик тә юҡ. Әбделмән яу юлында бер тапҡыр ҙа һынатмаған тоғро дуҫын - винтовкаһын ҡыҫыбыраҡ тото. Был винтовка - ирекkә юл ярыу сараһы. Мәргән ҡулы ҡалтырауҙы белмәй. Күҙенән ҡоштар батшаһы көнләшерлек. Ул үҙе бөркөттәрҙең бөркөтө. Ул кейектән етеҙ, януарҙан йылғыр, йыртҡыстан ғәйрәтле. Ул дошманға ҡаршы барғанда һеләүһен дә, бүре лә, ҡарсыға ла. Һуғыш ҡот осҡос нәмә, берәү ҙә уға атлығып тормай, ләкин һинең халҡыңды икегә бүлергә һәм бер-береһенә ҡуйырға маташалар икән, был золомға хәлдән килгәнсә ҡаршы торорға кәрәк.

Ер-баба өҫтөнән күпме алыш үткән! Бына әле лә мәхшәр, гүйә, ер менән күк буталған: туптар гөрһөлдәй, тимер сынлай, аттар кешнәй. Әҙәм балалары зыҡ ҡуба: кемдер аҡыра, кемдер һәрән һала, кемдер ыңғыраша. Йылға урғыла. Әйтерһең, ер-баба әрней, ер-баба үкһей... Әбделмәндең күпме ата-бабаһы изге ере, ватаны өсөн бында ҡылыс айҡаған, күпмеһе шәһит булып ауған. Әбделмән бабалары рухына тоғро. Ул башҡорт иле өсөн һуңғы һулышына тиклем көрәшәсәк, йәнен фиҙа итәсәк. Дуҫы Бабич әйтҡәнсә, "Башҡортостан йәшәй, тиһән, бер үҙемә миллион үлем бир!.." Уның зирәк, аҡыллы, иң мөһиме, ышаныслы ҡарашын күреү үҙе үк сикһеҙ көс бирә. Эйе, гәскәр ҡаты алыштарҙа ҡатнашып, юғалтыуҙар кисереп һаман алға бара. Улар үҙҙәренең мәртәбәле бөйөк халыҡ икәнен һәр тән күҙәнәге менән тоя. Еңеүгә ышаныс Зәки Вәлидиҙең ҡаҡшамаҫ рухы, халҡының башҡорт гәскәренә ышанысы менән бәйле.

Әбделмәндең яҙа атырға хаҡы юҡ, был уның ғына һәләкәте булмаясаҡ... Ошо мәлдә, эйе, тап ошо мәлдә дошман снайперҙары тирә-йүнде байҡай. Саҡ ҡына шикле күренгән урын ут өйөрмәһенә дусар ителә, сөнки ғәйрәтле ҡыҙыл әрменең махсус дивизияһы ҡалайтып булһа ла оло дарья аша сығырға тейеш. Был уларҙың стратегияһы менән бәйле. Һал менән килгән командир асығыраҡ шәйләнә башланы, төйнәгән йоҙроғо, һелккән һайын, гүйә, һауаны телеп үтә. "Ваҡыт", тине эске тауыш. Әбделмән винтовкаһын яурынына терәне, ҡая таштар араһынан әҙ генә ҡалҡынғандай итте. Һәм... Ҡапыл командирҙың башы һәленеп төштө. Шул уҡ секундта сос егет ҡаянан аҫҡа осто. Тирә-йүнде төтөн ялманы, снарядтар шартлауы баҫты. Ҡыҙылдар араһында ығы-зығы ҡупты.

2

Кәримә, өйгә ҡайтып ингәнсе иренен тешләп, нисек тә иламаҫҡа тырышты. Рәнйеттеләр уны нахаҡҡа. Ҡыҙыҡайға ныҡ үсеккән Алмас бергә уйнаған балалар алдында: "Һинең атайың милләтсе!" тип ҡысҡырҙы. Йүгереп ярышҡанда Кәримәнән еңелдә лә, бына шулай үс алырға маташты. "Милләтселәр ҡасып бөткән, һин дә табаныңды ялтырат!" Был тиклем яла яғыуға ҡалай түҙмәк кәрәк! Кәримәнең атаһы - колхоз алдынғыһы. Бөтөн эште уға ышанып тапшыралар, уға таяналар, унан кәңәш һорап киләләр. Атаһына ошаҡлап, теге ҡарәстең кәрәген бирҙертмәһәме! Бына шулай ҡәһәтләнеп ҡайтып инде ул өйгә. Ҡыҙыҡай атаһының башҡорт гәскәрендә булғанын белә, ләкин азатлыҡ өсөн көрәштә ауылдан бер ул ғына ҡатнашмаған да баһа. Тик ағайҙар ул турала хәҙер һөйләп бармайҙар. Мәҫәлән, әхирәте Зөбилә үҙенең атаһынан Вәлиди гәскәрендә нимә эшләнегеҙ, тип һорағайны, атаһының төҫө үҙгәреп китте. "Тс-с-с, ҡыҙым, был турала бүтән өндәшәһе булма, ишетһен ҡолағың", тине. Зөбилә генә түгел, Кәримә лә атай кешенең күҙҙәрендә ҡурҡыу күрҙе, ул йылдарҙы хәтерләргә теләмәгәнен балалар ҙа яҡшы аңланы.

- Атай, һин Вәлиди гәскәрендә әҙ генә булғанһың, ивет?

- Һе-һе... - Әбделмән ағай көлдө. - Юҡ, ҡыҙым, башынан аҙағына тиклем йөрөнөм. Аҙаҡ уны ҡырға китергә мәжбүр иттеләр. Вәлидиҙе оҙатып та барҙым. Ҡайҙа тиклем икәнен әйтеп тормайым.

Кәримәнең тамағына төйөр тығылды. Атаһы уның ниндәй яуап көткәнен белмәйме ни? Ата, ысынлап та, белмәй ине. Шанлы, данлы юлдарҙы хәтерләгән Әбделмәндең ҡарашы яҡтырҙы. Ул һөйөү тулы күҙҙәр менән баҡты донъяға. Эштән арып ҡайтҡаны ла онотолдо. Был ғәжәйеп үҙгәрешкә тойған Кәримә ситкәрәк атланы. Бер нәмәне яҡшы аңланы: уның атаһы Зөбиләнең атаһына оҡшамаған.

- Ҡыҙым, һин ҡайҙа? Яҡыныраҡ кил, батырыбыҙ менән бәйле бер хәлде һөйләйем әле.

Кәримә ул заман тураһында бер нәмә лә ишеткеһе килмәй. Был бик ҡурҡыныс. Унан бармаҡ төртөп көләргә генә торалар. Атаһы шуны нисек аңламай? Ләкин Кәримә атайға ҡаршы бер һүҙ әйтә алмай. Ҡурҡыу һәм хөрмәт - бөтөнөһө бер йөрәктә. Шуға ла ул икенсе төрләрәк яуаплай.

- Дәрес әҙерләйем! Аҙаҡ, атай.

Эйе, бормалы-ҡатмарлы юл үтергә тура килде Әбделмәнгә. Зәки Вәлиди янында булыуы, уның янында иңгә-иң тороп башҡортто иҙеүселәргә көрәшеүе менән һәр саҡ ғорурланды. Ҡыҙылдар яғына сығыуҙы ла төрлөсә ҡабул итте арҡаҙаштар, ә Әбделмән икеләнмәне. Халҡының арҙаҡлы улы менән был турала һөйләшеү бәхете тейҙе. Уны оҙатҡан саҡта әйткән аҡыллы кәңәштәрен тотто. Бына шуға ла тыуған яғына икенсерәк бурыстар менән әйләнеп ҡайтты. Яңы хөкүмәт менән килешеп эш башлауы ауырға төшмәне. Уның төйәге лә "яңы тормошҡа" ҡуҫҡайне. Күрше ауылдан Зәкирә исемле ҡыҙҙы кәләш итеп алды. Бер-бер артлы ете бала донъяға килде. Башта тыуған ауылында уҡытыусы булып эшләне. Тик үткәндәрендә соҡсона башлаусылар табылғас, урыҫ менән башҡорт йәшәгән ҡатнаш ауылға күсеп китте.

(Дауамы бар).

ЗАУЫҠ

# ҺИС БАЙЫМАҪ ҠОЯШЫМ БАР...



**Бер шәлкем шиғырҙарын уҡып, әҙәбиәтебеҙ күгендәге сағыу йондоҙҙарҙың береһе булған яҙыусы Фәүзиә РӘХИМҒОЛОВАНЫ иҫләп алайыҡ. Повесть-хикәйәләр, балалар һәм ололар өсөн шиғырҙар, инсценировкалар тупланған өс тиҫтәгә яҡын китаптар авторы ул. Уның ижады, мәңгелек төшөнсәләргә нигеҙләнгән поэзияһы бөгөнгө уҡыусы өсөн дә актуаль булған темаларҙы ҡуҙғата. Фәүзиә Абдулла ҡыҙы ысын мәғәнәһендә заман ижадсыһы. Ә был бәхет һәр әҙипкә лә тәтемәй.**

### Тыуған яҡта

Йәйҙәр килде еребеҙгә,
Сәскәлә балҡый гөләм.
Эй, гүзәлһең, эй, яҡынһың,
Тиңдәшһеҙ Тыуған илем!
Сәскәлә балҡый гөләм.

Атлап барам болон буйлап,
Иҫереп хистәремдән.
Иртәләрем аҫылыраҡ
Йондоҙло кистәремдән,
Иҫерәм хистәремдән.

Тыуған тупраҡ, баҫыуҙарым,
Баш ҡоҫҡан арыштарым!
"Һин - бәхетле, бәхетле!" - тип
Йылмая таныштарым,
Башҡоҫҡан арыштарым!

Һандуғасы түгелеп һайрай,
Һайра, һайра, ҡошҡайым.
Шаула, шаула, тирәккәйем,
Шаула, шаула, ҡушҡайын,
Һағынғандыр дуҫҡайым!

Эй, Һәләүгем, Егәнем!
Һыуһаным, һыу бирегеҙ!
Айырылышыу еңел түгел,
Һағыштарға түҙегеҙ,
Һыуһаным, һыу бирегеҙ!

Торатауым!
Һиңә килгәс,
Хәсрәтте шатлыҡ күмер.
Тыуған яҡ һауаһын һулап
Йөрөүҙәре бер ғүмер!
Йөрөүҙәре бер ғүмер!

### Мөғжизә

Алыҫ-алыҫтарҙан осоп килгән
Өйрәк микән, әллә ҡаҙ микән?
Ҡалған ғүмеркәйҙәр был донъяла
Күпме икән, әллә аҙ микән?

Күп булһа ла, аҙ булһа ла ғүмер
Үкенесле генә булмаһын,
Күңелкәйҙәр китмәҫ моң-зар менән,
Ҡайғы-хәсрәт менән тулмаһын.

Иҫән булһа баштар, аяҡтарың
Арыу белмәй саба, ил гиҙә...
Яҡты донъяларҙа йәшәү, йәшнәү,
Түгелме ни үҙе мөғжизә?..

### Йыр дауам итер

Борондан донъяла
Бер изге йыр йәшәй.
Юҡ уны белмәгән
Бер әсәй, бер әсәй.

Әлли-бәү, бәлли-бәү...
Йом күҙең, улғынам,
Бәхетле бала бул,
Аҡ булһын юлғынаң.

Әлли-бәү, бәлли-бәү,
Йом күҙең, ҡыҙ балам,
Йыр йырлай һиңә ел,
Тау, урман, ҡыр, ялан...

Тик иҙрәп йоҡлайҙар
Сабыйҙар шул көйгә.
Инмәһен бер хәүеф
Ул өйгә, ул өйгә.

Асылһа күҙ-йондоҙ,
Тағы йыр башланыр.
Тик бүлһә баланың
Йоҡоһон бер ләғин,
Әсәһе, атлығып,
Йәшендәй ташланыр,
Иң изге наҙ йырын
Өҙөүсе фашланыр,
Тағы йыр башланыр -
Әлли-бәү, бәлли-бәү...

### Һуңғы сәләм

Тау башында мин үҙемә
Төйәк һайлап алайым.
Ҡояшҡа бағып мәңгегә,
Шунда ятып ҡалайым.

Бер таш булып ҡатырмын мин,
Ял итер бөркөт ҡунып.
Күкрәгемдән шишмә урғыр
Һуңғы сәләмем булып!..

* * *

Хистәремде ҡанат итеп
Елдәй етеҙ уйҙарыма,
Күпме яндым, күпме көйҙөм
Ғүмеремдең буйҙарына.

Шул яныуҙар, көйөүҙәрем
Сыҡтымы һуң юҡҡа ғына?
Нимә индем яҙмышымдың
Дөрләп янған уттарына?

Йөрәгемдә ялҡын ялмай,
Ҡасып китер юлдарым тар;
Ярай әле күңелемдең
Төпкөлөндә мәңге балҡыр,
Һис байымаҫ ҡояшым бар.

Эй тырыша мине яҙмыш
Уттарында күндерергә...
Тик бер ҡасан етмәҫ көсө
Шул ҡояшты һүндерергә!

### Ваҡыт етте!

Тыуыр быуатты кем ҡаршы алыр,
Кемдәр демократ тип аталыр?
Бөгөн ни, демократ ҡулдәген
Кейгән ирҙәр илде һаталыр.
Әле шундай ҡатлы-ҡотло заман,
Әммә аса ысын-ялғанын;
Донъя күрә кемдең кем икәнен,
Тоя нисек һулыш алғанын.
Ығы-зығы килә бәндә меҫкен,
Эй бутала ерҙә ҡара-аҡ...
Мөмкин түгел хәҙер һуҡыр булыу,
Бер ҡатлы ла уйға ҡалған саҡ.
Ауыҙы бешкән кеше өрөп ҡаба,
Һыуынғанын көтөп ҡалаҡтың...
Ваҡыт етте күптән ҡыҫҡартырға
Ҡойроҡтарын хәйлә, алдаҡтың!

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Был юлы өс һорауыбыҙҙы яҙыусы Лира ЯҠШЫБАЕВАҒА йүнәлттек.**

# ӘҮЛИӘЛӘР ИЛЕНДӘ ЙӘШӘЙБЕҘ!



**➔ Халыҡ араһында һеҙ әүлиәләр хаҡында яҙған китаптарығыҙ менән танылыу яуланығыҙ. Үҙегеҙ яҙған әүлиәләрҙең исемдәрен атап сығығыҙ әле...**

- Ҡабатлауҙан доға иҫкермәй, тиҙәр. Тағы бер ҡат халҡыбыҙҙың хәтеренә төшөрөп үтәйек. Тәүге әҫәрем Мөжәүир әүлиә хаҡында булды. Уны икешәр-өсәр меңләп ете-һигеҙ тапҡыр сығарҙым. Руссаһы ла, татарсаһы ла донъя күрҙе. Икенсе китабым Ғабдулла Сәиди хаҡында булды. Өсөнсө китабым Мөхәмәтсабир Халиков хаҡында ине. Яңыраҡ Зәйнулла ишан хаҡындағы ике китаптан торған романымды яҙып бөттөм. Беренсе киҫәге "Китап" нәшриәтендә баҫылып сыҡты, Аллаһ теләһә, икенсе өлөшө лә тиҙҙән китап булып сығыр. Был китаптарҙан тыш, Әбйәлил ишан, Сибәғәтулла ишан, Ғәлиәкбәр ишан, Шәмсетдин хажизар хаҡындағы яҙғандарым "Әүлиәләр аманаты" тигән күләмле китапҡа инеп китте. Быларҙан тыш та бик күп күренекле суфый ғалимдарҙың, аҡыл эйәләренең тормош юлын өйрәнеп, уларҙың хеҙмәтен, ижадын әҫәрҙәремә индереп ебәрҙем.

**➔ Мосафирҙың офоктары юл йөрөй-йөрөй киңәйә, тиҙәр. Белеүебеҙсә, һеҙ ҙә байтаҡ сәйәхәт иткәнһегеҙ.**

- Эйе, сәйәхәт тип атарғамы, әллә яҙыу өсөн кәрәкле материал эҙләү юлы, тиемме? Икенсеһе дөрөҫөрәк булыр. Минең әҫәрҙәрем һәр саҡ йә тарих, йә айырым кешеләрҙең яҙмышы менән бәйле. Ә быларҙы өйҙә ултырып ҡына яҙып булмай. Бына быйыл да, 2017 йылдың ғинуар айында, Үзбәкстандың Бохара, Сәмәрҡәнд, Ташкент, Тирмиз, Ҡарши ҡалаларында булып ҡайттым. Был сәйәхәт минә Шәмиғол хәлфә хаҡында яҙыу өсөн кәрәк булды. Ейәндәре әйтеүенсә, ул ҡырҡ йыл буйы Бохарала йәшәгән, уҡыған. Ҡырҡ йыл - уның ярты ғүмере, быны белмәйенсә, хәлфә хаҡында яҙыу мөмкин түгел. Мин унда Ташкент ҡалаһындағы архивҡа мөрәжәғәт иттем, ярҙам итергә һүҙ бирҙеләр. Бохара мәҙрәсәләре менән Ғабдулла Сәиди хаҡында яҙғанда уҡ барып танышҡайным инде.

**➔ Һеҙ "Зәйнулла ишан" әҫәрендә Уау Вәхит әүлиәнең тығыҙ йәшлек кенә малайҙы Ирәмәл тауына алып барып, унан баш алған йылғаларҙың сыҡҡан ерен күрһәтеп, үҙе уларҙы өшкөрөп йөрөүе хаҡында яҙғанһығыҙ.**

- Эйе, нәҡ шулай. Борон ишандар, әүлиәләр, суфыйҙар йылғаларҙың сыҡҡан ерен барып, уны ләмдән, мүктән, сүп-сарҙан таҙартып, өшкөрә торған булғандар. Был хаҡта "Табын әүлиәһе" повесында ла яҙылды. Сабир хәҙрәт хаж ғәмәлен ҡылып иленә ҡайтҡас, Көгөш буйына (хәҙерге Красноусольск) барып, шифалы шишмәләрҙең башын өшкөрөп сыға. Аллаһ ризалығы өсөн һәм шишмәләр ҡоромаһын, тонсоҡмаһын, һыуы гел сылтырап ағып ятһын, һәр кем унан йәненә, тәненә шифа алһын өсөн эшләй ул быны. Хәҙерге һымаҡ, экология тигән һүҙҙе ул саҡта белмәгәндәр, улар Аллаһтың китабы "Ҡөрьән"дә ҡушылғанды үтәгәндәр. Минең һәр әҫәремдә тәбиғәтте һаҡлау темаһы ҙур урын ала. Был йәһәттән айырыуса "Бөтәбеҙгә бер Ер шары" повесы әһәмиәтле. Был әҫәрҙә Аллаһ бирәү, кешелек донъяһы өсөн Ер шары бирәү, диненә, милләтенә ҡарамайынса, һәр беребеҙ үҙебеҙҙең йәшәгән еребеҙҙе һаҡларға тейешбеҙ, тигән фекер лейтмотив булып үтә.

Ер шары илаһи көстәр ҡурсыуына ла, унан бигерәк, беҙҙең, кешеләрҙең һаҡсыл мөнәсәбәтенә лә мохтаж. Был хаҡта дин ғалимдары ла, "Ҡөрьән" китабы ла әйтә. Һәр кем үҙе йәшәгән йортон ярата, ишек алдын тәрбиәле тота, уны төрлөсә биҙәй. Ә ниңә беҙ барыбыҙ өсөн уртаҡ булған йортобоҙҙо, Ер шарын, шулай яратмайбыҙ, биҙәмәйбеҙ? Ерҙән алырға ғына, уны вәхшиҙәрсә таларға ғына беләбеҙ. Кешелек донъяһы дәррәү тотоноп, барыбыҙ өсөн уртаҡ булған йортобоҙҙо һаҡлау эшенә тотонһа, Ер шарының меңәр йылдарға етерлек мөмкинлеге барҙыр, тим. Иманым камил, әҙәм балаһы үҙенең әҙәп-тәртибе, тырышлығы, еребеҙҙе ихлас яратыуы менән ахырызаманды меңәр йылдарға сигендерә алыр.

ИНТЕРНЕТТАН



# ТӘБИҒӘТКӘ...
## яҡыныраҡ йәшә

■ Гарвард университеты һәм Бостон балалар дауаханаһы хеҙмәткәрҙәре йөрәк етешмәүсәнлеге менән яфаланыусыларҙы дауалау өсөн робот уйлап тапҡан. Был ҡоролма йомшаҡ силикондан яһалған, ул йөрәк контурҙарына тура килә һәм уны бөтөн яҡлап уратып ала. Йөрәк мускулы тирәләй урынлашҡан һәм уның тышҡы ҡатламын имитациялаған пневматик күсергес ярҙамында ул ҡыҫыла һәм кире яҙыла, йәғни, йөрәктең тәбиғи тибеше көсәйтелә. Ҡоролманың тиҙлеген компьютер тикшерә һәм көйләй. Әгәр ҙә йөрәк функцияһы нормаға килһә, уға ярҙам итеүсе роботтың ҡеүәте түбәнәйтелә. Был ҡоролма пациенттың ҡан әйләнеше системаһы менән тура бәйләнешкә инмәй, тимәк, ҡан ойошоуы менән бәйле проблемалар тыумай. Был роботты тиҙҙән кешеләрҙә һынай башлаясаҡтар.

■ Насар кәйефтән ҡотолоу өсөн иртән 20 грамм ҡара шоколад ашарға була, тиҙәр. Тик ас ҡарынға татлы ризыҡ ашау дөрөҫ түгел. Ул ашҡаҙан аҫты биҙен әүҙемләштерәсәк, үҙ сиратында ул күп итеп инсулин бүлеп сығарасаҡ. Етмәһә, тәм-том аппетитты аса, 40 минуттан һуң ныҡ итеп асығасаҡһығыҙ. Ҡанда шәкәр кәмегәс, арыу һәм апатия барлыҡҡа килә. Шуға ла көндө дөрөҫ башлағыҙ - һыуҙа бешкән һоло буҡҡаһы, көрпәле икмәк ашағыҙ. Киви, әфлисун, алма һәм башҡа татлы емештәр үҙәкте көйҙөрә. Емеш-еләкте иртәнге аштан һуң ашарға ярай. Был яңы һығылған һуттарға ла ҡағыла.

■ Эскетер университеты орнитологтары асыҡлауынса, ҡоштарға, ағастарға, ҡыуаҡтарға ҡарап йөрөү нервы системаһын тынысландыра икән. Тикшеренеүҙәрҙә төрлө йәштәге, төрлө милләт вәкилдәре булған 270 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың финанс хәле лә төрлө булған. Кем тәбиғәткә яҡыныраҡ йәшәгән һәм йышыраҡ ҡоштар, ағастар күҙәтеү мөмкинлегенә эйә булған, уларҙың психик сәләмәтлеге лә яҡшыраҡ булған. Уларға стресс, депрессия, хәүеф тойғоһо тигән диагноздар ҙа ят.

■ Финиктарҙы күп итеп ашау ҡартайыу процесын яйлата, ти ғалимдар. Һынауҙарҙа ҡатнашыусылар ике ай дауамында даими рәүештә финик ашаған. Көнөнә 100 грамм ашарға кәрәк. Эксперимент барышында ҡатнашыусыларҙың ҡан составын күҙәткәндәр. Шулай уҡ бауыр һәм бөйөрҙәр эшенә иғтибар иткәндәр. Финиктар холестерин кимәлен 15 процентҡа кәметкән. Был иһә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен һәм атеросклерозды булдырмай. Шулай уҡ финиктар ҡандың әселәнеү, тимәк, организмдың ҡартайыу процесын яйлата. Был емеш артыҡ ауырлыҡҡа ла килтермәй.

■ Баш ауыртыуының сәбәптәре төрлө була ала, мәҫәлән, хроник арыу, көсөргәнеш кисереү һәм һәр осраҡта табип менән кәңәшләшеү мотлаҡ. Шулай ҙа нисек туҡланыуығыҙға ла иғтибар бирегеҙ, ти белгестәр. Улар 4 ризыҡты рациондан алып ташларға кәңәш итә. Уларҙың беренсеһе - оҙаҡ һаҡлана торған сырҙар. Уларҙың составындағы тирамин ҡан тамырҙарына насар йоғонто яһай, ҡан баҫымын күтәрә. Баш йыш ауырығанда сырҙың фета, моцарелла, пармезан кеүек төрҙәрен бөтөнләй ашамағыҙ. Сырҙы эремсек менән алыштырыу дөрөҫөрәк. Икенсеһе - һалҡын эсемлектәр. Бер стакан татлы эсемлектән һуң ҡанда глюкоза кимәле ҡапыл күтәрелә һәм ҡан тамырҙарының ҡапыл ҡыҫылыуына, һөҙөмтәлә, баш ауыртыуына килтерә. Баш ауыртҡанда ҡәһүәне айына бер тапҡыр ғына эсергә ярай, сөнки ул ҡан баҫымын күтәрә. Исемлектең дүртенсе юлын банан алып тора. Уның ҡабығында шулай уҡ тирамин бар.

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА...

# КЕМ УЛ ҮҪМЕР?
## Ул ниндәй иғтибар талап итә?



(Башы 6-сы биттә).

### Һөйләшеү мөһим

Кешене аңлау өсөн уның менән һөйләшеү кәрәк. Һәм беҙ һөйләшергә яратабыҙ ҙа. Эштә коллегалар менән, урамда күршеләр, өйҙә әхирәттәр, телефондан таныштар менән сәғәттәр буйына туҡтамайынса һөйләшә алабыҙ, әммә балабыҙ менән аралашырға ваҡыт тапмайбыҙ. Уны балаға һанайбыҙ, мөрәжәғәт итһә, ҡыуып ебәрәбеҙ, "юҡ менән булма" тип ауыҙын ябабыҙ, дәресен әҙерләргә ҡушабыҙ йәки һорауына яуапты интернеттан ҡарарға тәҡдим итәбеҙ.

Асылда, баланы һөйләшергә өйрәтергә кәрәк икән. Бәләкәй сағынан уҡ. Мәҫәлән, баҡсанан ҡайтып барғанда нимә ашағандар, ниндәй уйындар уйнағандар, нимә өйрәнгәндәр икәнен һорашырға кәрәк. Уның һөйләгәнен тыңларға, һорауҙар бирергә, ҡыҙыҡтарынан көлөргә, ярамағандарына төҙәтмә индерергә кәрәк. Мәктәпкә уҡырға төшкәс тә ошондай уҡ аралашыу дауам итергә тейеш. Бигерәк тә теге йәки был дәрестә нимә белергә теләгәне, әйләнә-тирәләге башҡа балаларға мөнәсәбәте, хис-тойғолары тураһында һорашыу мөһим.

Хис-тойғо тигәндән. Беҙ йыш ҡына балалар менән был турала һөйләшергә тартынабыҙ. Әммә тәүге һөйөү хистәре тап шул мәктәп йылдарында ярала бит. Үҙемдең миҫалды иҫләһәм, ҡыҙыма 11-12 йәштәр булғанда мәктәп формаһы кеҫәһенән мөхәббәт шиғыры табып алып, шаҡ ҡатҡайным. Һорашып ҡараһам, "Белмәйем", ти ҙә ҡуя. Ә яҙыу - уныҡы. Шул ваҡыт балам менән артыҡ дуҫ түгеллегем башыма барып етте. Албырғап ҡалдым. Ҡыҙымдың уҡыу көндәлегенә ҡул ҡуям да, ашатып-кейендереп, мәктәпкә оҙатыуҙан башҡа бер ни эшләмәйем, күңел донъяһы менән ҡыҙыҡһынмайым һәм ул донъяға инә лә алмайым икән дәһа! Шуға ла ул минән ситләшеп бара. Ошо хәлдән һуң баламды өйҙә саҡта ипләп кенә күҙәтә башланым. Көндәлек алып бара икәнен шәйләнем, тик уны мин бүлмәһенә баш тығыу менән йәшерә һала. Ахырҙа, был көндәлекте ҡулға төшөрөүҙән башҡа сара юҡлығын аңланым һәм ысынлап та уны табып уҡыным. Унан... ултырып илап алдым. Ҡыҙым өлкән класс ҡыҙҙары менән бәхәстә икән, уны хатта мәктәптән һуң көтөп тороп ҡыйырһытҡандар, класташ малайы яҡлашҡан. Ул малай минең ҡыҙыма оҡшай, малай ҙа уны оҡшата икән. Ҡыҙым һәм уның әхирәттәре бер саҡ тәмәке тәмләп ҡарамаҡсы булғандар ҙа, берейһенең сәс өлтөгө янып киткән. Йәш уҡытыусыны ыҙалатталар икән. Класс етәкселәре, баҡтиһәң, "кейенә белмәгән ауыл бисәһе". Мин дә туҡтауһыҙ талаптарым, кәйефһеҙлегем, әрләүем менән уның йәненә тейәм, имеш... Бигерәк тә "өслө" өсөн телефон һәм интернеттан сикләүемде күрәлмай. Ә бахыр һеңлеһе беҙҙең өйҙә бөтөнләй артыҡ кеше. "Йәшәгем килмәй" тигән ерҙәре лә бар. Шаҡ ҡаттым! Ун ике йәшлек, һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ кеүек йөрөгән баланың йәшәгеһе килмәҫлек ниндәй ҡайғыһы бар икән? Башта, был баланы ҡайыҙлап алайым микән әллә, тип уйланым. Баш вата торғас, быны файҙаһы булмаҫын, бары тик араһағы упҡынды ғына тәрәнәйтәсәген төшөндөм. Ныҡ ҡыйын булды, бер ҡәҙерле генә кешең, балаң һинән йөҙ борған шикелле ҡабул ителде. Бер-нисә көн баҫылып, йәшереп илап йөрөнөм. Шунан интернеттан, китаптарҙан психологик, педагогик яҙмалар эҙләп уҡый башланым...

Бер саҡ, Ғашиҡтар көнө алдынан, магазинға инеп, күп итеп валентинкалар, торт һатып алдым. Тәмлекәс менән сәй эскәндә шул открыткаларҙы сығарып күрһәткәйнем, ҡыҙҙарым аптырап китте. "Кемгә былар?"- тиҙәр. "Һеҙгә, - тим, - хәҙер иң матур малайҙарға яҙып сығабыҙ". Бәләкәсем шундуҡ эшкә тотоноп китте, өлкәнем ҡушылырға бик ашыҡмай, миңә ышанмағаны һиҙелеп тора. Мин уға: "Элек бындай байрам булманы, малайҙарҙы оҡшатһаҡ та, бындай матур открыткалар бүләк итә алмай инек", - тип һөйләп алдым. Кластарындағы малайҙарҙы, бигерәк тә теге малайҙы маҡтаным. Бала саҡтағы мөхәббәт тарихымды һөйләнем. Үҙем: "Һин дә һөйлә әле, берәй малай оҡшаймы һиңә, мин әрләмәйем дә, көлмәйем дә..." - тигән булып ныҡышам. Асылып китте балам...

Шул хәлдән һуң көн дә бүлмәһенә инеп ултырыуҙы ғәҙәткә әйләндерҙем. Нисек кенә арыған булһам да. Теге малайға әллә нисә йыл рәттән төрлө байрамдарға үҙем бүләк алып биреп ебәрҙем, уның бүләктәренә ҡыуандым. Балалар менән фантастик киноларға, пиццерияға йөрөргә өйрәндем. Ҡолаҡсындарҙа ашау, өй йыйыштырыу, дәрес әҙерләү һәм йоҡлауҙың "нормаль хәл" икәненә күндем. "Өслө"нөң трагедия булмауына, ата-әсәләр йыйылышына барғанда "иң мөһиме - һаулыҡ" тип уйлап, балаларым "иң-иңе" булырға тейеш түгеллекте лә ҡабул итергә тура килде. Эште, ижадты икенсе планға күсереп, күберәк иғтибарҙы ҡыҙҙарыма бүлә башланым. Шул саҡ ситтән эҙләгән әңгәмәсем үҙ өйөмдә булып сыҡҡанын аңланым. Күп оло ҡатындарға ҡарағанда уҡымышлы ла, төплө лә икән дә минең ҡыҙым. Әхирәт үк булмаһа ла, иң яҡын кәңәшсемә әйләнде ул. Мин дә уға хәлемде, уй-кисерештәремде, борсолоуҙарымды һөйләй башланым. Арабыҙ яҡынайҙы һәм әле лә, инде ҙур ҡыҙ булғанда ла, бөтөн кисерештәрен дә бүлешә, хатта әсәләре менән аңлаша алмаған ҡыҙҙарының да проблемаларын миңә еткереп, кәңәш ала...

Был тәжрибәлә нимә аңланым: баланды борсоған нәмәләрҙе етди ҡабул итергә кәрәк икән. Яуапһыҙ мөхәббәт икән, "үтә ул" тип кенә ситкә типмәҫкә, ә төрлөсә ярҙам итергә (иткән булырға, тийәйек ололарса). Кинйә ҡыҙымдың шундай мәлендә апаһы уға үҫмерҙәр өсөн ижад ителгән мөхәббәт романдары һатып алып бирҙе. Ун ике китап һатып алғайны, шуларҙы ай самаһы илай-илай уҡып, яҙылды ла китте бәләкәсем. Бер яҡтан, иғтибарға ла лайыҡ булмағандай ғына хәл кеүек, асылда, үҫмерҙәр араһындағы күп бәлә-ҡазаларҙың нигеҙе лә ошонда бит. Артабан кинйәмдең: "Ҡолағым шулай, аяғым шулай, нишләп мине матур итеп тыуҙырманың?" - тигән дәғүәләре барлыҡҡа килгәс, иң билдәле моделдәрҙең етешһеҙлектәрен эҙләп табып, шуларҙы төртөп күрһәтеп сыҡтыҡ. Үҙенең матур яҡтарын маҡтауҙы, шулар менән һоҡланыуҙы алға ҡуйып алдыҡ. Кейем һайлау, биҙәнеү әйберҙәрен белеү, сәсте үреү кеүек ялтыр-йолтор журналдарға аҡса түгергә тура килде. Хатта почтальон "Ошондай йыйын ҡый-һай һеҙгә генә килә", тип көлә торғайны. Ҡыҙымдың тегергә тип һатып алып боҙған туҡымаларының иҫәбе юҡ. Түңәрәктәрҙән бейеүгә лә, балетҡа ла, каратэға ла, тегеүгә лә, саңғыға ла, йөҙөүгә лә, тарихҡа ла, тағы әллә ниндәй аңлайышһыҙҙарына ла йөрөнөк. "Детектив әсәрҙәр яҙыусыһы" ла булып алып бер мәл. Ике ҡыҙымдың бе-

✓ Күп балалы ғаиләлә үҫкән балалар, ғәҙәттә, яңғыҙ йәки ике балалы ғаиләлә үҫкәндәргә ҡарағанда рухи яҡтан көслөрәк була икән. Атай-әсәйҙең уны әпәүләй алмауы, иңенә бәләкәй туғандары өсөн дә яуаплылыҡ ятыуы уны сыныҡтыра.

реһе лә тегенсе лә, тарихсы ла, спортсы ла түгел, әммә был маҡсат та булманы. Ҡыҙыҡһыналар икән - тыйманым. Шөғөлләнә, мауыҡҡан булһындар, тинем. Уларҙың теләгенә ҡаршы үҙемдең дә талаптарҙы ҡуйҙым. Уҡыу, әлбиттә, беренсе сиратта булды, унан өй эштәре һәм башҡаһы. Китап уҡыу ҙа башта талап ине, тора-бара был уларҙың ихтыяжына әйләнде. Бөгөн китап менән тәмләкәс араһында һайлау торһа, һуңғы аҡсаларына китап һатып алалар.

Әлбиттә, эсеү-тартыу кеүек яман ғәҙәттәр ҙә янамалы түгел. Теге мәл (күп йылдар элек) өлкәнемдең көндәлегендәге "тәмәке тарттыҡ" тигәнде уҡығандан һуң, шундай бер хәйлә уйлап тапҡайным. Флюорография үткәс: "Табип һинең үпкәңде тикшергәс, ҡыҙың тәмәке тартып ҡараған, шул күренеп тора, тип әйткәйне, шундай оят булды, шундай оят булды", - тигән булдым ҡыҙыма. "Әгәр һин тәмәке тартһаң, мин иң бәхетһеҙ әсәй булам инде", - тип ҡуҙ йәштәре лә сығарып алдым. Шунда балам үҙе лә илап, бөтәһен дә һөйләп һалды. Ҡабат улайтмаҫҡа ант итте. Хәҙер шуны иҫләп көләшәбеҙ.

Кинйәмде бәләкәйҙән эскелеккә, наркоманияға һәм башҡа яман ғәҙәттәргә нәфрәт менән тәрбиәләргә тырыштым. Һөҙөмтәлә ул ошо алама ғәҙәттәргә ҡаршы тематик һүрәттәр эшләне, шуларҙы таратты, йәбештереп сыҡты, инша, шиғыр кеүек ижади конкурстарҙа ҡатнашты, үҙенең класында саралар үткәрҙе. "Эскелектең иң йәш көрәшсеһе" тигән маҡтау хаты ла алды әле. Шул тәңгәлдә ҡыҙыҡ хәлдәр ҙә булып бөттө. Аңғармайыраҡ ҡалғанмын, был, һигеҙ йәшлек бала, интернеттағы "Абортҡа ҡаршы"лар төркөмөнә яҙылып, шундай тематик лозунгыларҙы принтер аша сығарып, туҡталыштарға йәбештерергә китеп бара икән. Апаһы күреп ҡалып, туҡтатып өлгөргән. Бер нисә көн буйы донъяла "аборт" тигән бала үлтереүсе бар икәнлеге хаҡында тетрәнеп һөйләне, уҡытыусыһын да, класташтарын да хәбәрҙар иткән булып сыҡты (аҙаҡ йыйылышта ишеттерҙеләр). Унан, эскелеккә ҡаршы һүрәттәрен күршеләрҙең ҡапҡаһына элеп ҡыҙыҡ итә торғайны. Күршеләр бик яҡшы кешеләр, әммә "һуғырға" яраттылар. Ике йорт араһында ел ҡапҡа бар ине. Ҡыҙым йәһәт кенә һүрәт эшләп, шул ҡапҡа аша йүгереп инеп, күршеләрҙең бәҙрәфенә лә, ишегенә лә, эт ояһына ла йәбештереп сыға. Күрше ағай: "Ярай, беҙ - гонаһлы, ә Аҡбайҙың ни гәйебе бар һуң, ҡыҙым?" - тип көлә ине.

Быны шулай, балалар һәм үсмерҙәр тормошо үтә лә ҡыҙыҡлы ул. Уның эсенә инә алыу өсөн бары һөйләшә белергә генә кәрәк. Шулай итеп, балаң менән һөйләш.

### Яуаплылыҡ ҡына кәрәк

Башта, үсмерлек - ул уйлап сығарылған төшөнсә, тигәйнек инде. Йәмғиәт тарафынан яһалма рәүештә проблема итеп күтәрелгән күренеш, тигәйнек. Ошо һүҙҙәрҙе яҙғас, әллә күпме күҙҙәрҙең шелтәле ҡарашын, ул ғына ла түгел, әрләргә тип ауыҙҙары асылыуын тоям. Әлбиттә, был тотош фәнгә, медицина хеҙмәттәренә, белгестәргә, педагогик төркөмдәргә, психологтарға һәм тағы ла әллә күпме хеҙмәттәргә эш биреп тороусы өлкә. Нисек итеп унан ҡапыл ғына һәм улай еңел баш тартһындар? Был һис мөмкин булмаған хәл. Әммә был хеҙмәттәрҙең барыһын да урап үтергә лә була. Әгәр ата-әсә ғаиләһендә балаларының был осорон "үткәреп ебәрергә", йәғни юҡ тип иҫәпләргә теләй икән - был мөмкин. Сиселеше лә ябай - яуаплылыҡ.

Был хаҡта әҙәбиәт тә, яҙмалар ҙа бар, тик беҙҙә, беҙҙең тәрбиәлә ниңәлер уларҙы ҡулланмайҙар. Баланың бала сағын нисек тә татлыраҡ, йәшлеген уйһыҙыраҡ, тормошон еңелерәк итергә ынтыла атай-әсәй. Тыуғандан алып уны батша итеп ҡуя. Уйынсыҡтар менән күмеп, ҡартайғансы үҙе кейендереп, һуйҙайғансы күтәреп, һорағанында түбәләге шәмгә тиклем бороп алып биреп, бар теләктәрен алға ҡуйып үҫтерә. Уның өсөн дәрес әҙерләй. Уның өсөн конкурстарға иншалар яҙа, һүрәттәр эшләй һәм балаһына маҡтау ҡағыҙҙары алып бирешә. Ә баланың хеҙмәте, һәләте юғында берәүҙең дә эше лә юҡ. Бары тик күңеле булһын, башҡалар алдында юғарыраҡ күтәрелһен. Унан шул баланы түләүле уҡыуға индерәләр. Һөнәр үҙләштереү өсөн. Теләге, һәләте, белеме барлыҡтан түгел, ә уны башҡалар араһында кәмһүр итмәүҙән сығып. Бында ла бала үҙе артыҡ көс һалмай. Артабан ул бала шул уҡыуы талап ителмәгән өлкәләргә эшкә китә. Мәҫәлән, уҡытыусы йәки юрист дипломлы һатыусылар, официанттар, баҙарҙа тороусылар менән донъя тулған. Киләһе этапта шул уҡ атай-әсәй әлеге баланың торлағын хәстәрләй башлай һәм башҡалар.

Күп балалы ғаиләлә үҫкән балалар, ғәҙәттә, яңғыҙ йәки ике балалы ғаиләлә үҫкәндәргә ҡарағанда рухи яҡтан көслөрәк була икән. Атай-әсәйҙең уны әпәүләй алмауы (яратмауы түгел), иңенә бәләкәй туғандары өсөн дә яуаплылыҡ ятыуы уны сыныҡтыра. Ҡолай икән - үҙе тороп китә, сөнки ололар мөһимерәк эш менән мәшғүл. Тәмле аҙыҡты үҙе ашамай, ҡустыһына йә һеңлеһенә бирергә мәжбүр, сөнки туғанының бәләкәслеген, уның яҡлауына мохтажлығын аңлай. Шул уҡ бәләкәс бала ололары килеүгә ашарға бешерергә лә маташасаҡ, сөнки тегеләре был хеҙмәт өсөн маҡтаясаҡ. Йәғни, кешенең мөһимлеген, кәрәклеген баһалау психологияһы был. Бәләкәй кеше ана шулай мөһимлектә тейешле һәм дөрөҫ итеп баһаланһа, уның күңеленә яуаплылыҡтың тәүге орлоҡтары төшөп ятасаҡ. Мәҫәлән, бәләкәскә "Күлдәгеңде бысратма!" тип кенә әйтеү, бәлки, һеңмәҫ, ә "Мин эштән арып ҡайтам, һин минә ярҙам ит - бысранма", тиеү уны уйландырасаҡ, әсәһенә ҡарата йәлләү тойғоһо уятасаҡ.

Йәш кешенең үҙенең башына ла "Һин - үсмер, һинең шундай сағың", тигән һүҙҙәрҙе һеңдерергә ярамай. Үсмерлек осоронда кисергән билдәһеҙлек, көйөфһеҙлек, ҡурҡыу, оялыу һ.б. тойғоларҙы кеше ғүмер буйына ла тойоп йәшәй ала. Эмоционаллек үсмерлектең генә күренеше түгел, был характер һыҙаты. Тышҡы яҡтан мәғлүмәт булмағанда, ул үҙендә ниндәйҙер һынылышлы мәл икәнен белмәйәсәк тә. Ниндәйҙер физиологик үҙгәрештәрҙе тәбиғәт әҙәмгә көсөргәнешһеҙ һәм зыянһыҙ индерә. Бынан проблема яһарға ярамай. Мәҫәлән, беҙ бит уны белмәнек, ә хәҙергеләр белә. Сөнки тышҡы яҡтан килгән мәғлүмәт уларҙың эске яғына ла үтеп инеп, реакция булдырып өлгөргән.

Үрҙә ҡарап үтелгән "Осоусы кит" ҡорбандары ла үсмерлеккә бәйле түгел. Был тема махсус рәүештә ҡабартыла, сөнки икенсе урындан алынған мәғлүмәттәр буйынса, ошондай система ҡорбандары булған ололар ҙа байтаҡ. Әлеге уйлап сығарылған үсмерлек осорон проблемалыраҡ һәм ярҙамға мохтажыраҡ итеп күрһәтеү өсөн был тәңгәлдә аҡса эшләү, халыҡтың иғтибарын нимәләрҙер йәлеп итеү йәки башҡа маҡсаттар менән яһалған сара. Эйе, кешеләр менән уйнаусы, уларҙың йәндәрен ҡыйыусы секталар бар - уныһы факт, тик улар әҙәмде йәш категорияһына бүлмәй. Тимәк, был тотош кешелек бәләһе.

Йомғаҡлап әйткәндә, кеше ул шундай идара итеп була торған механизм икән. Быны аңлағандар хакимлыҡ итә лә инде. Кемдәрҙер изге ниәттә, кемдәрҙер яуыз уйҙан сығып. Әйткәндәй, тәүбашланғыстан алып донъя үҙе лә ошо ике көскә нигеҙләнгән, уның урталығы юҡ.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Хаҡ эштәргә иғтибар туплағыҙ

Үҙегеҙ өсөн нимәне дөрөҫ тип һанайһығыҙ, шуларҙың исемлеген төҙөгөҙ. Уға рәхмәтле булып ҡарағыҙ, йышыраҡ күҙ һалығыҙ. Хатта уны ятлап алырға ла була. Ҡаҙаныштарығыҙ һәм көслө яҡтарығыҙға иғтибар йүнәлтеп, үҙегеҙҙең лайыҡлы, әһәмиәтле һәм үҙенсәлекле шәхес икәнлегегеҙгә инаныуығыҙҙы арттырығыҙ. Нимәнелер дөрөҫ эшләгән һайын был хаҡта иҫегеҙгә төшөрөргә, хатта бүләкләп ҡуйырға онотмағыҙ. Шулай итеп үҙегеҙ өсөн хаҡ булған эштәргә йүнәлтелгән тәртип схемаһын эшләйһегеҙ.

"Алиса мөғжизәләр илендә" китабында Льюис Кэрролл нисек үҙең булып ҡалырға һәм дөрөҫ ғәмәлгә иғтибар тупларға икәнен һөйләй.

Алиса: Мин тыуған ерҙә, кешеләр нимәне яҡшы беләләр һәм ниндәй эш яҡшы килеп сыға, шул эш менән шөғөлләнер өсөн шул өлкәне өйрәнәләр.

Аҡылдан яҙған эшләпәсе: Ә бында, мөғжизәләр илендә, беҙ түңәрәк буйлап йөрөйбөҙ. Әммә ҡайҙан башлағанбыҙ, шунда туҡтайбыҙ. Һин аңлашырға теләмәйһеңме?

Алиса: Нимәнелер яңылыш эшләһәк, ололар шуны табырға мәжбүр итә, артабан беҙ бер ваҡытта ла улай эшләргә тейеш түгелбеҙ.

Аҡылдан яҙған эшләпәсе: Ҡалай сәйер! Минеңсә, нимәнелер белеү өсөн уны өйрәнергә кәрәк. Әгәр өйрәнһәң, был хаҡта яҡшыраҡ беләсәкһең. Ә нимәгә нимәнелер асыҡларға һәм башҡаса уны эшләмәҫкә? Зинһар, дауам ит.

Алиса: Берәү ҙә беҙҙе дөрөҫ ғәмәлдән һабаҡ алырға өйрәтмәй. Дөрөҫ булмаған ғәмәлдәр аша нимәнең дөрөҫ икәнен аңларға тейешбеҙ. Ул ваҡытта, эшләргә тейеш булмағанды эшләмәйенсә, мин, моғайын, дөрөҫ эшләйәсәкмендер. Әммә мин беренсе тапҡырҙан уҡ дөрөҫ эшләргә теләйем...

Ниндәй бөйөк һабаҡ! Тормошоғоҙҙа дөрөҫ нәмәләргә иғтибар туплағыҙ. Теләмәгән нәмәгә иғтибар тупламағыҙ, нимә теләйһегеҙ - шул турала күберәк уйлағыҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: беҙ нимәгә иғтибар туплағанбыҙ, шунан күберәкте эшләйбеҙ!

### Яңы кеше

Китапта яҙылған ҡағиҙәләрҙе ҡулланғандан һуң һеҙҙә Яңы кеше тыуыр.

- Һеҙ көслө, маҡсатҡа ынтылышлы һәм ойошҡан шәхес буласаҡһығыҙ.
- Үсешегеҙгә ҡамасаулаған ялған инаныуҙарҙан арынырһығыҙ.
- Бер ваҡытта ла яңғыҙ булмаған изге күңелле кеше булырһығыҙ.
- Үҙ яҙмышын контролдә тотоусы үҙегеҙҙе тәьмин итерлек шәхес булырһығыҙ.
- Һеҙгә үҙегеҙҙе һәм башҡаларҙы хөкөм итергә тура килмәҫ.
- Башҡаларҙың хәленә инә белерһегеҙ.
- Яңы ҡиммәттәргә, ҡуҙаллауҙарға һәм инаныуҙарға асыҡ һәм уларҙы ҡабул итергә әҙер булырһығыҙ.
- Сәләмәт булырһығыҙ һәм оҙаҡ йәшәрһегеҙ.
- Һеҙ яңы рухи Аң формалаштырырһығыҙ.
- Үҙегеҙҙе һәм башҡаларҙы ныҡыраҡ ярата башларһығыҙ.

Бының өсөн бик күп көс һаларға тура киләсәк, әммә был мажара тормошоғоҙҙағы иң тулҡынландырғысы буласаҡ. Әгәр үҙегеҙҙе тулы ышаныс формалаштырыуға бағышлаһағыҙ, артабан бер ваҡытта ла элекке булмаясаҡһығыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Аҙағы).**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ТӘБИҒИ ҺУТ НИНДӘЙ?



**Магазиндарҙа һатылған пакеттағы һуттарға ҡараштар төрлө, кемдер уларҙы зыянлы, тип иҫәпләһә, кемдер ыңғай фекерҙә. Белгестәр әйтеүенсә, намыҫһыҙ етештереүселәрҙең билдәһеҙ порошоктарҙы иҙеп яһаған һуттары заманы артта ҡалған. Бөгөн магазин кәштәләрендәге һуттар сифаты менән айырылып тора. Шулай ҙа был һуттар тирәһендә ҡуйырған уйҙырмаларҙың ҡайһыны дөрөҫлөккә тап килә һуң?**

Беҙ бала саҡта "Yupi" тигән иреүсән һуттар һатыла торғайны. Өс литрлы банкаға һыу тултырып, ошо порошокты һалып бутайһың да, һут әҙер! Шуға ла күптәрҙең аңында бар һуттар ҙа ниндәйҙер химик порошоктан яһала, тигән фекер ҡалған. Әммә был дөрөҫ түгел. "Элекке хәленә ҡайтарылған" тигән яҙыу булған һуттар тәбиғи емеш-еләктән, йәшелсәләрҙән әҙерләнә. Йәғни, был төр емеш-еләк ҡайҙа үҫә, шунда йыялар ҙа, завод шарттарында һыуы бөткәнсе ҡайнаталар. Шул рәүешле уны икенсе ергә күсереп йөрөү уңайлыраҡ.

Һатыуҙағы һуттарға консерванттар, буяуҙар, шәкәр өҫтәйҙәр, тигән уйҙырма ла дөрөҫ түгел. Закон буйынса, был матдәләр булған эсемлек һут тип атала алмай. Ҡаптағы һутта калориялар ҙа емеш-еләктең үҙенекенә ҡарағанда ҙурыраҡ була алмай, 100 процентлы һуттарға шәкәр ҙә өҫтәлмәй. Минераль матдәләрҙең, емеш кислоталары, витаминдарҙың күпселек өлөшө, шулай уҡ һуттың төҫө һәм тәме лә тәбиғи булырға тейеш. Быларҙың барыһын да һаҡларға махсус технология буйынса яһалған ҡаптар ярҙам итә. Пакеттағы һут оҙаҡ һаҡланһын өсөн уны билдәле бер температураға тиклем йылыталар, шул рәүешле бактериялар юҡҡа сыға, әммә файҙалы матдәләр һаҡланып ҡала.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

| I | II | III | IV | V | VI | VII |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | |

**Йәшерелгән һүҙҙе табып, беренсе булып 8-987-241-99-85 телефон һандарына шылтыратыусы Флүрә Үҙәнбаеваның Өфөлә үтәсәк концертына билет отасаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?**

**9-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Өгөтө. Гөлнара. Сәбәләнә. Көбө. Ирмәк. Мари. Мөлкәт. Кәмә. Ялтырауыҡ. Аула. Буяу. Йүкә. Лесков. Але. Йәшел. Үгеҙ. Ҡуй. Кобра. Ауыл. Ойоҡ.

**Вертикаль буйынса:** Ильясова. Сәмситова. Көҙрәйеү. Гүйә. Гөлназ. Лама. Гөлфиә. Әйҙүк. Куб. Осло. Әминә. Штаб. Өйрәк. Руно. Рәхмәтуллина. Айсыҡ. Өрөк. Өмөтбаева.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Март (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (21) дүшәмбе | 5:50 | 7:20 | 13:30 | 17:57 | 19:27 | 20:57 |
| 21 (22) шишәмбе | 5:48 | 7:18 | 13:30 | 17:59 | 19:29 | 20:59 |
| 22 (23) шаршамбы | 5:45 | 7:15 | 13:30 | 18:01 | 19:31 | 21:01 |
| 23 (24) кесе йома | 5:43 | 7:13 | 13:30 | 18:03 | 19:33 | 21:03 |
| 24 (25) йома | 5:40 | 7:10 | 13:30 | 18:05 | 19:35 | 21:05 |
| 25 (26) шәмбе | 5:38 | 7:08 | 13:30 | 18:07 | 19:37 | 21:07 |
| 26 (27) йәкшәмбе | 5:35 | 7:05 | 13:30 | 18:09 | 19:39 | 21:09 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# РУХИ БАЙЛЫҠ

Ризыҡтары кәмеп киткән кеүек тойолған саҡтар тыуғанда ла Аллаһ ризалығы менән уларҙы үҙенең мөмкинлеге, мал-мөлкәте булғандар ҙа ярҙамынан ташламай.

Электән шулай килгән - өмәләргә йыйылып өй күтәрешкәндәр, ерен эшкәртеүҙә булышып торғандар, никах табындарын, туйҙарын үткәрешкәндәр, үлеп ҡалһа, ваҡыты менән иҫәпләшмәй, еренә, йолаларын үтәүгә артығын талап итмәй, һуңғы юлға оҙатып ҡуйғандар.

Әлбиттә, арала мохтаждар булып ҡына тора. Фәкирҙәрҙең хәленә инә белегеҙ, тип өйрәтә дин.

"Мал-мөлкәтеңдең күп булыуы байлыҡ түгел, ысын байлыҡ ул рухи байлыҡ була", - тигән бәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм.

Аллаһ Үҙе лә "...малын тотонғанда исрафҡа бармаған, һаранланып та тормаған, сама-сиктәрен үтмәгәндәр..." яғында.

*"Әл-Фурҡан" ("Айырыусы") сүрәһе, 67-се аят.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**18 март "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+

**19 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

**21 март "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма 12+

**22 март "Антигона"** (Ж. Ануй), драма 12+

**23 март "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+

**24 март "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 март "Ромео һәм Джульетта"** (У. Шекспир), трагедия. Башлана 18.00 12+

**22 март "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия 16+

**24 март "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**18 март "Ай булмаһа, йондоҙ бар..."** (Т. Миңнуллин), драма 12+

**23 март "Люксембургҡа барып ҡайтҡансы"** (М. Ҡунафин), фантасмагория 12+

**24 март "Китмәҫкә килгән ҡошом"** (Э. Йәһүҙин), комедия 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**18 март "Муха-Цокотуха"** (И. Романов). Башлана 12.00, 14.00 0+

**19 март "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). Башлана 12.00, 14.00 0+

БАҠСА

# ТӘРБИӘҺЕҘ УҢЫШ БУЛМАЙ



**Ҡара ҡарағат - беҙҙең төбәктә киң таралған культураларҙың береһе. Тәрбиәләп торһаң, унан мул уңыш алырға була.**

Ҡара ҡарағат ҡыуағы икенсе йылына уҡ уңыш бирә башлай. Ғәҙәттә, ҡыуаҡтарҙы шунда уҡ кебләә, ҡарышлауыҡ баҫа. Эште профилактиканан башларға кәрәк. Көҙ ҡыуаҡ төбөн йомшартып, 0,5 л көл һалырға, картуф ҡабығын күмергә. Ҡыш буйына һуған ҡабығын йыйып барығыҙ. Иртә яҙ, бөрөләр асыла башлағас та, һәр ҡыуаҡ аҫтына 2-3 ҡалаҡ карбамид һалырға, ә ҡыуаҡтарға баҡыр купоросының эзбиз һөтөндәге иҙелмәһен һибергә. Махсус магазиндарҙа уны "Бордосская жидкость" тип һорағыҙ, ул үҫемселектә фунгицидтар, йәғни, бәшмәк ауырыуҙарына ҡаршы көрәшеүсе химик матдәләр булараҡ ҡулланыла. Тағы бер аҙнанан һуған төнәтмәһе менән эшкәртегеҙ.

Ҡарағат сәскә атыр алдынан тағы ла бер тапҡыр һуған төнәтмәһе менән эшкәртергә кәрәк (һәр ҡыуаҡҡа - 1-1,5 л). Иғтибар итегеҙ, әгәр ҙә барыһын да дөрөҫ эшләһәгеҙ, ҡарағаттың сәскәһе күп буласаҡ. Емешкә төймәләнгәс, ҡыуаҡ тамырына суперфосфат (10 л һыуға 2 ҡалаҡ) ҡойоғоҙ һәм япраҡтарҙы тағы ла һуған төнәтмәһе менән эшкәртегеҙ.

Ҡарағат ҡоро тупраҡты яратмай, ҡыуаҡ төптәре гел дымлы булырға тейеш. Июль башына ҡарағат япраҡтарының төҫө сағыу-йәшел төҫтә буласаҡ, эре, сәләмәт емештәре менән ҡыуандырасаҡ. Ошолай тәрбиәләп торһағыҙ, хатта ябай сорттар ҙа эре емеш бирәсәк. Көҙ ҡыуаҡ төптәрен йомшартып, суперфосфат (һәр ҡыуаҡҡа 2-3 ҡалаҡ) һәм көл менән ашларға.

*ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ*



**Ғәҙәттә, йырҙар ижад итеүсе композиторҙың исем-аты тыңлаусыларға бик билдәле лә булмай, йырҙың данын күберәк йырсы күтәрә. Был бигерәк тә һәүәскәр композиторҙарҙың ижадына хас күренеш. Әммә бөгөнгө ҡунағыбыҙҙың йырҙары ғына түгел, үҙе лә башҡорт эстрадаһында лайыҡлы урын алып тора. Һүҙебеҙ һәүәскәр композитор, автор-башҡарыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Флүрә ҮҘӘНБАЕВА тураһында. Уның йырҙарын Хәниә Фәрхи, Фирүзә Париж, Артур Ҡунаҡбаев, Римма Амангилдина, Венера Юлгилдина, Рәил Өмөтбаев, Радик Юлъяҡшин һәм башҡа популяр йырсылар башҡара.**

# ӨФӨ ГЕЛ ҮҘЕНӘ ТАРТТЫ...

**➔ Флүрә апай, Һеҙ хәҙер Өфөлә ижад итәһегеҙ икән, баш ҡаланың ижади мөхитендә үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ?**

- Өфө мине гел үҙенә тартып торҙо. Ғүмерем буйы Мәләүеҙ ҡалаһында йәшәнем, Мәҙәниәт йортонда эшләнем. Унда ла ижад итергә мөмкинлек булды, шөкөр. Балалар үҫтергәндә һағышланып ултырырға ваҡыт та булманы. Шулай ҙа Өфө үҙенә тартып тик торҙо. Урындағы ижад итеүселәр йә йыр яҙҙырам, тип, йә концертта ҡатнашам, тип, төрлө сәбәптәр табып, килеп етә инем. Хәҙер рәхәтләнеп эшләйем, күңелдә шундай бөтөнлөк, һиллек. Мин үҙемде бәхетле яҙмышлы композитор тип иҫәпләйем. Бөгөнгө көнгә 100-ҙән ашыу йырым бар. Ҡустым, профессиональ композитор Юлай Үҙәнбаев та, яҙ, апай, тип дәртләндереп тора.

Республика буйлап концерттар менән сығырға тырышам. Йырҙарымды башҡарыусылар күп булғас, береһе бара алмаһа, икенсеһе бара, шулай тиҙ генә концерт бригадаһы төҙөп алабыҙ.

**➔ Башҡорт халҡы һүҙҙең бәҫен, баһаһын белгән халыҡ, быны халыҡ йырҙары ла раҫлап тора. Композитор булараҡ, йырҙың тексына иғтибар итәһегеҙме? Бөгөн башҡорт эстрадаһында мәғәнәһе бөтөнләй булмаған йырҙар ҙа бар бит?**

- Ниндәйҙер эске мәғәнәһе булғанда ғына шиғыр һинең күңел ҡылдарыңды сиртә ала. Һүҙҙәренә, мәғәнәһенә мотлаҡ иғтибар итәм. Мәләүеҙҙә эшләгән саҡта халыҡ йырҙарын күп башҡарырға, төрлө кимәлдәге конкурстарҙа күп ҡатнашырға тура килде. Шуға ла мин халҡыбыҙҙың зауығын яҡшы беләм. Быйыл "Юлдаш йыры - 2017" бәйгеһендә ҡатнашып йөрөйөм. Унда өсөн "Баяс" йырын яҙҙырҙым да, тағы бер тапҡыр, бына ҡайҙа ул тәрәнлек, матурлыҡ, тип уйлап алдым.

Хәҙер интернет заманы, шиғырҙы китапханаларҙан эҙләп алмайбыҙ, шиғыр яҙыусылар үҙҙәре тәҡдим итә. Минә башлыса социаль селтәрҙәр аша мөрәжәғәт итәләр. Минең бер ҡағиҙәм бар - һәр йыр хит булырға тейеш. Әгәр ҙә шиғыр беренсе уҡығанда уҡ күңелгә ята икән, уға йыр яҙыуы ла еңел була, ул башҡарыусыға ла, тыңлаусыға ла оҡшаясаҡ. Йырҙарымдың авторҙары республиканың төрлө төбәктәрендә, сит өлкәләрҙә, хатта сит илдәрҙә йәшәй. Йырҙы яҙғас та эш тамамланмай әле, уға аранжировка яҙыусыны ла, музыканттарҙы ла үҙем табам. Уйлап, стилдәр төрлө булһын, ҡабатланмаһын өсөн оҙаҡ итеп эшләйем. Эстраданы еңел өлкә тип ҡарарға ярамай, унда ла йырҙар сифатлы булырға тейеш. Һуңғы мәлдә минең "Ике балам", "Бала илай", "Яралар" йырҙарым бик билдәле булып китте. Уларҙы оҙаҡ ҡына йырлап йөрөрҙәр әле, тип ышанам. Ҙур юбилей концерты ойоштторорға тиғән хыялым бар ине, әлеге мәлдә шуға әҙерләнәм. Ул "Бар әле йәшәйһе" тип атала һәм 30 мартта РТИ Мәҙәниәт йортонда буласаҡ.

**➔ Йәште йылдар түгел, күңел торошо билдәләй, тиҙәр. Яңы бейеклекте ниндәй кисерештәр менән ҡаршы алдығыҙ?**

- Ҡатын-ҡыҙ өсөн, иң мөһиме, күңел бөтөнлөгө. Өлкәнәйгән һайын үҙенде, тормош мәлдәмәһенең яҡшыраҡ аңлай башлайһың. Шөкөр, балалар, ейән-ейәнсәрҙәр, туғандар ҡыуандырып ҡына тора, был йәһәттән донъям теүәл. Ижадҡа килгәндә, йәш үткән һайын, эшләнәһе эштәр, яҙаһы йырҙар һис кәмемәй, киреһенсә, күпкә өлгөрөп ҡалырға тырышаһың. 50 йәшемә тиклем мин барыһы ла алда әле тип уйлап йәшәп тик ятҡанмын. Шуға ла 50 йәшемде ауыр ҡабул иттем. Ғүмеремдең иң бейек нөктәһенә еттем, хәҙер бит тауҙан аҫҡа төшә башларға тура киләсәк икәнен аңлап, аптырап киттем. Был минә этәргес көс булды, күп йырҙар яҙҙым. Шул мәлгә лә ун йыл ваҡыт үтеп киткән. Шуға ла быйыл ҙур концерт эшләп, Өфөлә ижадташ дуҫтарымды йыйырға булдым. Барыһы ла саҡ башлана ғына әле, һәр йәшебеҙҙе ошондай юғары кәйеф менән ҡаршы алайыҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Үҙәнбаевтар - башҡорт сәнғәте өсөн үҙ кешеләр. Уларҙың һәр береһенең үҙ юлы, үҙ тауышы. Һәм уларҙың һәр береһе үҙенә, үҙ ижадына бик талапсан икән, тигән фекергә киләһең Флүрә апай менән әңгәмәләшкәндән һуң. Йыр бороңдан халҡыбыҙҙың юлдашы булған, бөгөн дә йыр ижад итеүселәр, йыр башҡарыусылар күп арабыҙҙа. Иң мөһиме, был йырҙар беҙҙең күңел талабына ғына түгел, халҡыбыҙҙың асылына тура килһен. Шул саҡта ғына Флүрә Үҙәнбаеваның йырҙары кеүек "халыҡсан" тигән баһа алыр улар.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

*ИҒТИБАР: АКЦИЯ!*

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлыуҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туктамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**47. Гүзәл Ситдиҡова "Күсле ил - көслө ил" китабы.** "Танылған яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл Ситдиҡованың донъяуи ҡанундарыбыҙға фәлсәфәүи ҡараштан сығып яҙылған "Көслө ил - күсле ил" тигән китабы "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә инергә тейеш, тип иҫәпләйем. Был үҙенсәлекле баҫмала халҡыбыҙҙың ғаилә йәшәйеш мәкәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә күрһәтелә. Китаптағы яҙмалар халҡыбыҙҙың алтын аҡылын йәш быуынға еткерә. "Күсле ил - көслө ил" китабы тапҡыр һәм йор әйтелгән, тормошта унышлы һәм ысын кеше булып йәшәргә әҙер аксиома булған мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә туплаған ысын мәғәнәһендәге ҡиммәтле йәшәйеш энциклопедияһы булып тора. Китап халҡыбыҙҙың быуаттар буйы һыналып раҫланған бай аҡыл-мираҫын ҡулланып, йәш быуында милли рух, илһөйәрлек, эшһөйәрлек тойғоларын, тормошҡа дөрөҫ, намыҫлы ҡараш тәрбиәләүҙә тос өлөш индерә. Сөнки тамырҙары ныҡ булған ғаилә ағасының япраҡтары, емештәре ырыҫлы, көслө була", - тип яҙа Нурзилә Һөйәрғолова, Сибай ҡалаһының 5-се мәктәбе уҡыусыһы.

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# ДОНЪЯНЫ ЕЛ БОҘОР,

## кеше араһын һүҙ боҙор

Ишлененән мең ғәйебе юйылыр, яңғыҙҙың бер хатаһы мең булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кешенең яраҡан ишәге була. Ул уны Шванти Дирайя тип исемләп йөрөтә. Был кеше ошо ишәге ярҙамында батшаға хеҙмәт итә, уның барлыҡ йөктәрен ташый. Берҙән-бер көндө Шванти Дирайя үлеп китә. Йөк ташыусы ҡайғыһынан сәсен яп-ялтыр итеп ҡыра һәм изге һыу менән ҡойона. Был илдә иң яҡының йә шәхес дәрәжәһендәге кеше үлгәндә генә шулай итәләр. Икенсе көндө йөк ташыусы батша һарайына барһа, уны батшаның вәзире күреп ҡала һәм ни өсөн сәсен ҡырыуы тураһында һораша. "Һин ишетмәнеңме ни? - ти йөк ташыусы. - Кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..." "Улай булғас, миңә лә сәсемде ҡырырға һәм изге һыу менән ҡойонорғамы ни инде? - ти вәзир. "Әлбиттә, шулай ит", - ти йөк ташыусы. Вәзир шулай итә лә. Уны батшаның кәңәшсеһе күреп ҡала һәм ни өсөн сәсен ҡырыуы тураһында һораша. "Һин ишетмәнеңме ни? - ти вәзир. - Кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..." "Улай булғас, миңә лә сәсемде ҡырырға һәм изге һыу менән ҡойонорғамы ни инде? - ти батша кәңәшсеһе. "Әлбиттә, шулай ит", - ти вәзир. Сәсен япялтыр итеп ҡырған кәңәшсеһен күргәс, батша аптырап китә һәм ни өсөн шулай эшләүе менән ҡыҙыҡһына. "Батшам, кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..." - ти кәңәшсеһе. "Улай булғас, миңә лә сәсемде ҡырырға һәм изге һыу менән ҡойонорғамы ни инде? - ти батша. "Әлбиттә, шулай ит", - ти кәңәшсе. Батша шулай итә лә. Уны батшабикә күреп ҡала һәм ни өсөн сәсен ҡырыуы тураһында һорай. "Һин ишетмәнеңме ни, һөйөклөм? - ти батша. - Кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..." "Ә кем һуң ул?" - тип һорай батшабикә. "Белмәйем, - ти батша. - Был яңылыҡты минә кәңәшсем әйтте". Батшабикә кәңәшсене саҡырта ла, унан "Кем ул Шванти Дирайя?" тип һорай. "Белмәйем, - ти кәңәшсе. - Минә был яңылыҡты вәзир әйтте..." Вәзирҙе саҡырталар һәм унан "Кем ул Шванти Дирайя?" тип һорайҙар. "Белмәйем, минә был яңылыҡты йөк ташыусы әйтте", тип яуаплай вәзир. Йөк ташыусыны саҡырталар һәм унан "Кем ул Шванти Дирайя?" тип һорайҙар. "О-о, батшабикәм, минең яраҡан ишәгем бар ине, уның исеме Шванти Дирайя. Ул үлеп ҡалды..." тип илаулап яуап бирә йөк ташыусы...**

**Был шундай аҡыл бирә: кеше һарыҡ көтөүе логикаһына бирелмәскә тейеш. Ул көтөүҙә юлбашсы һарыҡ соҡорға һикерһә, барыһы ла уның артынан һикерә. Улар "Был соҡорға ниңә беҙ ҙә һикерергә тейеш әле?" тип уйламай. Юлбашсы һикергәс, был дөрөҫ юл тип уйлай улар..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррират:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатникК» ауаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 524/03